ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13-19 апрель (алағарай) 2019
№ 15 (849)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуға хаҡы ирекле

**Донъяла торған ваҡытта шатлыҡтарҙы һөйләр, ҡайғыларҙы сисер, йәғни бушатыр өсөн иң яҡын бер кешегә мохтажлыҡ була. Атай-әсәйегеҙҙән башҡа бындай яҡын кеше булмаç. Сөнки улар баланың шатлығы һәм хәсрәттәре өсөн ҡулдан килгән бөтә сараларҙы алдан күрергә тырыша. Шуның өсөн серҙәрегеҙҙе атай-әсәйегеҙгә һөйләгеҙ.**
***Ризаитдин нәсихәттәренән.***


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Атай - талапсан,**
**әсәй - аңлаусан**



**8**

**Малайҙар тулы донъям - 3**



**Бәхет өсөн күпме уйынсыҡ кәрәк?** **9**

**Балалар тураһында түгел,**
**ә балалар өсөн китаптар кәрәк**



**11**

**Байҙар, ярлылар һәм ожмах,**



**йәғни Матди һәм рухи байлыҡ тураһында** **12**

**ТВ-программа** **14**


АФАРИН!

# БЕҘ БЕРГӘ!

**Өфөлә "Торатау" конгресс-холында республиканың 100 йыллығына арнап башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезы үтте.**

Уҡытыусыларҙы берләштереү, уларҙы һөнәри үçешкә дәртләндереү, шулай уҡ Башҡортостанда һәм Рәсәйҙә башҡорт телен һаҡлау, өйрәнеү һәм үçтереү маҡсатында ойошторолған сарала Башҡортостан Республикаһы, Ырымбур, Силәбе, Ҡурған, Һамар, Һарытау, Свердловск өлкәләре, Татарстан Республикаһы, Пермь крайы, Ханты-Манси автономиялы округы, Мәскәү ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, шулай уҡ Бүрәт һәм Саха (Яҡут) республикаларынан, Ҡырғыҙстандан, Сыуашстандан һәм Германиянан ҡунаҡтар, туған телдә белем биргән ойошмаларҙың директорҙары, хакимиәттәрҙең туған телдәрҙе уҡытыу буйынса яуаплы белгестәре, юғары уҡыу йорттары, йәмәғәтселек вәкилдәре ҡатнашты.

Тәүге көндә съезд делегаттары Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына, М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейына, М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһына, Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала Башҡорт гимназияһына барҙы.

Мәртәбәле сараның икенсе көнөндә уҡытыусыларҙы Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров тәбрикләне һәм бер төркөм мөғәллимдәргә юғары исемдәр тапшырҙы. Үҙенең телмәрен ул башҡортса һөйләне: **"Дөрөçөн әйткәндә, әҙерәк ҡурҡам. Хөрмәтле уҡытыусылар, бөгөн минең башҡорт телем өсөн икеле ҡуймағыҙ. Беләһегеҙҙер, мин 5 йәшемә тиклем Ишембай районының Һайран ауылында йәшәнем. Һуңынан атай-әсәйемдәр ҡалаға күсте, мәктәптә уҡытыу тик русса булды, тик русса ғына һөйләштем. Хәҙер миңә 55 йәш, шуға тиклем 10 йыл Мәскәүҙә эшләнем, унда аралашыу русса булды. Шуға яйлап-яйлап башҡорт телен юғалта башланым. Нимә әйтергә уйлайым: минең кеүектәр меңәрләгән. Беҙ тыуған илгә, туған телгә ҡайттыҡ. Әлбиттә, беҙ әлегә таҙа итеп башҡорт телендә һөйләшә алмайбыҙ. Шуға, телмәремә икеле ҡуймағыҙ, тием.**

**Бөгөн беҙгә бер нисә һорауға яуап табырға кәрәк: беренсенән, нисек итеп ололарҙы, балаларҙы башҡорт теленә һөҙөмтәле итеп өйрәтергә? Икенсенән, башҡорт телен өйрәтеүҙең методикаһын нисек итеп ябайлаштырырға, һөҙөмтәлерәк итергә? Өсөнсөнән, башҡорт телендә һөйләшеүҙе, башҡорт теленә өйрәтеүҙе нисек модаға индерергә, заманса итергә?**

**Тағы бер фекерем бар: башҡортса бер генә һүҙ белгәндәрҙе лә үҙ итәйек, ситләштермәйек. Иң һуңынан нимә әйтергә уйлайым: һеҙ ҡурҡмағыҙ, беҙ бергә! Был ҙур бурыстарҙы беҙгә бергә атҡарырға кәрәк".**

Артабан сара секция ултырыштарында дауам итте. Уҡытыусылар башҡорт телен уҡытыуҙың яңы алымдары, уҡыусыларҙың һәм уларҙың ата-әсәләренең туған телде өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныуын арттырыу, туған телдәр буйынса кадрҙар әҙерләү мәсьәләләрен тикшерҙе, Башҡортостан Республикаһында, Рәсәй Федерацияһы субъекттарында башҡорт телен һаҡлау, өйрәнеү һәм үçтереү мәсьәләләрен ҡараны, Башҡортостан Республикаһында туған телдәрҙе уҡытыу концепцияһына тәҡдимдәр индерҙе.



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *"Был арала тәбиғәт донъяһына арналған байрамдар - Халыҡ-ара коштар, Халыҡ-ара Ер-әсә, Умырзая, Экологик белем көндәре билдәләнде. Исмаһам, ошо көндәрҙә булһа ла тәбиғәттең изге төшөнсә икәнен иçкә алабыҙмы?"*

***Тәнзилә ДӘҮЛӘТБИРҘИНА, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш. Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты:*** Коштарға, тәбиғәткә һаҡсыл мөнәсәбәт тыуҙырыу, уларға иғтибарҙы арттырыу, ихтирам тәрбиәләү өсөн халыҡ-ара кимәлдә үткәрелгән ошондай көндәр үҙ маҡсатына өлгәшәме икән? Өлгәшәлер, тим. Йылдан-йыл кешеләр тәбиғәткә нығыраҡ тартыла. Әммә ҡайһы берәүҙәрҙең был ынтылышы саф һауала шешлек ҡурыуға ғына ҡайтып ҡала. Шулай ҙа, күптәр саф һауа эҙләп, газлы, туҙанлы, төтөнлө ҡалаларҙан ҡасып, ауыл ҡуйынына һыйына. Яҙын коштарҙы ҡаршы алыу, көҙөн уларҙы һағышланып оҙатыу; үләндәрҙең шытып сығыуын, сәскәләрҙең күҙ асыуын күреү, сикһеҙ күктә йондоҙ һанау бәхете тәбиғәт ҡосағында йәшәгәндәргә генә тәтей. Ә ҡалалағылар өсөн - матур хыял, хикмәтле мөғжизә.

Йылдан-йыл республикабыҙҙа мәктәп урмансылыҡтары ишәйә. Совет заманында улар ауыл һайын тиерлек ине. Хәҙер ҙә был ойошма етәкселәре, балалар, тәбиғәт һаҡсылары булараҡ, урманды ҡурсалау буйынса күп эштәр башҡара. Әммә уларҙың һәр эше бихисап документ тултырыуға ҡайтып ҡала. Үҙебеҙҙең бала саҡта йәй буйы зонала ятып бесән сапҡан, миндек әҙерләгән, ағас ботаған, һалам өйгән саҡтарҙы иçкә төшөрәһең дә, хайран ҡалаһың... Эш гөрләп бара ине, үҙебеҙ күмәк хеҙмәттән ләззәт ала инек. Ни хәл итәһең. Замана аҡсаға ҡарап ҡалды. Кәсеп итеүгә. Табыш алыуға. Етмешенсе йылдарҙа парта аçтында ҡайһы саҡ икмәк тешләмдәре тәгәрәп ятҡан саҡтар булды. Ҡайҙа ҡарама, ҡағыҙ йомарланып ташланған. Бөтә нәмә лә мул ине. Әсәйем бала-сағаның шундай тәртипһеҙлегенә гел хафалана торғайны. Өйҙә һыуҙы ла күберәк тотонһаң: "Һыуҙы исрафлама, бер мәл һыуҙың да кейәһе етер," - тиер ине. Ҡағыҙҙың (ҡағыҙ - ул урман), икмәктең кейәһе етте. Һыуҙы ла һатып ала башланыҡ. Артабан нимә булыр, уйлауы ла ҡурҡыныс.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр замандa ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТЕЛЕБЕҘҘЕ КҮТӘРМӘЛӘЙЕК!

***Бибинур БИЛАЛОВА, педагогик хеҙмәт ветераны:*** Милләттәштәргә әйтер һүҙем туған телебеҙ яҙмышына бәйле булыр. Ғаиләлә үҙ-ара башҡортса һөйләшеүҙе ғәҙәт итеп алайыҡсы, тимәксе булам. Ни өсөн гел русса һөйләшәбеҙ, баланың теле башҡортса асылһа, русса белмәҫ тип ҡурҡабыҙмы? Был бөтөнләй дөрөҫ булмаған фекер - үҙемдең балалар миҫалында әйтәм. Сөнки улар өс йәшкә тиклем тик башҡортса һөйләште, Өфөнөң Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһында уҡынылар һәм рус телен белмәүҙән ҡыйынлыҡ кисермәнеләр. Хәҙерге йәштәрҙең, балаға башҡортса өндәшһәк тә русса яуаплай ҙа ҡуя, өйрәтә алмайбыҙ, тиеүенә лә ышанырлыҡ түгел. Балалар русса һүҙ ҡатһа, "Мин мәрйә түгел, аңламайым", тип әйтә инем. Теләк кенә кәрәк, баланы барыбер туған теленә өйрәтергә була ул. Һигеҙ йәшкә тиклем бөтөнләй башҡортса белмәгән ейәнсәремде лә хатта өйрәтеп алдым, ул хәҙер Ҡытайҙа эшләй һәм һәр шылтыратҡанында: "Өләсәй, бында башҡортса аралашыр кеше юҡ, туған телемде онотоп ҡуймайым тип ҡурҡам, йышыраҡ һөйләшәйек", - тип кенә тора. Ә бит унһ минә, һинең телең кәрәкмәй, тигән саҡтары ла булғайны. Әсәйендә ятатһаң, башҡортса һөйләшергә өйрәнергә тейешһен, тип тыҡый торғас, башҡорт мәктәбендә уҡыны һәм хатта колледжға ла башҡортса диктант яҙып инде.

Ғөмүмән, туған телебеҙгә ҡағылышлы борсоулы мәсьәләләр күп инде ул. Радио тыңлағанда, телевизор ҡарағанда ла, былай үҙ-ара һөйләшкәндә лә ҡолаҡҡа салына дөрөҫ булмаған һөйләш. Мәҫәлән, "Минең оноғом", тип хәбәр һөйләй башҡорт өләсәйе. Ул ниндәй оноҡ булһын, ейән-ейәнсәр тигән матур һүҙебеҙ бар, йә булмаһа, улымдың улы, улымдың ҡыҙы тиһендәр ине. Шунан тағы, Өфөлә инглиздәр йәшәйме тип торорһоң. Бөтә алтаҡталар сит телдә яҙылған, ауылдан килгән кешегә түгел, ҡала халҡы ла аңлай алмай уларҙы. Яҙһындар ине башҡортса-русса матур итеп, сит ил кешеһе аңламаһа, һорашып белер ине әле. Инглиздәрҙән үҙ илендә русса йә башҡортса алтаҡта яҙып элгәнен кем күргәне бар?

Туған телебеҙҙең ҡәҙерен беләйек, йәштәргә лә шуны өйрәтеп тәрбиәләйек. Әйткәндәй, йәштәргә лә әйтер һүҙем бар: үҙ милләтенең ҡыҙы, улы менән ғаилә ҡорһондар. Бер ҡайнағам: "Ни өсөн ҡарға һайыҫҡанды иш итмәй, йәки турғай һандуғасҡа ҡарамай?" - тип әйтер ине. Был кешеләргә лә ҡағыла, һәр кемгә үҙ милләте ҡәҙерле, үҙ йолаһы яҡын була. Милләтебеҙҙе һәм туған телебеҙҙе күтәрмәләп, алға ҡуйып, ҡәҙерләп йәшәйек.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# "Был арала тәбиғәт донъяһына арналған байрамдар - Халыҡ-ара ҡоштар, Халыҡ-ара Ер-Әсә, Умырзая, Экологик белем көндәре билдәләнде. Исмаһам, ошо көндәрҙә булһа ла тәбиғәттең изге төшөнсә икәнен иҫкә алабыҙмы?"

**(Башы 1-се биттә).**

Тәбиғәттең изге төшөнсә икәнен аҡылы булған һәр әҙәм аңларға тейеш. Быны өсөн махсус көн билдәләү ҙә мөһим түгел. Тәбиғәтте килем, аҡса сығанағы итеп кенә ҡарау беҙҙе экологик һәләкәткә этәргәне көн кеүек асыҡ. Экологик тәрбиә өйҙән, ата-әсәнән башлана. Телгә һөйөүгә нигеҙ ғаиләлә һалынған кеүек, тәбиғәткә ихтирам да тәпәй баҫҡандан башланырға тейеш.

Нисәмә йылдар сәселмәгән баҫыуҙар кеше ҡулы көтөп ята! Ер-Әсә, тибеҙ. Мин шул етемһерәп ятҡан ерҙәрҙе балаһын ташлап киткән ҡарт әсәгә оҡшатам. Сит илдәрҙә ашъяулыҡ тиклем ерҙе лә тәрбиәләп алалар. Беҙҙә ни өсөн еребеҙгә шундай битараф мөнәсәбәт икән ул, тип уйланам.

Бөйөк Ш. Бабичтың һүҙҙәре ҡолаҡта яңғырай: "Тупраҡ - беҙҙең анабыҙ. ...Тупраҡ китһә - һау бул донъя, Йотолмаҡтыр самабыҙ". Ошо изге ерҙәребеҙҙе генә һата күрмәһендәр, тип борсолам. Шуға үҙ әсәбеҙҙең, үҙ тәбиғәтебеҙҙең ҡәҙерен үҙебеҙ беләйек. Киләсәк быуындарҙың мейеһенә тәбиғәткә һөйөү тойғоһон махсус көндәр аша ғына түгел, үҙебеҙҙең изге ниәттәребеҙ, ҡылыҡтарыбыҙ аша һеңдерәйек.

***Фәнилә ЗАКИРОВА, хаҡлы ялдағы пенсионер:*** Интернет селтәрендә бер ваҡыт шундай мәҡәлә уҡығайным: яҙмыш ҡушыуы буйынса сит илдә йәшәгән ҡатын ғаиләһе менән Рәсәйҙең бер өлкәһенә ҡайта ла, атаәсәләре, туғандары менән тәбиғәткә ял итергә сығалар. Тәүҙә ултырырлыҡ урын таба алмай йонсойҙар, сөнки быға тиклем ял итеүселәр үҙҙәренең артынан сүп-сар урындары ғына ҡалдыра. Таҙараҡ урын табып, матур байрам итәләр, ҡайтырға булғас, берәү ҙә ташланған сүп-сарҙы йыйырға уйламай. Ҡатын ғәҙәте буйынса һалып алған сүп тоҡон сығарып, ял иткән урындарын таҙалай башлай. "Ҡалдыр, берәү ҙә таҙартмай, барыһы ла шулай ҡалдыра бит", - ти уға туғандары. Әммә ул айваҙарына ҡуймай, таҙарттыра. Таҙалап бөткәс, бер туғаны сүп-сар йыйылған тоҡто ала ла, ҡамыштар араһына ырғыта. "Нишләп унда ташлайһың, алып ҡайтырға булмаймы ни?" - тип асыуланғас, тағы ла "Барыһы ла шулайта бит, беҙ уларҙан башҡамы ни", тигән яуап ишетә һәм шундай һығымта яһай: үҙегеҙ шундай сүп-сар ояһына әйләндерелгән тәбиғәттә йәшәргә лайыҡлы икән, зарланмағыҙ, йәшәгеҙ! Уйлап ҡараһаң, ысынлап та, үҙебеҙ йәшәгән мөхитте үҙебеҙ бысратабыҙ бит. Әле бына нимә бер аҙ күңелгә йылылыҡ өҫтәй: Евросоюз территорияһында 2021 йылдан пластик һауыттар һәм башҡа бер тапҡыр ҡулланыла торған һауыт-һаба ҡулланыу тыйыласаҡ. Европарламент: "Әгәр бер ниндәй сара күрмәгәндә, 2050 йылға Донъя океанында балыҡҡа ҡарағанда пластик күберәк буласаҡ", - тигән күҙлектән сығып, шундай закон ҡабул итә. Европа һыуҙарына йыл һайын 150 мең тонна пластик эләгә, донъя буйынса был һан 8 миллион тонна. Хатта диңгеҙ хайуандарының пластик сүп-сар ашап үлеүе лә билдәле. Шулай уҡ ҡош-ҡорттоң да һауаға осоролған шарҙарҙың ебенә, полиэтилен тоҡтарға буталанып үлеүе, зыянлауы сер түгел. Былдай миҫалдарҙы әллә күпме килтерергә мөмкин.

Әммә яуызлыҡты яуызлыҡ менән түгел, ә бары тик яҡшылыҡ менән генә еңеп була. Шуға күрә, кемдер башлап өлгө күрһәтергә, алама ғәҙәттәрҙе арттырырға түгел, ә бер яңғыҙың булғанда ла изге эштәр менән өлгө күрһәтергә кәрәк. Халҡыбыҙ бит борон-борондан ер ҡәҙерен белгән, тәбиғәттең дә тере икәнен аңлаған. Быны бөгөн, әлбиттә, мәжүсилек менән бәйләп, инҡар итеүселәр ҙә булыуы мөмкин, әммә борон атабабаларыбыҙ шул тиклем аҡыллы, зиһенле, зирәк булған. Улар тәбиғәттәге һәр нәмәнән рөхсәт һораған, һуңынан рәхмәт әйткән, һаҡсыл тотонған һәм был ғәмәлдәр көн һайын башҡарылған.

Әгәр бөгөн һәр нәмәне шулай календарь буйынса билдәләй башлаһаҡ, тиҙҙән кешенең тәбиғәткә кешеләрсә мөнәсәбәте календарҙағы шул бер көн сиктәрендә генә тороп ҡалыуы ла бик ихтимал бит.

***Айрат ҒӘЛИЕВ, "Янғантау" геопаркы хеҙмәткәре:*** Былдай байрам көндәре, умырзаялар, ҡоштар һәм башҡа тереклек һымаҡ уҡ, кеше лә тәбиғәттең бер өлөшө, тип иҫкәртә, аңлағанға ишара яһай. Сөнки ниндәйҙер бер арауыҡта тәбиғәткә ҡараш кирегә үҙгәреп, планетабыҙ экологик һәләкәткә табан атлай башлағайны инде. Беҙ, геопарк хеҙмәткәрҙәре, был көндәр ябай көндәр генә булмаһын өсөн ошо идеяларҙы пропагандаларға тырышабыҙ. Даими рәүештә төрлө саралар, конкурстар үткәрәбеҙ, балаларҙы ғына түгел, ололарҙы ла геопарк маршруттары буйлап экскурсияларға алып сығабыҙ. Күҙәтеүҙәремдән сығып, нимә әйтә алам: һуңғы ваҡытта кешеләрҙең тәбиғәткә ҡарашының үҙгәреүе, балаларына ла ошо йүнәлештә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләүе бик ҡыуаныслы. Сөнки, әйтеп китеүемсә, беҙ ҙә шул уҡ тәбиғәттең бер өлөшө һәм үҙебеҙҙең ниндәйҙер өлөшөбөҙ насар торошта булып, кеше үҙен уңайлы, бәхетле тоя алмай.

***Олег ЧЕГОДАЕВ, Рус география йәмғиәтенең Башҡортостан бүлексәһе ағзаһы, спортсы, сәйәхәтсе:*** Минеңсә, башҡа барлыҡ байрамдар кеүек үк, Халыҡ-ара ҡоштар, Халыҡ-ара Ер-Әсә һәм башҡа бик күп көндәр яһалма рәүештә барлыҡҡа килтерелгән, уларҙың ысынбарлыҡҡа бер ниндәй ҙә мөнәсәбәте юҡ. Әлбиттә, был даталар ҙа тәбиғәт, экология тураһында айырым һөйләшеү өсөн бер сәбәп булып тора, әммә бик йыш улар исем өсөн генә билдәләнә. Шунан үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ инде: йылда 365 көн бар һәм нисек итеп бер көн тотош хәл-торошто үҙгәртә алһын. Әгәр беҙ тәбиғәтте ысынлап, саф күңелдән, ихлас яратҡан кешеләр тәрбиәләргә теләйбеҙ икән, һәр көнөбөҙ Ер көнө, Ҡоштар көнө, Ел көнө, таҙа Һыу көнө булырға тейеш.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**



## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Быйыл Башҡортостан Төркиәлә һәм Австрияла сауҙа вәкиллектәрен аса, Италия буйынса мәсьәлә өйрәнелә. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ошо хаҡта белдерҙе һәм: "Башҡортостан продукцияһын донъя баҙарында танытыу буйынса "агрессив" сәйәсәт (яҡшы мәғәнәлә) алып барырға, ҙур халыҡ-ара иҡтисади форумдарҙа әүҙемерәк ҡатнашырға йыйынабыҙ", - тине.

✓ Башҡортостанда 50 ҡатын-ҡыҙ "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнә. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйҙы. Республика наградаһы менән аҡсалата премия биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән әсәләргә тапшырыла. 2019 йылдың 1 ғинуарынан "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнгән күп балалы әсәләргә бер тапҡыр бирелә торған матди ярҙам күләме 17 241 һум тәшкил итә.

✓ Башҡортостандың Үсеш корпорацияһын 2008-2010 йылдарҙа республика хөкүмәтендә эшләгән Раил Сарбаев етәкләй. "Өйгә ҡайтыуым менән бәхетлемен, минә күрһәткән ышанысы һәм үҙ командаһына саҡырғаны өсөн Радий Фәрит улына рәхмәт белдерәм", - тине Раил Сарбаев "Башинформ" агентлығы хәбәрсеһенә.

✓ Әнүәр Абдрафиҡов Стәрлетамаҡ районы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров хәбәр итте. Муниципалитеттың элекке башлығы Рөстәм Баһауетдинов үҙ теләге менән отставкаға китте.

✓ Төбәк хеҙмәттәшлегенә һәм үҫешенә ярҙам күрһәтеү Башҡортостан фондының идара итеү советы ултырышында быға тиклем "Торатау" конгресс-холы директоры булып эшләгән Илдар Байбулатовты фондтың яңы президенты итеп раҫлау тураһында ҡарар ҡабул ителде.

✓ Республиканың Хеҙмәт министрлығы Башҡортостанда йәшәүселәрҙең майҙа нисек ял итеүен иҫкә төшөрҙе. Хеҙмәт кодексына ярашлы, биш көнлөк эш аҙнаһында 13 ял һәм ике ҡыҫҡартылған эш көнө була. Шулай итеп, 1 май - Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы һәм 9 май - Еңеү көнө уңайынан төбәк халҡы быйыл 1, 2, 3, 4, 5 һәм 9, 10, 11, 12 майҙа ял итә. 30 апрелдә һәм 8 майҙа эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара.

*✓ **Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров һабантуйҙарҙа алкоголь эсемлектәр һатыуҙы, шулай уҡ мәктәпте тамамлаусылар кисәләрендә спиртлы эсемлектәр ҡулланыуҙы тыйырға ниәтләнеүен белдерҙе.***



ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# ШТРАФ ТА ТӘРБИӘ САРАҺЫ

**Көн дә эшкә йөрөгән юлда ун йыл рәттән хәҙер "тимер тәртипкә" әүерелгән шул бер үк күренешкә тап булаһың: Революцион урамындағы Финанс университеты менән 51-се ҡала поликлиникаһы араһындағы тыҡрыҡта машина юлы ситенән йәйәүлеләр өсөн тротуар бүленгән һәм ул бордюр менән айырып ҡуйылыуға ҡарамаҫтан, шунда менеп ҡунаҡлаған кемдәрҙеңдер ҡәҙерле машиналары янынан йәнеңде ҡулыңа алып тигәндәй автомобиль юлынан юрғаларға мәжбүрһең.**

Ҡағиҙә булараҡ һәм бигерәк тә тайғаҡ мәлдәрҙә был араны барыбер үтеп өлгөрмәй ҡалаһың: артыңдан асыуланып сигнал биреүсе машина ҡыуып та етә, ә береһе инде ҡаршыңа ла төшкән. Ирекһеҙҙән әлеге үҙемдең "законный" булһа ла йәйәүлегә урын ҡалмаған тротуарыма - теҙелеп торған машина араһына һыйынам. Их, инде килеп еттем тигәндә, был машиналарҙан кейем бысранды, кәйеф боҙолдо. Ә шулай ҙа шөкөр итәһең инде: анау тайғаҡта йығылып та ятһаң - өҫтөңә лә килеп менер ине бит ажғырып торған айғырҙай Шевроле...

***Рәсми белешмә:*** *Водитель ғәйебе менән үлемгә дусар ителгән һәр 3-сө кеше - йәйәүле; машина менән бәрҙереүҙән былтыр 165 йәйәүле яҡты донъя менән хушлашһа, 1265-е йәрәхәттәр ала.*

Эштән ҡайтҡанда ла подъезд тупһаһына юл таба алмай, бергилке машиналар араһында буталанаһың әле. Мин - ярай, ә анауы балаһы менән аҙапланған йәш ҡатынға нисек күтәрешмәйһең коляскаһын! Тотош юлдарҙы көпләп машиналарын теҙеп ҡуйған эгоист әҙәмдәрсә моңһоҙ ғына йәшәп булманы инде был донъяла. Дөрөҫ, машинала йәшәгәндәрҙең көлләһө лә тупһыҙ түгелдер ул: ҡайһы саҡ йәйәүле өсөн ҡуйылған билдә янынан юл аша сығырға ҡыймай торғанында, ипле генә килеп туҡтап, үткәреп ебәреүсе водителдәр ҙә осрап ҡуя, ләкин уларҙың күбеһе һиңә ҡарағанда ла нығыраҡ ашыға, нисек тә тәүҙә үҙе үтеп ҡалырға тырыша. Ундайҙар менән ярышып булмай, әлбиттә, үрә ҡатып тороп ҡалаһың, хатта ҡулды сикәгә терәп, честь бирергә генә ҡала...

***Рәсми белешмә:*** *Йәйәүлегә рөхсәт билдәһен һанға һуҡмаған водителдәр ғәйебе менән юл аша сығып барған кешеләрҙе бәрҙереп үлтереү осраҡтары 57 процентҡа артҡан.*

Тәрбиәһеҙлектә ярышыу кәрәкмәйҙә, аҙағы йүнле бөтмәйәсәк. Их, әҙәплелек, бер-береңә илтифат итеүҙә сәмләнешеп ярышырға ине беҙгә! Киләр микән бер саҡ шундай заман? Күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын: бер ниндәй ыҙғыш, ығы-зығы, юлдарҙа үлем-ҡыйралыштар, хатта һуғыш суҡмарҙары ла булмаҫ ине. Ә юлдарыбыҙҙа машиналар һаны артҡандан-арта бара. Яңыраҡ ҡына яңылыҡтарҙа, Башҡортостан автомобилдәр һаны буйынса илдә лидерҙар рәтендә, тигән хәбәр еткерелгәйне. Ысынлап та, Мәскәү ҡалаһы (3 млн 678 мең), Мәскәү өлкәһе (2 млн.710 мең), Краснодар крайы (1 млн 850 мең), Санкт-Петербург (1 млн 747 мең), Ростов һәм Свердловск өлкәләре (1 млн 320 мең һәм 1 млн 310 мең) һәм Татарстандан (1 млн 246 мең) ҡала Башҡортостан рәсми рәүештә теркәлгән 1 млн 228 мең автомашинаһы менән 8-се урында килә. Бер яҡтан, был күренеш - һөйөнөс: тимәк, хәллеләр, һәр хәлдә, кредит түләргә көсөнән килерҙәй урта ҡатлам арта бара, тигән һүҙ. Икенсе яҡтан, көйөнөс: бөгөн эксперттар транспорт тарафынан атмосфера бысраныуын төтөнө борлап торған элекке завод-фабрикаларға ҡарағанда ла хәүефлерәк, тип билдәләй. Унан ҡала юлдарҙағы ҡаза һәм фажиғәләр, ваҡытһыҙ өҙөлгән ғүмерҙәр хаҡында ла күп яҙҙыҡ инде; бер ҙә ҡабатлағы килмәй, ләкин ғибрәт һандар күҙ алдынан китмәй ҙә ҡуя.

***Рәсми белешмә:*** *Былтыр республикала 4 383 юл-транспорт фажиғәһе теркәлеп, унда 549 кеше һәләк булған, 5 меңдән ашыуы һәр төрлө йәрәхәт алған. Республика иҫерек водителдәр буйынса илдә 2-се, ә юл фажиғәһендә үлеүселәр һаны буйынса 4-се урында килә.*

Бындай тәртипһеҙлектәр һәм йәйәүлеләргә ҡарата асыҡтан-асыҡ золом күренештәрен бер ниндәй сара менән дә туҡтатырлыҡ түгел инде, күрәһең, шуғалыр ҙа бөгөн тап ошо йүнәлештә, йәғни, йәйәүлене яҡлау буйынса түгел, ә газондарҙы тапатыуға, унда туҡталҡа яһауға ҡаршы саралар хаҡында һүҙ алып барылыуы бер аҙ сәйерерәк тойолһа ла, аңларға була. **Тик бына ошонда тағы ла транспорт сараларының тротуарҙарыбыҙҙы баҫып алыуы хаҡында ла айырым-асыҡ әйтелергә тейештер.** Хәйер, аҡыллыға - ишара, тиҙәрме әле. Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбировтың, беҙ автомобилдәрҙе юл-хәрәкәт ҡағиҙәләрен, йәшәйеш ҡанундарын һәм халыҡ мәнфәғәттәрен хөрмәтләргә өйрәтәсәкбеҙ әле, тигән һүҙҙәренән был өлкәлә тәртип булдырылыуға бер аҙ өмөт уяна биреп ҡуя, тик бының өсөн һәр беребеҙгә - йәмәғәтселеккә, айырыуса ошо тәртипте күҙәтәсәк административ органдар әүҙемселәре, ирекмәндәргә лә уяу һәм принципиаль булыу талап ителәсәк. Юғиһә, тәртип боҙоусыларҙан ул миллиардтарҙы кем йыйыр? Әйткәндәй, тап ошо беҙҙең тәрбиәһеҙ автомашина хужаларының кеҫәһендә ята ла инде бюджетҡа бай ҡушымта сығанаҡ - штрафтар. Ә улар, иманым камил, бик күп буласаҡ

***Рәсми белешмә:*** *Ошо көндәрҙә БР Административ кодексына индерелгән төҙәтмәләр нигеҙендә хәҙер тыйылған урындарҙа, шул иҫәптән газондарҙа, йәшелләндерелгән биләмәләрҙә һәм спорт, шулай уҡ балалар майҙансыҡтарында туҡталҡа өсөн граждандарҙан - 1-2 мең, юридик берәмектәрҙән - 20-30 мең һум штраф түләтеү ҡарала.*

Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров республикала һәм баш ҡалабыҙ Өфөләге стихиялы туҡталҡалыҡ күренештәрен тулыһынса административ законһыҙлыҡ, тәртипһеҙлек, тип атаны һәм газондарҙа, спорт һәм балалар майҙансыҡтарын туҡталҡаға әйләндереүсе водителдәргә ҡаршы штраф сараһын әүҙемерәк ҡулланырға саҡырҙы. Ул тыйылған урындарҙа туҡталҡа яһаусы водителдәрҙән йылына 2 млрд. һум аҡса йыйып алыусы Мәскәү өлкәһен миҫалға килтерҙе, ә беҙҙә, тине ул, был һан ни бары 5 млн тәшкил итә. Дөрөҫ, ҡайһы бер "аҡыллы баш"тар, закон, йәнәһе лә, штраф йыйыу өсөн ҡабул ителмәй, тип мығырҙанып та алғайны, ләкин республика Башлығының Башҡортостанды, шулай уҡ башҡа ҡалаларыбыҙға һәр яҡшы йәһәттән өлгө булырға тейешле баш ҡалала тәртип булдырыу, уның граждандарын бер-береһен ихтирам итергә өйрәтеүгә ихлас ынтылышын бер нәмә лә туҡтата алманы: "Һеҙҙең менәнме, һеҙҙән башҡамы, ләкин был мәсьәлә барыбер хәл ителәсәк", - тине ул һәр ваҡыттағыса тура ярып. Эйе, тура ҡарап ҡыйыш һөйләү замандары артта ҡалды, инде тәртип ҡайта башлаһын ине йәшәйешебеҙгә, юғиһә, һәр кем үҙ туҡһанын туҡый барып, башҡаларҙы һанлауҙан туҡтаһа, ни буласаҡ? Күҙе тонған "текәләр" былай ҙа законды һанламай, уларҙы фәҡәт матди саралар - штрафтар менән генә тыйып тоторға булыр, булһа... Әйткәндәй, бөгөн шундай хәбәр алдыҡ: бер көн эсендә Өфөлә 576 водитель штраф түләгән дә инде.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

БЫНАҒАЙЫШ!

**Тик торғанда, "Ҡоҙағый, ата ҡаҙың күкәй һаламы?" кеүегерәк килеп сыҡты түгелме был... Һүҙ юҡта - һүҙ булһын, тигәндәй. Рәсәйҙең мәҙәниәт министрлығын әйтәм. Ошоға тиклем ғәмәлдә булып килгән спиртлы эсемлектәр етештереүҙе һәм уның әйләнешен көйләү һәм алкоголле эсемлектәр ҡулланыуҙы сикләү тураһындағы законға ҡаршы ҡотҡо таратып яталар түгелме? Тап бөгөн, эскелеккә ҡаршы анда-һанда ниндәйҙер көрәш саҡтылары башлана, тип кенә торғанда...**

# МӘҘӘНИӘТКӘ - ДОПИНГМЫ?

Эйе, тәгәрмәскә таяҡ тығыусылар тарих арбаһында күп булған, ләкин тап мәҙәниәт әһелдәре шундайын да аңһыҙ-абайһыҙ аҙымға барыр, тигән уй башҡа ла инеп сыҡмай ине. Культуралы эсеү, тимәк? Театр һәм концерт залдарының буфет һәм кафеларында рүмкәләп ҡойоу былай ҙа бар ине бит инде, тик был ғына аҙ тойола, тимәк, мәҙәниәт фронты әһелдәренә? Нимә, улар хәҙер нигеҙҙә балалар килә торған цирктарҙа, музейҙарҙа, күргәҙмә залдарында һәм шул уҡ мәҙәниәт учреждениелары булған кино залдарында, клубтарҙа, мәҙәниәт йорттарында, китапханаларҙа, архивтарҙа ла араҡы менән сауҙа итеүҙе ойоштororға теләйме икән ни? Әйткәндәй, ә бына зоопарктар менән нисек буласаҡ? Ҡыҙғаныска, улар ҙа бит мәҙәниәт ведомствоһына ҡарай...

Тәүҙә быларҙың тәҡдименең айышына төшөнә алмай йонсолдо: нимәгә нигеҙләнә һуң улар был аҡылһыҙ теләктәре аръылы? Ниндәй маҡсаттан сығып шундай белдереү яһамаҡ кәрәк? Шул саҡ башҡа ҡып итеп бер аҡыллы әҙәмдең әйткәне иҫкә төштө. Мәҙәниәт учреждениеһына кеше күңелен байытыу, рухи ләззәт кисереү һәм башҡа матур хис-тойғолар менән кинәнеү өсөн йөрөй. Ә беҙҙең мәҙәниәт ана шул юғары рухи ихтыяждарға яуап бирәме һуң? Әллә ысын культураға һыуһаған халыҡ массаларын ҡәнәғәтләндереүгә һәләтһеҙгә әйләндеме бөгөн мәҙәниәт? Боронғоно, иҫкене ҡабатламайынса, билдәле ҡиммәттәрҙе үҙләштермәйенсә, бөгөн беҙҙе борсоған проблемаларҙы бөгөнгөсә, заман юғарылығында күтәрәме мәҙәниәт? Илһамландырамы массаны бөгөнгө мәҙәниәт? Заманыбыҙ проблемаларына торошло, уларҙы дөйөм мәнфәғәт файҙаһына хәл итә алырҙай яңы геройҙарҙы күрһәтәме, тыуҙырамы уларҙы бөгөнгө мәҙәниәт? Мәҙәниәт чиновниктарының көсһөҙлөгөн, кәрһеҙлеген генә күрһәтә түгелме уларҙың бындай допинг тәҡдим итеүе? Ижад көсө менән булмаһа һуң, уның ҡарауы, эсеп кинәнер һәм ҡәнәғәтлек алыр тамашасы халҡы, уға күп тә кәрәк түгел, йәнәһе. Шулай, тимәк? Ә былай кантора яҙа, аҡса килә, чиновник кеҫә ягын ҡайғырта...

**Әйткәндәй, тап ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров һабантуйҙарҙа алкоголь эсемлектәр һатыуҙы, шулай уҡ мәктәпте тамамлаусылар кисәләрендә спиртлы эсемлектәр ҡулланыуҙы тыйырға ниәтләнеүен белдерҙе. Бик хуп, тимәк, Рәсәй мәҙәниәт министрлығы тәҡдиме, бәхеткә, республикабыҙҙың мәҙәни тормошона ғына түгел, ғөмүмән, йәшәйешебеҙ рәүешенә лә йоғонто яһай алмаясаҡ.**

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ 1 апрелдән 15 июлгә тиклем 18-27 йәшлек Рәсәй граждандары хәрби хеҙмәткә саҡырыла. Үҙәк хәрби округы яҙғы саҡырылыш буйынса Башҡортостан өсөн бурыстар билдәләгән - 5 меңгә яҡын кеше. Саҡырылыштың үҙенсәлеге шунда: егеттәрҙең психик һаулығына, девиант тәртибенә талаптар көсәйтелә. Йыйылыу пунктынан тәүге төркөмдө 25 апрелдә оҙатыу күҙаллана - Милли гвардия ғәскәрҙәренә.

✓ Башҡортостанда гемодиализға мохтаж пациенттарҙы йәшәгән ерҙән процедура башҡарылған урынға тиклем урындағы дауахана иҫәбенә алып барырға тейештәр. Был хаҡта Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Максим Забелин белдерҙе. Тейешле бойороҡ 2019 йылдың февралендә баҫылған, сирлеләрҙе йөрөтөүгә өҫтәмә аҡса бүленгән. Транспортировка талап ителгәндәрҙең барыһына ла дауалау учреждениеһына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

✓ Башҡортостанда һуңғы биш йылда етемдәр 1883 балаға, йәки 13 процентҡа кәмегән, тип хәбәр итте Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Милана Скоробогатова. Әлеге ваҡытта төбәктә 12 772 бала иҫәпләнә. Республикалағы етем балаларҙың дөйөм һанынан 91 проценты тәрбиәгә алған ғаиләләрҙә йәшәй. 1791 бала - стационар учреждениеларҙа. Хәҙер төбәктә 16 балалар йорто, бер Сабый йорто, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн 35 социаль приют, ике йорт-интернат бар.

✓ Башҡортостанда 638 ғаиләгә "Ауыл биләмәләрен тотороҡло үҫтереү" республика ярҙамсы программаһы сиктәрендә торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өсөн субсидия бирелә. Уларҙың 473-ө - йәш ғаиләләр һәм йәш белгестәр. Республиканың Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәтенә ярашлы, район хакимиәттәрендә торлаҡ төҙөүгә йәки һатып алыуға социаль түләүҙәр биреү тураһында сертификаттар тапшырыу башланды. Программаның шарттары буйынса, субсидияның суммаһы ғаилә ағзаларының һанына бәйле.

✓ "Ҡырағай йәнлектәр" тигән билдә ҡуйылған урында мышыны бәрҙергән водителдәр 80 мең һум күләмендә тәбиғәткә күрһәткән зыянды ҡапларға тейеш, тип иҫкә төшөрҙөләр Башҡортостандың Экология министрлығында. Тәгәрмәс аҫтына күбеһенсә мышылар һәм ҡоралайҙар эләгә. Быйыл тапатылған ҡабан өсөн зыян 30 мең һум, бүре менән төлкөгә - 200 мең һум, бурһыҡҡа - 12 мең, айыуға - 60 мең, ҡуянға 1 мең һум күләмендә ҡаплана.

**✓ Башҡортостан илдә аттар һаны буйынса лидерҙарҙың береһе булып тора. Ҡымыҙҙы тулайым етештереү күләмендә төбәктең өлөшө 45 процент тәшкил итә. Йылҡыларҙың күбеһе - Урал аръяғында.**



## ҠЫҪҠАСА

# ҺАЙЛАУҘАРҒА ӘҘЕРЛЕК

✓ **Сентябрҙең икенсе йәкшәмбеһе Рәсәй Федерацияһы субъекттарының дәүләт власы органдарына һәм урындағы үҙидара органдарына һайлауҙа берҙәм тауыш биреү көнө булып тора.** 2019 йылдың 8 сентябрендә Башҡортостан Республикаһы Башлығын, шулай уҡ айырым һайлау округтарында төрлө кимәлдәге депутаттар һайлау була. Башҡортостанда һайлау участкаларының эшен ике сәғәткә оҙайтырға теләйҙәр. Республика парламентының киләһе пленар ултырышында тейешле закон проектын ҡарарға ниәтләйҙәр. Әле ғәмәлдә булған ҡануниәт буйынса, төбәктә һайлау участкалары иртәнге сәғәт 8-ҙә асыла һәм киске 8-гә тиклем эшләй. Закон проектына ярашлы, участкалар иртәнге 7-нән киске 9-ға ҡәҙәр эшләргә тейеш.

✓ **"Берҙәм Рәсәй"ҙең төбәк бүлексәһе сәйәси совет президиумы ултырышында алдан тауыш биреүҙә ҡатнашыу өсөн кандидаттарҙың исемлеген раҫланы.** Уға Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров, Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров, Күмертау ҡалаһы башлығы Борис Беляев һәм "Рәсәй терәге"нең төбәк бүлексәһе етәксеһе Ләйсән Николаева инде. "Берҙәм Рәсәй"ҙәр кандидаттарҙың урындағы һәм беренсел бүлексәләрҙең секретарҙары менән осрашыуҙар графигын да раҫланы. Осрашыуҙар барышында "Берҙәм Рәсәй"ҙән Башҡортостан Башлығы вазифаһына дәғүә итеүселәр үҙҙәренең идеялары һәм сәйәси программалары менән таныштыра. Уларҙа партияның беренсел ойошмаһы секретарҙары - бөтәһе 2000-дән ашыу кеше ҡатнаша. 8 июндә төбәк бүлексәһенең конференцияһы була, ул "Берҙәм Рәсәй"ҙән республика Башлығы вазифаһына кандидат билдәләргә тейеш.

✓ **Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы һабантуйҙарҙа алкоголь һатыуҙы тыйыу тәҡдимен индерҙе.** Уның фекеренсә, төбәктә "Һуңғы ҡыңғырау", Йәштәр көнө һәм Белем байрамы уҙғарылған көндәрҙә ваҡлап һатыуҙы тыйған кеүек, һабантуй ойошторолған көндә лә тыйырға кәрәк. "Ниндәйҙер шатлыҡ булһа, мотлаҡ эсергә кәрәкме ни? Халыҡ һабантуйҙарға эсмәскә тейеш. Йәштәрҙең маңҡаға батып йөрөүе - бик әшәке күренеш. Быны этаплап эшләргә мөмкин. Әйтәйек, 15 июндә һабантуй Күгәрсен районында ойоштороло икән, тимәк, был көндә унда спиртлы эсемлектәр һатыуҙы тыйырға кәрәк", - тип белдерҙе республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Радий Хәбиров.

✓ **Әлеге ваҡытта республикала барған граждандар сходында ҡатнашыусылар алкоголь һатыуҙы тыйыу ваҡытын киске сәғәт 10-дан иртәнге 10-ға тиклем оҙайтырға тәҡдим итә.** Хәҙер Башҡортостан магазиндарында төнгө 11-ҙән иртәнге 8-гә ҡәҙәр спиртлы эсемлектәр менән сауҙа итеү тыйыла. Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә "алкоголгә ҡаршы" сходтарҙың йомғаҡтары буйынса шундай тәҡдим тураһында әйтте. Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров халыҡтың тәҡдимен хупланы һәм Дәүләт Йыйылышы депутаттарына майҙа ошо мәсьәлә буйынса парламент тыңлауҙары үткәрергә ҡушты. Ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа халыҡ йыйылыштарын уҙғарыу тәҡдимен республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Борайҙа республиканың төньяҡ-көнбайыш райондарының ауыл биләмәләре башлыҡтары өсөн семинар-кәңәшмәлә сығыш яһағанда белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, сходтарҙы "формаль булмаған шарттарҙа һәм сифатлы" үткәрергә кәрәк.

## ТӨРЛӨҺӨНӘН

# УҢЫШЛЫ ТӨБӘК

**Алдағы ике йылда Башҡортостан Рәсәйҙең иҡтисади яҡтан иң уңышлы төбәктәренең береһе буласаҡ. Был хаҡта Moody's рейтинг агентлығы тикшеренеүенә һылтанма менән ТАСС хәбәр итә. Рейтинг агентлығы аналитиктары фекеренсә, илдең иҡтисади имен субъекттары иҫәбенә Башҡортостан менән бер рәттән Ханты-Манси автономиялы округы һәм Татарстан, шулай уҡ Мәскәү һәм Ленинград өлкәләре ингән.**

"Нефткә хаҡтарҙың юғары булыуы һәм һумдың девальвацияһы һөҙөмтәһендә сеймал сығарған төбәктәргә инвестициялар көслө. 2019 йылда иҡтисади шарттар үҙгәрмәҫ тип көтәбеҙ", - тип билдәләй аналитиктар. 2018 йылда Башҡортостанда тулайым төбәк продукты 1,5 триллион һумға еткән тиерлек, йәғни бер йыл элекке менән сағыштырғанда, бер процентҡа күберәк. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышындағы сығышында республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ошо турала белдерҙе. "Сәнәғәттә етештереү күләме 3,4 процентҡа артҡан, был илдәге уртаса күрһәткестәрҙән юғарыраҡ (Рәсәйҙә - 2,9 процент). Бәләкәй эшҡыуарлыҡ субъекттары һәм ваҡлап сауҙа итеү әйләнеше әүҙемләшкән. Шуға ҡарамаҫтан, иҡтисади үҫеште дауам итеү өсөн нимә эшләргә кәрәклеген аңлау зарур", - тине Радий Хәбиров.

# АЙЫҒАЙЫҠ!

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы "Айыҡ ауыл" конкурсына старт бирҙе.**

"Айыҡ ауыл" республика конкурсы муниципаль райондарҙың ауыл биләмәләре араһында уҙғарыла. Ул ике этапта ойоштоpола. Тәүге этап 2019 йылдың 10 апреленән 31 августына тиклем райондар араһында үткәрелә. Унда бөтә ауылдар һәм ауыл биләмәләре ҡатнаша ала. Икенсеһенә, республика этабына, муниципаль райондарҙың еңеүселәре сыға. Конкурсҡа йомғаҡ 2019 йылдың 30 ноябренә тиклем яһала. Еңеүселәр республика Хөкүмәте дипломдары һәм аҡсалата премия (маҡсатлы) менән бүләкләнә: беренсе урын - 500 мең һум; икенсе урын - 250 мең һум; өсөнсө урын - 150 мең һум. Аҡсалата бүләк Ойоштороу комитеты ҡарары буйынса ауыл биләмәһен үҫтереү өсөн файҙаланыла. Конкурста әүҙем ҡатнашып, финалға еткән 10 ауыл биләмәһенә 30-ар мең һум тапшырыла. Бынан тыш, ойоштороу комитеты район, ауыл биләмәһе башлыҡтары, мәктәп директорҙары, әүҙем йәмәғәтселәр иҫәбенән 20 әүҙемсене лә (әүҙемселәр, уҡытыусылар, журналистар, пенсионерҙар, мәҙәниәт һәм спорт хеҙмәткәрҙәре) билдәләй. Улар Башҡортостан Хөкүмәте дипломдары һәм 10-ар мең һум премия менән бүләкләнә. Ҡатнашыу өсөн 12 майға тиклем 3472463259@mail.ru электрон адресына ғариза ебәрергә кәрәк. Конкурстың шарттары менән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының рәсми сайтында танышырға мөмкин. Конкурсты ойоштороусылар булып Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы менән берлектә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте, муниципаль райондарҙың хакимиәттәре, ғаилә һәм хеҙмәт, һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлыҡтары, Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы сығыш яһай.

# ЙЫЛҠЫ ҮРСЕТ!



**Башҡортостан предприятиелары һәм фермерҙары быйыл йылҡысылыҡты үҫтереүгә "2018-2020 йылдарҙа йылҡысылыҡты үҫтереү" ярҙамсы программаһы сиктәрендә республика бюджетынан 100 миллион һум самаһы аҡса алыу мөмкинлегенә эйә, тип хәбәр иттеләр республика Ауыл хужалығы министрлығынан.**

Бынан тыш, "Ауыл хужалығын үҫтереү һәм ауыл хужалығы продукцияһы, сеймал һәм аҙыҡ-түлек баҙарын көйләү" федераль программаһы аҡсаһын да ошо маҡсатта файҙаланырға була. Уны финанслауҙың дөйөм күләме 1,057 миллиард һум тәшкил итә, шул иҫәптән 2019 йылға - 344 миллион, 2020 йылға - 427,7 миллион һум. Дәүләт ярҙамы селекцияға сығым өлөшөн ҡаплауға субсидия рәүешендә, шулай уҡ йылҡысылыҡ предприятиелары һәм ипподромдар проекттарында дәүләт-шәхси партнерлыҡ программаларында ҡатнашыу өсөн бирелә. Башҡортостан илдә аттар һаны буйынса лидерҙарҙың береһе булып тора. Ҡымыҙҙы тулайым етештереү күләмендә төбәктең өлөшө 45 процент тәшкил итә. Йылҡыларҙың күбеһе - Урал аръяғында. 2018 йылда республикала 121,5 мең баш ат иҫәпләнгән, алдағы ике йылға бурыс - йылҡы иҫәбен меңгә арттырыу.

# МАШИНАҢ ГАЗОНДАМЫ?



**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары пленар ултырышта республиканың Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексына газондарҙа, балалар һәм спорт майҙансыҡтарында машиналарҙы ҡалдырған өсөн штрафтар индергән үҙгәрештәрҙе ҡабул итте. Законды ҡабул итеү өсөн 92 депутат тауыш бирҙе, 8-ҙе ҡаршы булды.**

Законда йәшелләндерелгән биләмәнең, йәғни газондарҙың билдәләмәһе "йәйәүлеләр, велойәйәүлеләр һәм велосипед юлдарының, юлдарҙың ҡаты япмаһы менән сиктәш булған үлән, сәскә һәм (йәки) ағас-ҡыуаҡтар менән ҡапланған ер участкаһы" тип билдәләнә. Газондарҙа парковка өсөн граждандарға - 1-2 мең һум, вазифалы кешеләргә - 5-10 мең һум, юридик берәмектәргә 20-30 мең һум штраф ҡаралған. Ҡабаттан хоҡуҡ боҙған өсөн штраф күберәк була: граждандарға - 3-4 мең һум, вазифалы кешеләргә - 15-20 мең һум, юридик берәмектәргә - 35-50 мең һум.

"Протоколды райондарҙағы административ комиссиялар төҙөй, штрафты ла улар яҙа. Берәйһенең газонда, балалар йәки спорт майҙансығында машинаһын ҡалдырып киткәнен күргән кешеләр ҙә комиссияға ялыуҙар менән мөрәжәғәт итә ала", - тине Дәүләт төҙөлөшө, хоҡуҡ тәртибе һәм суд мәсьәләләре буйынса парламент комитеты рәйесе Владимир Нагорный. Уның һүҙҙәренсә, закон ҡабул ителгәс, административ комиссиялар реаль эшләгән ҡоралға эйә булды. Парковка ҡағиҙәләрен боҙған өсөн түләнгән аҡса өҫтәмә парковка урындары булдырыуға һәм ҡоймалар ҡуйырға мөмкинлек бирә.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфөлә урында ашығыс ярҙам бүлексәһен ойоштороу менән бергә "аҡыллы" ҡабул итеү бүлексәләре асыла. Өфөнөң 21-се дауаханаһында ошондай бүлексә эшләй башлаған да инде. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров 4 апрелдә 21-се ҡала клиник дауаханаһында уҙған "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте" форматындағы кҫмә кәңәшмә барышында уның эш принциптары менән танышты.

✓ "Башҡортостан Республикаһының Гигиена һәм эпидемиология үҙәге" лабораторияһына ике кеше талпан ҡаҙалыуға зарланып мөрәжәғәт иткән. Белгестәр әйтеүенсә, быйыл талпандар ғәҙәттәгегә ҡарағанда иртәрәк уянған. Ҡағиҙә булараҡ, бөжәктәрҙең тәүге һөжүм итеү осраҡтары апрель башында теркәлә.

✓ Былтыр Башҡортостандың баш ҡалаһында 2017 йыл менән сағыштырғанда енәйәтселек 6,1 процентҡа кәмегән. Йәмғиәттәге был кире күренештең төп өлөшө (54 процент) урлашыуға тура килһә, 7 проценты - шәхес ғүмеренә ҡул һуҙыу, 4,5 проценты иҡтисади енәйәттәр алып тора. Йыл дауамында 3 мең самаһы наркоенәйәт асылған, шул иҫәптән уларҙың ике меңе наркотик матдәләр һатыуға тура килә. 775 кеше енәйәт яуаплылығына тарттырылған, 35 килограмм наркотик матдә тартып алынған.

✓ 2019 йылға Берҙәм дәүләт имтиханы, төп дәүләт имтиханы һәм дәүләт сығарылыш имтиханы тәҙмәләре раҫланды. Быйыл Берҙәм дәүләт имтиханы өс этапта уҙғарыла: ваҡытынан алдағы (20 марттан 10 апрелгә тиклем), төп (27 майҙан 1 июлгә ҡәҙәр) һәм өҫтәмә (3-20 сентябрҙә). Берҙәм дәүләт имтиханының ваҡытынан алдағы һәм төп осорҙары география һәм әҙәбиәт буйынса имтихандарҙан башлана. Имтихан осорҙарының һәр береһендә резерв көндәр ҡаралған.

✓ 2019 йылдың 25 майында Өфө һигеҙенсе йыл рәттән "Яҙғы бал"ды ҡабул итә. Башҡортостандың баш ҡалаһында мәктәп тамамлаусыларҙың байрамын, ғәҙәттәгесә, Совет майҙанында ҡаршылайҙар. Өфөнөң Ленин урамында "Мәктәп тамамлаусылар аллеяһы" ойоштоpола. Махсус стендтарға 11-се класс уҡыусыларының фотоһүрәттәре, уларҙың һайлаған һөнәре тураһында мәғлүмәт ҡуйыла.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Хакимиәттә был эш менән бишенсе йыл шөғөлләнәләр һәм ыңғай һөҙөмтәләр ҙә бар: иҡтисади әүҙем халыҡ һаны күбәйә, эшҡыуарҙар "күләгәнән" сыға, бюджетҡа һәм бюджет булмаған фондтарға килем иҫәбе арта.*



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Үткән аҙнала Өфөлә ҡаланы санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү айлығы сиктәрендә беренсе дөйөм ҡала өмәһе үтте. Был изге эштә төрлө йәштәге һәм төрлө быуын граждандар, шул иҫәптән мәктәп уҡыусылары, вуз һм ссуз студенттары, предприятие, ойошма, учреждениелар, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ тармағы хеҙмәткәрҙәре - йәмғеһе 103 мең кеше ҡатнашты. Ҡала хакимиәтендәге ҡала хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйенов алып барған сираттағы оператив кәңәшмә тап ошо теманан башланды.**

# ӨМӘЛӘР ГӨРЛӘР САҠ

Был көндө Өфө буйынса йыйылған сүп-сарҙы 955 берәмек техника полигонға ташыған, барлығы 2832 кубометр сүп-сар сығарылған. Киләһе ҡала өмәһе 13 һәм 20 апрелдә үтәсәк. Әйткәндәй, Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин: "Өмәләрҙе энтузиазм менән хуплап торған шул сама кешене күреүе ҡыуаныслы", - тиһә, Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров: "Миңә, "өмәләр - иҫкелек ҡалдығы", урам һепереүселәр таҙартһын, тигән фекерҙәр билдәле. Әммә урам таҙартыусылар ғына сүпләмәй бит. Беҙ дөйөм киңлекте һаман да үҙебеҙҙең яуаплылыҡ зонаһы тип күҙ алдына килтерергә өйрәнә алмайбыҙ. Мине либераль ҡарашлы ҡала халҡы әрләһә лә, өмәләрҙе барыбер үткәрәсәбеҙ. Әйткәндәй, көнбайыш илдәрендә кешеләр бергәләшеп таҙалыҡ өсөн бушлай көрәшә", - тип ҡәтғи белдерҙе.

Совет районының Урмансылар паркында ла "Йәшел дружина" акцияһы сиктәрендә өмә үтте. Унда хакимиәт хеҙмәткәрҙәре эшләне. "Баш ҡаланың үҙәгендә урынлашҡан был парк - халыҡтың яратҡан урындарының береһе. Һуңғы йылдарҙа ул төҙөкләндереү, яҡтыртылыу буйынса ҙур үҙгәрештәр кисерҙе. Үкенескә күрә, ҡыш дауамында паркта сүп-сар етерлек йыйыла. Беҙ күмәк көс менән Уваров яланын таҙарттыҡ, ҡар өйөмдәрен тараттыҡ һәм ҙур сүп-сарҙы йыйҙыҡ. Эш барышында күңелдәрҙе күтәреп, эшкә дәртләндереп төрлө көйҙәр урғылып торҙо, бер аҙҙан инде ялан кухняһы яғынан килгән тәмле еҫтәр танауҙарҙы ҡытыҡланы. Эш тамамланғас, акцияла ҡатнашыусылар бутҡа һәм ҡайнар сәй менән һыйланды", - ти хакимиәттең мәғлүмәт-аналитика бүлеге хеҙмәткәре Луиза Сәйфетдинова.

Оператив кәңәшмәлә ошо башҡарылған эштәргә йомғаҡ яһалды һәм "Таҙа Өфө - 2019" акцияһында ҡатнашып, өмәләге фотоларын инстаграм селтәренә һалып, иң күп тауыш йыйыусылар тәбрикләнде. Был акция киләһе аҙнала ла дауам итәсәк.

Һуңғы ваҡытта хакимиәттә автомобиль хужаларының транспорт сараларын газондарҙа парковкалауына ҡарата етди эшмәкәрлек башланды. Быға юл ҡуймау маҡсатында газондар тәпәш ҡоймалар йәки бағаналар менән һаҡланасаҡ. Был йәһәттән, юл буйҙарында 202 бағана ҡуйылған. Әммә миллионлы ҡала өсөн башҡарылған эштәрҙең күләме бик бәләкәй һәм Салауат Сәхи улы район хакимиәттәре башлыҡтарына күпме күләм талап ителгәнен асыҡларға һәм эш графигын билдәләргә ҡушты. Шулай уҡ был эш ихаталар эсендә лә башҡарылырға тейеш. Әлеге ваҡытта 380 метр ҡоймаланған, эш дауам итә. Санитар айлыҡ дауамында 1200 метр ҡойма ҡуйыу планлаштырылған.

Был юлы кәңәшмәнең төп темаһы булып рәсми теркәлмәй эшләүселәр мәсьәләһе торҙо. Салауат Хөсәйенов белдереүенсә, Дәүләт федераль статистика хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, былтыр баш ҡалала 15 йәштән һәм унан олораҡтарҙың дөйөм һанының 20 проценттан ашыуы ошо секторға йәлеп ителгән. Был хаҡта тулыраҡ мәғлүмәтте ҡала хакимиәтенең Хеҙмәт һәм социаль мөнәсәбәттәр бүлеге начальнигы Гүзәл Байғусҡарова бирҙе. Бындай эшмәкәрлек, тәү сиратта, ҡаҙна кеҫәһенә һуға, сөнки һалымдарҙың күпмелер өлөшө инмәй. Хакимиәттә был эш менән бишенсе йыл шөғөлләнәләр һәм ыңғай һөҙөмтәләр ҙә бар: иҡтисади әүҙем халыҡ һаны күбәйә, эшҡыуарҙар "күләгәнән" сыға, бюджетҡа һәм бюджет булмаған фондтарға килем иҫәбе арта. Һөҙөмтәлә граждандар социаль яҡтан яҡлаулыраҡ була. Мәҫәлән, Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексҡа үҙгәрештәр индереү хеҙмәт мөнәсәбәттәрен легалләштереү буйынса алып барылған эшмәкәрлеккә ҙур ярҙам була. Хәҙер хеҙмәт килешеүе төҙөмәгән осраҡта штраф күләме беренсе тапҡыр 100 мең булһа, икенсе тапҡыр 200 меңгә тиклем күтәрелде. Шулай уҡ Хеҙмәт кодексына индерелгән үҙгәрештәр хеҙмәт килешеүен гражданлыҡ-хоҡуҡи килешеү менән алмаштырыуға ла кәртә ҡуя. Дөйөм алғанда, ошо дүрт йылда Өфөнөң хеҙмәткәрҙәр менән хеҙмәт килешеүе төҙөмәгән һәм һалымдар буйынса түләүҙәр индермәгән 456 эш биреүсегә дөйөм күләме 9,2 миллион һумлыҡ штраф һалына. Бигерәк тә сауҙа, көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү, транспорт, төҙөлөш, йәмәғәт туҡланыуы тармаҡтарындағы шәхси эшҡыуарҙар тәртип боҙоусылар булып тора. Былтыр пассажирҙар ташыу эшмәкәрлеге өлкәһе ҡануниәт киңлегенә сығарылған. 2019 йылдың тәүге кварталында 3139 хеҙмәт мөнәсәбәте легалләштерелгән. Гүзәл Муса ҡыҙы белдереүенсә, башҡарылған эштәр тармаҡтар буйынса ҡабул ителгән ҡанундар һәм норматив-хоҡуҡи акттарға ла үҙгәрештәр индереү ваҡыты етеүен күрһәткән.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҠЫҪҠАСА

# ЯҘҒЫ САРАЛАР

✓ **9 майҙа Башҡортостандың барлыҡ район-ҡалаларында "Үлемһеҙ полк" Бөтә Рәсәй гражданлыҡ-илһөйәрлек акцияһы ойошторола.** "Рәсәйҙең Үлемһеҙ полкы" хәрәкәтенең төбәк штабы етәксеһе Вадим Курилов журналистарға быйыл Өфөлә унын маршруты оҙайтылыуы хаҡында һөйләне. "Колонна Октябрь проспекты менән Шәфиев урамы киҫелешендә теҙелә башлай. Ул "Галле округы" туҡталышына тиклем һуҙыла. Акция "Дан бульвары" туҡталышында тамамлана. Өфөлә "Үлемһеҙ полк" алдынан, былтырғы кеүек үк, өсмөйөш булып теҙелеп, аҡ костюм кейгән балалар бара. Уларҙың артынан Еңеү байрағы күсермәһен һәм 112-се Башҡорт атлы дивизияһы байрағын тотҡан төркөм эйәрә. Республика етәксеһе Радий Хәбировҡа, Өфө мэры Өлфәт Мостафинға һәм республиканың хәрби комиссары Игорь Харченкоға төркөмдө етәкләргә тәҡдим иттек", - тине Вадим Курилов.

✓ **Өфө хакимиәте 2019 йылға мәктәп уҡыусылары өсөн туҡланыу хаҡын билдәләне.** Мэрияның сайтында баҫылған документҡа ярашлы, балансьы йылы аш менән туҡланыу хаҡы уҡыусының йәшенә бәйле. Әйтәйек, башланғыс класс уҡыусыһы өсөн иртәнге аш хаҡы көнөнә - 55 һум, төшкө аш - 65 һум, унан һуң ҡапҡылап алыу 22 һум тәшкил итә. Өлкән класс уҡыусыһы өсөн (5-11 кластар) иртәнге аш - 60 һум, төшкө аш - 70 һум, унан һуң ҡапҡылап алыу 22 һум тора. Был хаҡтар ашатыу республика бюджетынан финанслау иҫәбенә тормошҡа ашырылған уҡыусыларға ҡағылмай. Мәктәп-интернаттарҙа уҡыусылар өсөн дүрт тапҡыр бушлай туҡланыу хаҡы Өфө бюджетынан бер балаға көнөнә 240 һум тәшкил итә. Бынан тыш, документта мохтаж ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән уҡыусылар өсөн льготалар ҡаралған.

✓ **Башҡортостан Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, республикала көндәрҙең ҡоро тороуына бәйле үлән яныу осраҡтары күбәйгән.** Ҡоро үлән яныуҙың 107 осрағы теркәлгән, шуның 19-ы тәүлек эсендә, 9 апрелдә, булған. Янғындың дөйөм майҙаны 130,97 гектар тәшил иткән. Башҡортостанда ут сығыу осраҡтарын ваҡытында асыҡлау һәм ғәйеплеләрҙе табыу буйынса 3113 кешенән торған 242 ведомство-ара мобиль төркөм ойошторолған. Улар 1105 берәмек техника менән тәьмин ителгән. Патруллек итеүҙең 627 маршруты билдәләнгән.

✓ **Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығында ағас ултыртыуҙың интерактив картаһы эшләй башланы.** 2019 йылдың 20 апреленән 20 майына тиклем Башҡортостанда халыҡ, хеҙмәт коллективтары, йәмәғәт ойошмалары һәм ирекмәндәр ҡатнашлығында ағас ултыртыу айлығы уҙғарыла. Быйыл бөтәһе 7 мең гектарҙан ашыу майҙанда йәш ағастар ултыртыла. Айлыҡ барышында 27 апрелдә "Ағас ултырт - ғүмер бүләк ит!" девизы аҫтында "Йәшел Башҡортостан" берҙәм республика акцияһы үткәрелә. Теләгән һәр кем акцияла ҡатнаша һәм ағас ултырта ала. Ағас ултыртыу өсөн ике дата билдәләнгән - 27 апрель һәм 18 май.

✓ **Өфөлә 22-29 апрелдә Дәүләт автоинспекцияһы "Махсус сигнал" тигән иҫкәртеү операцияһы уҙғара.** Ведомствоның матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, операция махсус тәғәйенләнештәге автомобилдәр ҡатнашлығындағы аварияларҙы иҫкәртеүгә һәм водителдәрҙең транспорт дисциплинаһын нығытыуға йүнәлтелгән. Автомобиль хужалары махсус тауыш һәм яҡтылыҡ сигналы булған машиналарға юл бирергә тейеш. "Инспекторҙар өҫтөнлөк сигналына иғтибар итмәгән һәм йыш ҡына ҡотҡарыусыларҙың, табиптарҙың һәм полицияның эшенә ҡамасаулаған автоһәүәҫкәрҙәрҙе асыҡлай алһын өсөн сара барышында ҡала урамдарына юл-патруль хеҙмәте, медицина һәм башҡа ашығыс хеҙмәттәрҙең машиналары сығарыла", - тип хәбәр иттеләр Өфөнөң ЮХХДИ ведомствоһында. Тәртип боҙғандарға 500 һум штраф йәки 1-3 айға водитель таныҡлығынан мәхрүм итеү янай.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Холецистит

❖ Көн һайын 1 стакан грейпфрут һуты эсергә.

❖ Ҡара торма һутына шул уҡ күләмдә бал өҫтәргә һәм көнөнә бер тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә.

❖ Мышарҙы сәй итеп эсеү яҡшы һөҙөмтә бирә. Уны көнөнә 1-2 тапҡыр яртышар стакан эсергә кәрәк. Дауаланыу өсөн консерваланған мышар ҡулланырға ла ярай.

❖ Көн һайын йәшел сәй эсеү шешеүҙе баҫа һәм үт ҡыуығында таштар барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай. 1 ҡалаҡ сәйгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һөҙөргә һәм эсергә. Һөт өҫтәргә лә мөмкин.

## Үксә ярылыуынан

❖ Бал - антисептик, ул яра йүнәлтеү сифаттарына эйә. Йоҡларға ятыр алдынан үксәләргә бал һөртөргә, целлофан менән ҡапларға. Иртән аяҡтарҙы йыуып, вазелин һөртөргә. 4-5 көндән яҡшырыу тойорһоғоҙ.

❖ 15 мл үҫемлек майына (кукуруз, зәйтүн, виноград һөйәктәре, миндаль, ҡабаҡ, көнбағыш майы) 1 йомортҡа һарыһы, 5 мл 9 процентлы аш һеркәһе ҡушырға. Шулай уҡ төнгөлөккә һөртөргә.

## Варикоз

❖ Ҡыҙыл күсәнле кәбеҫтәнең бер нисә япрағын яҡшылап йомшартып, ауыртҡан урындарға һалырға һәм ныҡ ҡыҫмай ғына бәйләргә. Кәрәк булған һайын япраҡтарҙы алыштырып торорға. Төнгөлөккә компресс эшләү кәңәш ителмәй, сөнки ул ҡан йөрөшөн насарайтасаҡ, был иһә сирҙе тағы ла көсәйтеп ебәреүе ихтимал.

❖ Варикоздан каланхоэ төнәтмәһе лә файҙалы. Ярты литрлы һауыттың яртыһына тиклем каланхоэ япраҡтарын тултырырға һәм өҫтөнә 70 процентлы спирт ҡойорға. Бер аҙнаға ҡараңғы урында тоторға. Кис һайын ошо төнәтмәне табандарҙан башлап тубыҡҡа ҡарай иплəп кенә һөртөргә (ыуырға ярамай!). Бер нисә тапҡыр ҡулланғандан һуң, һыҙланмай башларһығыҙ, әммә дауаны 4 ай тирәһе дауам итергә кәрәк.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*✓ Шартлы рәүештә уны "ҡусҡар биҙәктәр" тип әйтергә була. Шулай ҙа был төркөмгә ҡараған күп биҙәктәр үҫемлектәргә яҡын, ә ҡусҡарҙар өсмөйөшлө бетеүҙәр менән бергә ҡулланыла.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*

**Борон кейеҙҙе биҙәүҙә башҡа ысулдар ҙа ҡулланылған, мәҫәлән, һырыу. 1908 йылда Венгрия милли музейы өсөн Әбйәлил районы Тупаҡ ауылынан һырыу менән биҙәлгән кейеҙ нигеҙле йоҡа тиреле һунарсы муҡсаһы алынған. Башҡорт ауылдарында һырыусы оҫтабикәләр ҙә булған.**

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

ХХ быуатта башҡорттарҙа сигеү ҙә, аппликация һәм мозаикалы биҙәктәр ҙә туҡыма менән тышланған кейеҙҙәрҙә осрай. Әммә биҙәктәрҙә боронғо дөйөм төрки традициялар һаҡлана. Ҡаҙаҡ һәм ҡырғыҙҙарҙағы кеүек, башҡорттарҙа ла борон кейеҙҙең үҙен биҙәгәндәрҙер. Урал аръяғында, таулы райондарҙа күпләп осраған мөгөҙгә оҡшаған мотивтар, уларҙы бер буйға йәки рамкаға теҙеү һ.б. шулай уҡ малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе күп халыҡтарҙа, ҡаҙаҡтарҙа ла бар. Ҡаҙаҡтар менән тығыҙ бәйләнештә йәшәү көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш башҡорттары мәҙәниәтендә ҙур эҙ ҡалдырған, әммә был оҡшашлыҡтар уларҙың дөйөм этник тамырҙарынан да килеүе ихтимал.

Ғалимдар Р. Кузеев, Н. Бикбулатов орнаменттарҙы төрлө ваҡытҡа ҡараған 6 ҡатламға бүлеп, уларҙың 2-әүһе, боронғорағы, Үҙәк Азия һәм Көньяҡ Себер төбәктәре сиктәрендә формалашҡан төрки мәҙәниәте менән бәйле, тип билдәләй. Тап улар башҡорт кейеҙҙәрен биҙәү нигеҙендә ята. 1-се комплексҡа ябай геометрик фигуралар: өсмөйөш, ромб, квадрат, түңәрәк, мөйөштәр инә. Был элементтарҙың барыһы ла көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында, кейеҙ баҫҡанда уҡ һалынған биҙәктәрҙә лә, кейеҙҙе туҡыма тышлыҡ менән тышлағанда ла асыҡ күренә. 2-се орнамент комплексы ишелмә, мөгөҙгә оҡшаған фигуралар, "йүгерек тулҡындар"ҙан тора. Шартлы рәүештә уны "ҡусҡар биҙәктәр" тип әйтергә була. Шулай ҙа был төркөмгә ҡараған күп биҙәктәр үҫемлектәргә яҡын, ә ҡусҡарҙар өсмөйөшлө бетеүҙәр менән бергә ҡулланыла. Быларҙың барыһы ла кейеҙҙең туҡыма тышлығында күренә. Ҡайһы берҙә был биҙәктәрҙе кейеҙҙе баҫҡанда уҡ һалғандар.

Кейеҙҙе биҙәкле тышлыҡ менән тышлау шулай уҡ борондан ҡулланылғандыр. Улар ҡаҙаҡтарҙа, ҡырғыҙҙарҙа ла бирнә эсендә булырға тейеш. Шулай уҡ кәләштең эйәре өсөн айырым түшәк сигелгән. Туй кейеҙен ҡыҙыл, ҡара төҫтәге туҡыма менән тышлағандар.

Евразияла таралған кейеҙ баҫыу мәҙәни ареалынан йәшәгән еренең йыраҡ булыуы һөҙөмтәһендә, бер яҡтан, беҙҙә боронғо, хатта архаик биҙәү ысулдары һаҡланған. Икенсе яҡтан, төбәккә генә хас биҙәү алымдары барлыҡҡа килгән. Аппликация менән сигеүҙе берләштереү, орнаментлы биҙәктәрҙең күп төрлө булыуы башҡорттарҙы башҡаларҙан айырып тора. "Ҡусҡар" тамбур сигеүен ваҡ аппликация менән ҡушыу - көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында үҫеш алған художестволы алым булып тора. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының биҙәкле кейеҙҙәре бер декоратив стилдә эшләнгән йола башҡарыу әйбеҙәренең айырылғыһыҙ бер элементы булып тора.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ!*

# ҮҘ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘҘЕ БЕЛӘЙЕК!

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына арнап, "Башҡортостан Республикаһы дәүләтселегенең тыуыуы һәм аяҡҡа баҫыуы: 100 шәхес" тигән проект иғлан иткәйне. Түбәндә беҙ шул исемлекте баҫыуҙы дауам итәбеҙ.**



**Һыртланов Миһран Искәндәр улы** - Мәләүез районы Һыртлан ауылына нигеҙ һалыусы. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Башҡортостандың Ҡыпсаҡ кантоны кантон идаралығы рәйесе, идаралыҡ рәйесе һәм ер бүлеге мөдире (1918).

**Сәлтәшев Фәттәх** - яҡынса сама менән Көйөргәҙе районынан. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Башҡортостандың Ете ырыу кантоны идаралығы рәйесе (1918). Башҡорт ғәскәр идаралығында хеҙмәт итә (1919).

**Мәтин Шаһишәриф Миҙәтғәле улы** (1854-1919) - Баймаҡ районы Наҙар ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Ахун, Рәсәй Дәүләт думаһы депутаты (1906). Башҡортостан мосолмандары мөфтиәтенең беренсе мөфтөйө (1917). Бөрйән-Түңгәүер кантон идаралығы рәйесе (1917-1918).

**Мәтин Ғариф** - Татарстандың Аҡтаныш районы Таҡталасыҡ ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Мәтин башҡорт дворяндары затынан. Башҡорт үҙәк шураһы ағзаһы (1917).

**Мәтин Ғүмәр Батырхан улы** (1896 - ?) - Татарстандың Аҡтаныш районы Таҡталасыҡ ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Мәтин башҡорт дворяндары затынан. Ҡаҙан прапорщиктар мәктәбен тамамлай (1917). 3-сө Башҡорт пехота полкы командиры (1918). МВО чиндары резервында (1921).

**Мирбайысов Насретдин** - сама менән Борай районы Борай ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Башҡорт үҙәк шураһы ҡушыуы буйынса Борайҙа улыс-ара съезды ойоштора (1917).

**Ҡотоев Мәхмүт** - Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Башҡортостандың Көҙәй кантон идаралығы рәйесе (1918).

**Ғөзәйеров Мөхәмәтхай** -Мәсетле районы Сөләймән ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Башҡортостандың Ҡошсо кантон идаралығы рәйесе (1918).

**Ильясов Абдрахман Шәрәфетдин улы** - сама менән Ырымбур өлкәһе Ҡыҙылгвардейск районы Үрге Ильяс ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Башҡортостандың Туҡсоран кантон идаралығы рәйесе (1918).

**Ҡорбанғәлиев Мөхәмәтғабдулхай Ғәбиҙулла улы** - Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Миҙәйәк ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Арғаяш кантон идаралығы ағзаһы (1918). Рәсәй Көнсығыш сиге башҡорттарының Хәрби-милли идаралыҡ рәйесе (1920).

**Ҡорбанғәлиев Мөхәмәтхарун Ғәбиҙулла улы** (1892-1920) - Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Миҙәйәк ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Башҡорт хәрби советы ағзаһы (1918). Офицер, 3-сө Башҡорт пехота полкы командиры ярҙамсыһы (1918-1919). 3-сө Чита операцияһы барышында һәләк була.

**Булатов Мөхәмәтйән Ғәлиулла улы** (?-1920) -Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәте эшмәкәре. Башҡортостандың Бөрйән-Түңгәүер кантон идаралығы рәйесе (1918-1919).

**Гәрәев Заһит Хужа улы** (1896-?) -Саҡмағош районы Үрге Аташ ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Фрунзе исемендәге хәрби академия тамамлай. Башҡорт уҡсылар бригадаһының штаб начальнигы (1919-1920). РСФСР милли эштәр буйынса наркоматында БАССР вәкиле (1921-1922). Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана (1921). Хәрби эшмәкәр, хәрби фәндәр кандидаты (1943).

**Мырҙабулатов Сөләймән Шәнгәрәй улы** (1890-1931) - Ейәнсура районы Абҙан ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Башревком ағзаһы (1919). БашЧК рәйесе (1919-1920). БАССР-ҙың хәрби эштәр буйынса нарком урынбаҫары (1920). БАССР-ҙың ер эштәре буйынса наркомы.

**Унасов Хәжиәхмәт Ғәбиҙулла улы** (1887-1921) - Баймаҡ районы Байыш ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт итә (1918-1919). Бөрйән-Түңгәүер ихтилалы етәкселәренең береһе.

**Мәҡсүтов Сәхипзада Дәүләт улы** (1874-1942) - сама менән Бөрө өйәҙендә тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәте эшмәкәре. Беренсе Дәүләт думаһы депутаты (1906). Бөрө земский йыйыны депутаты. Борай ихтилалын етәкләй (1918).

**Ишмөхәмәтов Кинйәбай Хәйретдин улы** (1894-1937) - Белорет районы Семеновск ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Мортазин Башкавбригадаһының эскадрон командиры (1919-1920). Ҡыҙыл Байраҡ ордены квалеры (1922). Тамъян-Ҡатай кантон идаралығы рәйесе, милиция начальнигы (1922-1924). БАССР-ҙың Һаулыҡ һаҡлау наркомы (1937). БашЦИК ағзаһы.

**Ғафаров Шәмсетдин Шәйхетдин улы** (1896-1937) - Баймаҡ районы Ҡолсора ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Мортазин Башкавбригадаһының эскадрон командиры (1919-1921). Ике тапыр Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры (1921,1922). Йылайыр кантоны хәрби комиссары (1921-1923). Өфө ведомстволы милиция дивизионы командиры (1929-1937).

**Ҡаҙнабаев Заһиҙулла Мортаҙа улы** (1897-1943) - Йылайыр районы Балапан ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Мортазин Башкавбригадаһының взвод командиры (1919-1921). Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры (1921). Баймаҡ район советы башҡарма комитеты рәйесе (1930-1933). Баймаҡ, Ейәнсура райондарының милиция начальнигы (1934-1942).

**Фәттәхетдинов Хәлфетдин** (1892-1938) - Әбйәлил районы Салауат ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Мортазин Башкавбригадаһы эскадрон командирының ярҙамсыһы (1919-1921). Башҡортостандың Тамъян-Ҡатай кантоны "Асығыусыларға ярҙам" бүлегендә эшләй (1921). Салауат ауыл советы рәйес урынбаҫары.

**Яҡшыгилдин Шәмсетдин Ғәләүетдин улы** (1896-1978) - Йылайыр районы Матрай ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Мортазин Башкавбригадаһы взвод командиры (1919-1921). Йылайыр кантоны Матрай ауыл советы рәйесе (1922-1930). Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша.

**Ибраһимов Фәттәх Әбделмырҙа улы** (1882-1937) - Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Мортазин Башкавбригадаһының 28-се кавполк командиры (1919-1921). Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры (1921). Бөрйән-Түнгәүер кантонының хәрби комиссары (1921-1922). БАССР-ҙың Почетлы таусыһы.

**Ырысҡолов Ғәббәс Шәйхелислам улы** (1894-1937) - Әбйәлил районы Ярлыҡап ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Мортазин Башкавбригадаһының 27-се кавполк эскадрон командиры (1919-1921). Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры (1921). Тамъян-Түнгәүер улысы башҡарма комитеты рәйесе (1924). Әбйәлил район советы башҡарма комитеты рәйесе (1931). Учалы, Мәсетле райондары башҡарма комитеты рәйесе (1934).

**Аллабирҙин Заһиҙулла Сәғит улы** (1872-1937) - Йылайыр районы Сәлим ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Мулла. Башҡорт үҙәк шураһы ҡушыуы буйынса Сәлимдә улыс-ара съезды ойоштора. З.Вәлиди Сәлимдә Заһиҙулла Аллабирҙиында туҡтала (1919-1920).

**Алсынбаев Мирсаяф** - Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Имам. Башҡорт үҙәк шураһы ҡушыуы буйынса, Юныс Бикбов һәм Зәйнулла Иждәүләт менән берлектә, Ейәнсурала улыс-ара съезды ойоштора (1917). Өфөгә төрки-татарҙарының милли идаралығына Башҡорт ҡоролтайы вәкиле итеп ебәрелә (1918).

**Мағазов Ғимран** (?-1918) - Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Офицер. Башҡортостандың Бәләкәй ҡоролтай ағзаһы (1917). Башҡорт идаралығының беренсе полкын ойоштороусыларҙың береһе (1918).

**(Аҙағы. Башы 12-14-се һандарҙа).**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

Ғаиләм-ҡәлғәм

13-19 апрель (алағарай) 2019 йыл №15 (849)



БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!

# ЭШЛӘЙҘӘР

**Башҡортостандың эшләп йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙары ир-егеттәргә ҡарағанда белемлерәк һәм республика хеҙмәт ресурстарының яртыһын тиерлек тәшкил итә, тип хәбәр итә Башстат.**

Статистика мәғлүмәттәре буйынса, төбәк иҡтисадында мәшғүлдәр составында ҡатын-ҡыҙҙарҙың өлөшө - 47 процент. Уртаса йәше - 40. Улар араһында юғары белемлеләр - 36 процент самаһы (ир-егеттәр - 23 процент), урта һөнәри белемлеләр - 49 процент (ир-егеттәр - 58 процент). Ҡатын-ҡыҙҙар иҡтисади эшмәкәрлектең бөтә төрҙәрендә лә тиерлек ҡатнаша. Гүзәл зат хеҙмәте мәғариф (86 процент), һаулыҡ һаҡлау һәм социаль хеҙмәттәр (85 процент) өлкәһендә, сауҙала, ҡунаҡханаларҙа һәм дөйөм туҡланыуҙа (68 процент) өҫтөнлөк итә. Студенттарҙың да күпселек өлөшө ҡатын-ҡыҙҙар: юғары уҡыу йорттарында ҡыҙҙарҙың һаны - 55 процент, урта махсус уҡыу йорттарында - 43 процент. Әле республикала аспиранттарҙың дөйөм һаны 1543 тәшкил итә, уларҙың 752-һе - (48 процент) ҡатын-ҡыҙҙар. 2018 йылда республикала 2,2 миллион ҡатын-ҡыҙ йәшәгән - бөтә халыҡтың 53 проценты. Төбәктә йәмғеһе 4 миллион 51 мең кеше көн күрә.

# АЙЫРЫЛАЛАР

**Башҡортостанда ниндәй парҙар йышыраҡ айырылыша? Республиканың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитеты былтыр нисә парҙың һәм бергә йәшәгәндән һуң нисә йыл үткәс айырылышыуҙары тураһында статистика мәғлүмәттәрен иғлан итте.**

2018 йылда республиканың ЗАГС бүлектәре никахты тарҡатыу тураһында бөтәһе 15 407 акт теркәгән. Унан алдағы йылда 15 568 пар айырылышҡан.

6 104 парҙың ғаилә стажы 5 йылдан аҙыраҡ.

3 906 пар 5-10 йыл йәшәгәндән һуң никахтарын тарҡатҡан.

2 038 пар 10-15 йылдан һуң айырылышҡан.

1 623 пар 15-20 йыл үткәс айырылышырға хәл иткән.

1 736 ғаилә 20 һәм унан күберәк йыл уҙғас, тарҡалған.

Республиканың 12 районында һәм ҡалаһында айырылышыуҙар һаны кәмегән, улар - Архангел, Балаҡатай, Ғафури, Ҡариҙел, Стәрлетамаҡ, Тәтешле, Шаран, Белорет райондары, Белорет ҡалаһы, Учалы районы һәм ҡалаһы, Өфөнөң Октябрь районы. Уҙған йылда никахтар һаны ла кәмегән. 12 айҙа 25 388 ғаилә ҡоролған - 2017 йылға ҡарағанда 9,1 процентҡа аҙыраҡ.

# ТЫУҘЫРАЛАР

**Башҡортостанда 2018 йылдың 12 айында 22 807 ҡыҙ һәм 24 264 малай донъяға килгән. Республиканың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитетында билдәләүҙәренсә, республиканың 11 ҡала һәм районында ҡыҙҙар малайҙарға ҡарағанда күберәк тыуған.**

Улар - Әлшәй, Ауырғазы, Балтас, Бөрйән, Краснокама, Күгәрсен, Стәрлетамаҡ, Саҡмағош, Ишембай райондары һәм Ишембай, Күмертау ҡалалары, шулай уҡ Өфөнөң Совет районы. Йылайыр, Мишкә, Федоровка райондарында һәм Сибайҙа тыуған малайҙар һәм ҡыҙҙар һаны тигеҙ. "Былтыр ЗАГС бүлектәрендә тыуыу тураһында 47 411 акт теркәлгән, был уҙған йылға ҡарағанда 2 258-гә аҙыраҡ. 17 334 сабыйҙың ғаиләлә беренсе, 18 855-е - икенсе, 7 917-һе - өсөнсө, 2 178-е - дүртенсе һәм 1 033-ө бишенсе булып тыуыуы теркәлгән. Бынан тыш, республикала ошо осорҙа 607 игеҙәк һәм 10 өс игеҙ бала донъяға ауаз һалған", - тип белдерҙеләр ведомствола.

Өфөгә килгәндә, баш ҡалала 16 114 сабый тыуған. Тыуыу тураһында акттарҙың күбеһе Киров районының ЗАГС бүлегендә теркәлгән - 3 116. Икенсе урында Калинин районы - 2 838, өсөнсөлә Совет районы - 2 196.

Ағымдағы йылдың ғинуар-февраль айҙарында Башҡортостанда 88 игеҙәк ауаз һалған. Күбеһе Өфөлә - 41, артабан Стәрлетамаҡ килә - 5 һәм Ғафури районы - 3.

АСЫҠ ХАТ



# БЕҘ ҠУРҠЫНЫСМЫ,

## әллә һин ҡурҡаҡмы, башҡорт егете?

**Һаумы, башҡорт егете! Хәл-әхүәлкәйҙәрең нисек? Ҡайҙарҙа, ниндәй генә эштәр ҡыйратып йөрөйһөң? Бик күп башҡорт ҡыҙҙары менән һинең хаҡта фекер алышып, бәхәс ҡороп, һине эҙләп, юҡһынып, йән әрнеүҙәремде лә, йөрәк хистәремде лә хат аша еткерергә булдым әле.**

Бөгөн һылыу-һылыу аҡыллы ҡыҙҙарыбыҙҙың кейәүгә сыҡмай йөрөүенә ҡарайһың да, беҙҙең егеттәр ҡайҙа йөрөй икән, ниңә уларҙы күрмәй икән, тип аптырауға ҡалаһың. Эйе, бар бәлә беҙҙең ҡыҙҙарыбыҙға тиң булырҙай лайыҡлы башҡорт егеттәре осрамауҙа. Мин үҙем башҡорт ауылында үҫеп, башҡорт мөхитендә тәрбиәләнеп, башҡорт мәктәбендә белем алып һәм әле лә башҡорт зыялылары араһында эшләп йөрөгән башҡорт ҡыҙымын. Ауылға ҡайтһам, һаҫыҡ тәмәкеләрен борҡотоп, һәр ике һүҙ һайын тиерлек һүгенеү һүҙҙәре ҡыҫтырып хәбәр һуҡҡан, кәүҙәләрен тура ла тота алмай, бөкөрәйешеп бөткән егеттәрҙе күрәм. Ә эргәләренә яҡын да барырлыҡ түгел, ниндәй генә еҫтәр сыҡмай. Мин уларҙан ерәнеп ҡасам һәм йәлләп кенә ҡуям үҙҙәрен. Нимә генә тиһәң дә, улар ҙа бит башҡорт затлы егеттәр. Улар ҙа бит кемгәлер өйләнергә, ниндәйҙер ҡыҙҙы кәләш итеп алырға тейеш.

Ҡалала, әлбиттә, был йәһәттән башҡасараҡ хәлдәр, аҡыллы, булдыҡлы, әҙәпле генә егеттәр бар барлығын. Әммә бында инде беҙ уларҙан түгел, ә улар беҙҙән ҡурҡа. Булды ундай хәлдәр. Һинең саҡ ҡына көслө яғынды күреп ҡалһалар, шундуҡ өркәләр. Әллә яуаплылыҡтан ҡурҡалар, әллә көслө булырға теләмәйҙәр. Тик ошо урында бер генә нәмә аптырата: башҡа милләт ҡыҙҙарының татлы теленә әүрәй ала ла, ни өсөн башҡорт ҡыҙының ихтыярын, ғорурлығын, саялығын яуларға көс тапмай икән башҡорт егете? Ҡулына һыра тоторға оялмағанда, ниңә ҡыҙҙарға һүҙ әйтеп өндәшергә баҙнат итмәй икән? Беҙ һеҙҙе, егеттәрҙе, эҙләп, һеҙҙең менән танышырға теләк белдереп йөрөргә тейешме ни һуң? Беҙ бит сабыр ғына беҙҙе килеп табырығыҙҙы көтәбеҙ, юҡһа, күптән кейәүгә сығышып бөткән булыр инек, башҡа милләт егеттәренә.

Эйе, беҙҙең менән һәр ваҡыт сит милләт егеттәре танышырға теләк белдерә. Улар һәр ваҡыт ыҫпай кейенгән, үҙҙәрен бик әҙәпле тотҡан, юғары мәҙәниәтле, эшлекле, ҡатын-ҡыҙға ҡарата ҙур ихтирам йөрөткән ир-егеттәр. Тот та кейәүгә сыҡ, ул һине һөйөп-кәҙерләп йөрөтәсәк, ғаиләң дә муллыҡта йәшәйәсәк, балаларыңдың да киләсәге яҡты буласаҡ. Бер уйлап ҡараһаң, ҡатын-ҡыҙға бәхетле булыу өсөн башҡа бер ни ҙә кәрәкмәй һымаҡ. Әммә беҙгә бындай бәхеттең кәрәге юҡ. Беҙ үҙ нәҫелебеҙҙе арттырып, башҡорт балалары үҫтергебеҙ килә, милләтебеҙҙе күтәргебеҙ килә. Әммә быуынын да тота алмай, үҙ шәүләһенән үҙе ҡурҡҡан, ил хәстәрен түгел, ҡыҙ хәстәрен дә күтәрә алмаған егеттәрҙән батыр улдар, сая ҡыҙҙар тыуырмы? Ҡайҙа беҙҙең ҡыйыу йөрәкле, көслө ихтыярлы, белемле, баһадир кәүҙәле, бер күҙ ҡарашы менән ҡыҙ йөрәгенә уҡ ҡаҙарҙай аҫыл ир-азаматтарыбыҙ? Ҡайҙа һеҙ, эй, башҡорт егеттәре, ҡайҙа һеҙ? Әгәр ҙә һеҙ булһағыҙ, беҙҙең ауазды ишетһәгеҙ, битараф ҡалмағыҙ, тауыш бирегеҙ! Беҙ көслө булыуҙан арыныҡ, беҙ һеҙҙең терәк-таяныҫҡа мохтажбыҙ. Ә һеҙ беҙҙе нәзәкәтле, наҙлы гүзәл зат итеп күрергә теләмәйһегеҙме ни?..

ЫРЫҪБИКӘ.

УЙЛЫҒА -УЙ

# ҺӘР ВАҠЫТ БЫЛАЙ БУЛМАЯСАҠ...

**Тормоштоң төрлө сағы була. Ул гел уйын-көлкө, уңыш-бәхеттән генә туҡылмаған, шуға күрә лә бәхет менән бәхетһеҙлек, ҡайғы-шатлыҡ, аҡ һәм ҡара сиратлап килеүсән.**



Күңел тигәнең үтә нескә һәм һиҙгер, шуға ла оло еңеүҙәр, ҡыуаныстар кешене ете ҡат күккә күтәрһә, ауырлыҡтар, бөтмәҫ мәшәҡәттәр баҫып киткәндә әҙәм балаһының төшөнкөлөккә, өмөтһөҙлөккә бирелеп китеүе лә ихтимал. Әммә тормошта бер нәмә лә мәңгелек түгел, ҡыйын мәлдәр ҙә ваҡытлыса ғына, бары тик уларҙы сабыр ғына үткәрә белеү кәрәк, ә инде башың әйләнерлек уңыштарҙы ла дөрөҫ күтәреү зарур, сөнки улар ҙа тормошҡа хас шартлы төшөнсә икәне билдәле.

Күп осраҡта беҙ түҙемлегебеҙҙе юябыҙ, бер сиктән икенсеһенә бәреләбеҙ, килеп тыуған ҡатмарлыҡтар мәңге бөтмәҫ кеүек тойола башлай. Бер төрлөлөктән ялҡып, тормошто бер нисек тә үҙгәртә алмай ыҙаланған саҡтар ҙа булып ала. Бындай осорҙо һәр кем үҙенсә кисерә - көслөләр үҙен ҡулға ала, килеп тыуған хәлдән сығыу юлын эҙләй, ә кемдер насар ғәҙәт ҡолона әйләнә, үҙүҙенә йомола, сиргә һабыша, өмөтһөҙлөккә тарый.

Ҡыуаныс-шатлыҡтан, дан-шөһрәттән башы әйләнеп, аяғы ерҙән айырылған саҡтары ла йыш була әҙәм балаһының. Дәрәжәһен, байлығын, уңышын дөрөҫ күтәрә алмағандар ҙа етерлек. Шундай хәл-күренештәргә шаһит булырға тура килгәндә, ни эшләптер? Йыш ҡына ошо аҡыл иҫкә төшә.

Урам буйлап китеп барған ир юл ситендә ултырған ҡартты күреп ҡалған да:

- Бабай, аҡыллы кеше булараҡ, әйт әле, мин йәш, көслө ир булһам да, эш таба алмайым, ҡатыным да эшләмәй, улым да эшһеҙ, ә ҡыҙым - йөрөмтәл. Ни хәл итәйем? - тип һораған.

Ҡарт уға:

- Ҡайт та, ишегеңә "Һәр ваҡыт былай булмаясаҡ" тигән яҙыу элеп ҡуй, - тип кәңәш биргән.

Күп тә үтмәй, теге ирҙең ҡатыны эш тапҡан, улы ла, үҙе лә яҡшы эшкә урынлашҡан, ҡыҙы иһә аҡыллы, ипле кейәүгә сыҡҡан.

Бер ваҡыт ул тағы теге ҡартты тап иткән:

- Шунан, бабай, хәлдәрең нисек? Минең тормошом яйланды, барыһы ла яҡшы. Тағы ниндәй кәңәштәр бирерһең?

Ҡарт уға уйсан ғына ҡараш ташлаған да, серле йылмайып:

- Теге яҙыуҙы ташлама... - тигән.

Тормош булғас, унда төрлө хәлдәр осрар. Ҡыйынлыҡтар - рәхәтлеккә, йә, киреһенсә, бәхет бәхетһеҙлеккә әйләнер, юғалтыуҙар аша табыштары килер. Донъя - ҡуласа булып, төрлөсә әйләнеп-тулғаныр. Бары тик беҙҙең күңелдәрҙән өмөт, киләсәккә ышаныс ҡына юғалмаһын ине.

Лена ХӘЙРУЛЛИНА.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Күпселек мосолман ҡатын-ҡыҙҙары төрлө сәбәптәр арҡаһында өйҙән тыш та төрлө эштә бил бөгә. Ҡайһы берҙәренә аҡса кәрәк, ҡайһыһы өсөн эшләү - күңел мохтажлығы.**

# ИҢ МӨҺИМЕ - ҒӘИЛӘҢ

Тәүге мосолман ҡатын-ҡыҙҙары ла йәмәғәт эшендә әүҙем ҡатнашҡан. Мәҫәлән, Бәйғәмбәребеҙҙең ҡатыны булған Ғәйшә юғары аҡыл эйәһе һәм хәҙистәр һөйләүсе булараҡ билдәлелек алған. Бәйғәмбәрҙең икенсе ҡатыны Сәүҙә тире эшкәртеү эшендә оҫта булып танылған һәм тап ошо шөғөл менән булған. Бәйғәмбәребеҙҙең тәүге ҡатыны Хәтиҗә һатыу эше менән шөғөлләнгән. Ул сауҙа карауандары менән сәйәхәт иткән һәм эшенән килем алған. Бәғзе бер ҡатын-ҡыҙҙар яу яланында яраланғандарға медицина ярҙамы күрһәткән. Шунлыҡтан Ислам дине ҡатын-ҡыҙҙарға өйҙән тыш та эшләргә рөхсәт итә. Дин буйынса, ул интеллектуаль һәм ғәмәли кимәлдә эш башҡара ала. Шул уҡ ваҡытта мосолман булмаған йәмғиәттә карьера ҡорған мосолман ҡатын-ҡыҙҙары Ислам диненә, ҡанундарына ҡаршы килерҙәй эштәргә барырға тейеш түгел. Әлбиттә, Ислам дине ҡанундары күҙәтелмәгән йәмғиәттә ир-егеттәр менән аралашыуҙан ҡасыу еңелдән түгел, шулай ҙа уны минимумға еткереү, осрашыуҙа эшлекле һөйләшеү менән генә сикләнеү мөмкин. Ҡатын-ҡыҙ өсөн иң ҡулайы - социаль өлкә. Был өлкәлә ҡатын-ҡыҙ иғтибары, хәстәре һәр ваҡыт кәрәк. Мосолман ҡатын-ҡыҙҙары медицина, уҡыу-уҡытыу, сәнғәт, кейем-һалым моделләү, кин мәғлүмәт саралары өлкәһендә уңышлы эшләй ала.

Ҡатын-ҡыҙ йәмғиәттә ниндәй генә урын тотмаһын - әсәме ул, ир ҡатынымы, эшлекле ҡатынмы - уға, һис шикһеҙ, белемгә эйә булыу кәрәк. Ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ өйҙә ултырған хәлдә лә белемле һәм аҡыллы булырға бурыслы. Сөнки ул балалар тәрбиәләүҙә төп ролде уйнай. Балалар үҫә төшкәс, шул тиклем күп һорауҙар бирә! Мәҫәлән, Аллаһы Тәғәлә тураһында һораша (теология), ни өсөн йондоҙҙар балҡығаны менән ҡыҙыҡһына (астрономия), өләсәйҙең ҡайҙа йәшәгәнлеген белгеһе килә (география), ни өсөн күккә сөйгән туптың һәр ваҡыт ергә ҡарай осҡанын (физика)...

Исламда һәр бер эш ғибәҙәтле һанала, әлбиттә, әгәр ҙә ул ысын күңелдән һәм Аллаһты ыҡыянадырыу өсөн башҡарылһа. Ҡатын-ҡыҙ өй хужабикәһе булһынмы, хәстәрлекле әсәме, уңышлы карьера яһаусы эшлекле ханыммы - уларҙың эше берҙәй кәрәкле һәм мөһим. Иң мөһиме, йәмғиәттә мосолман ҡатын-ҡыҙы, ғөмүмән, мосолман кешеһе тураһында ыңғай стереотип булдырыу. Был стереотип сафлыҡҡа, таҙалыҡҡа, иманға ынтылыусы кешеләрҙе арттан эйәртергә, уларға дөрөҫ юл табырға ярҙам итергә тейеш.

Шулай итеп, ҡатын-ҡыҙ үҙен ҡайһы өлкәлә лә һынап ҡарай ала, һәм уның хеҙмәте йәмғиәт өсөн бик тә ҡиммәтле, әммә тәү сиратта ул ғаиләһе өсөн кәрәк. Шунлыҡтан, ҡатын-ҡыҙҙың өйҙән тыш башҡарған эше арҡаһында ғаиләһе ниндәйҙер ҡыйынлыҡтар кисерергә тейеш түгел.

ҒАИЛӘ ҠОРО

# АТАЙ - ТАЛАПСАН,

## әсәй - аңлаусан

**Өфөлә йәшәүсе ғәжәйеп матур ғаилә - Гөлсинә менән Рөстәм Әхмәтшиндар менән таныштырабыҙ бөгөн һеҙҙә. Биш бала тәрбиәләй улар, иң өлкән ҡыҙҙарына - 21, иң бәләкәй улдарына 3 йәш. Йорт хужабикәһе Гөлсинә менән уларҙың ғаиләһе, балалар тәрбиәләү ысулдары тураһында әңгәмәләшеп алдыҡ.**

**Гөлсинә, ҡасан да булһа күп балалы әсәй булырмын тип уйлағанығыҙ бар инеме?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, юҡ. Ҡустым бала сағында мәрхүм булды, шуға ла ғаиләбеҙҙә һеңлем менән икебеҙ генә үҫтек. Күп балалы ғаилә нисек булғанын күҙ алдына ла килтермәй торғайным. Ә ирем ғаиләһендә 5-се бала, улар 6 бала үҫкән. Студент саҡта өйләнештек, Рөстәм, тәү сиратта, минең тәүге никахтан булған ҡыҙымдың һөйөүен яуланы. Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлағас, аспирантураға уҡырға индем дә, ошо уҡ вузда эшкә ҡалдым. Тәүге балабыҙ ҡыҙ булды, унан һуң тағы ҡыҙ таптым. Иптәшем малай һорағас, бер-бер артлы ике уллы булдыҡ. Аҙаҡҡыһына йөрәгем етмәҫ ине, йортобоҙ ҙа тәҙөләп бөтмәгән, Учалыла йәшәгән бикәмемдең: "Аҙаҡтан үкенерһең, тағы тап", - тигәне уйландырҙы. Хәҙер бына иптәшемдең ике ҡанаты - ике улы бар. Өлкән ҡыҙыбыҙ эшләп йөрөй, айырым йәшәй хәҙер, өйҙә 3 ир-егет, 3 ҡатын-ҡыҙыбыҙ.

**Йорт һалабыҙ тинегеҙ, күп балалыларға дәүләттән ярҙам бармы торлаҡлы булыу мәсьәләһендә?**

- 35 йәшкә тиклем йәш ғаиләләргә булған программаға сиратҡа тороп, субсидия алғайныҡ, шуға өй күтәрҙек. Шуға ла дәүләт ярҙам итмәне тип тә әйтә алмайбыҙ. Әммә күп балалы ғаилә булараҡ, ниндәйҙер матди ярҙам күрһәтелһә, еңелерәк булыр ине. Өй тигәс, өйәбеҙ ҙә өйәбеҙ әле. Үҙемдең етәкселәремә рәхмәтлемен, әлеге мәлдә университет яҡағында ике бүлмәле фатир тибындағы бүлмәлә йәшәйбеҙ. Бый-ыл булмаһа ла, киләһе йыл йортобоҙға күсербеҙ, тип торабыҙ.

**Баш ҡалала ғына түгел, ауылдарҙа хәҙер балалар русса һөйләшә. Өфөләге башҡорт мөхите һеҙҙең талаптарҙы ҡәнәғәтләндерәме?**

- Ғәжәп инде, өйҙә тик башҡортса һөйләшәбеҙ, балалар мәктәптә, балалар баҡсаһында русса һөйләшеп йөрөйҙәр ҙә, өйҙә беҙҙең менән - башҡортса, әммә үҙ-ара русса һөйләшәләр. Уйын уйлап сығарып булһа ла, уларҙы башҡортса һөйләштерәм. Әйтәйек, бергәләп сәй эскәндә тик башҡортса ғына аралашабыҙ, тием. Дүрт балабыҙ башҡортса, русса ла шәп белә, башҡорт кешеһе менән һөйләп итеп башҡортса әңгәмә ҡора алалар. Бәләкәсенә, ағай-апайҙарынан күреп, гаджеттар ҙа, телевизор ҙа күберәк эләкте булды бит инде, балалар баҡсаһында ла рус төркөмөнә эләкте лә ҡуйҙы. Ауырыраҡ һөйләшә башҡортса.

Һуңғы йылдарҙа Өфөлә барлыҡҡа килгән башҡорт мөхитенә ҡарап ҡыуанам, мәҫәлән, минең балаларым барыһы ла "Һаумы, һаумы, әкиәт" бәйгеһендә төрлө кимәлдәрҙә еңеүсе булды. Сулпылар, ҡашмау, ҡәмәр, ситек нимә икәнен белеп, милли кейемдә үҙһенеп, яратып кейәләр сәхнәгә сыҡҡанда.

Иптәшемдең инәһе лә, атаһы ла мәрхүмдәр, Учалыға ҡайнағаларға йылына 2-3 ҡайтһаҡ, Баймаҡҡа йыш йөрөйбөҙ. Унда әсәйем менән атайым матур донъя көтәләр. Аты ла, һыйыры ла, 30-лап ҡаҙы ла бар. Ирем, өләсәй-ҡартатай ҡурсыуын тойоп үҫһендәр, тигән ҡараштa. Иттән, май-һөттән өҙмәйҙәр, аҡсалата ярҙам итә алмаһаҡ та, ошолай ярҙам итәйек, тиҙәр. Уларһыҙ өй төҙөү ауырыраҡ булыр ине.

**Балаларҙың буш ваҡытын нисек ойоштораһығыҙ?**

- Арыйҙар, тип, балаларҙың үҙен дә, аҡсағыҙҙы ла йәлләмәгеҙ, тиер инем. Ике ҡыҙым 7-се музыка мәктәбендә домбырала уйнарға өйрәнә. Унда оркестр, хор, сольфеджио, һ.б дәрестәр инә. "Сығанаҡ" тигән ижад үҙәгенә скрипка уйнарға өйрәнергә йөрөйҙәр. 20-се ҡала башҡорт гимназияһында уҡыйҙар. Әгәр ҙә йәлләп, өйҙә ултыртһаң, телевизорҙан бушамаҫтар ине. Ә музыка кешенең аңын үҫтерә, сольфеджио шул уҡ математика бит инде, хәтерҙе яҡшырта, моторикаға ыңғай йоғонто яһай.

Улдар тәрбиәһе менән иһә атай шөғөлләнә. Швед стенаһы тигән ҡоролма бар, унда баҫҡысы ла, дүңгәләктәре лә, арҡаны ла бар. Малайҙар ғына түгел, ҡыҙҙар ҙа ярата унда шөғөлләнергә. Аталары күнегеүҙәрҙе дөрөҫ эшләргә өйрәтә. Өлкән улыбыҙ балалар баҡсаһында бокска йөрөй, вокал түңәрәгенә лә бар. Хәҙер инде ҡурай һәм каратэға барам тип һорай.

**Матур исемдәр ҡушҡанһығыҙ балаларығыҙға, быны аңлы рәүештә эшләнегеҙме?**

- Өлкән ҡыҙыма исемде мәсеттәге мулла һайланы. "Мосолман исемдәре араһында иң башта Әминә тора, Бәйғәмбәребеҙҙең әсәһенең исеме", - тигәйне, ошо исемде ҡуштырып алып сыҡтыҡ. Аҙаҡтан инде көтөп алған, теләп тапҡан балаларыма Альберт, Альбина тип ҡуша алмай инем. Йәш саҡтан уҡ улым булһа - Батырша, ҡыҙым булһа - Аҫылбикә тип уйлағайным. Бала исемде үҙе һайлай икән ул, шулай килеп сыҡты, бер ҡыҙыбыҙ - Мәрйәм, береһе - Мәҙинә. Улыбыҙға атаһы менән килешеп, Ғайса тип ҡуштыҡ. Бәләкәйен ҡайнымдың исеме менән Рәүил тип йөрөгәйнек, өлкән ҡыҙым, ҡартатайҙың рухы былай ҙа беҙҙең менән, ҡустыма Ильяс тип ҡушайыҡ тине.

**Тәүге балаң - үҙең өсөн, ҡалғандары яҡшы атай өсөн, тиҙәр...**

- Тормош иптәшең һөйөт булмаһа, был тиклем бала табырға ҡыйыулыҡ итмәҫ инең, тип күптәр әйтә. Ул, ысынлап та, шәп атай. Ҡайнымдың күп матур сифаттарын үҙенә алған. Талапсан атай. Мин тәүге ҡыҙыма шулай талапсан булдым, ул яҡшы уҡырға тейеш, ти торғайным. Хәҙер ҡарашым үҙгәрҙе. Нимәлер килеп сыҡмай икән, ташламалар яһайым, ярай, өйрәнер әле, тип уйлайым. 3-лө билдәһе алһалар ҙа көймәйем, белемегеҙ өсөк булмаһын, бер тапҡыр 3 алыу ул әле һеҙҙең насар уҡыусы икәнегеҙҙе белдермәй, тип әйтәм. Уның ҡарауы, матур йырланың, тип күңелдәрен үҫтереп ебәрәм. Икебеҙ ике төрлө булған өсөн дә беҙҙең балалар үҙҙәрен бәхетле тояларҙыр ул. Икебеҙ ҙә талапсан, ҡаты булһаҡ, улар үҙҙәренә йомолорҙар ине. Йомшаҡ булһаҡ, тәртиптәре булмаҫ ине. Былай иһә барыһы ла үҙ урынында.

Хеҙмәткә өйрәтергә тырышабыҙ. Алты йәшлек улым сүп-сарҙың ваҡытында түгелеүе өсөн яуаплы, аяҡ кейемдәрен дә теҙеп ҡуйыу уның өҫтөндә. Өс йәшлеге уйынсыҡтарҙы йыя. Ҡыҙҙарҙың береһе өй йыйыштыра, икенсеһе һауыт-һаба йыуырға, салаттар турарға ярата. Дуҫтарҙың балалары менән аралаштырабыҙ, улар ҙа "Тамыр"ға йөрөйҙәр, йырлайҙар, бейейҙәр, музыка ҡоралдарында уйнайҙар - ҡыҙыҡһыныуҙары уртаҡ. Өйҙә ултырыу беҙгә хас түгел, машинабыҙға тейәлеп алабыҙ ҙа, сәйәхәт итәбеҙ. Бер яҡтан, иптәшем менән икебеҙҙең дә фекеребеҙ уртаҡ, ғаиләбеҙҙә тәртипкә өйрәтеп, һөйөү менән ураптып, ҡурсалап ҡына үҫтергән балаларыбыҙ халҡыбыҙға, илебеҙгә кәрәкле кешеләр булып, үҙ урынадарын табып йәшәһендәр ине, тигән теләктәбеҙ.



Ләйсән ДАЯНОВА
әңгәмәләште.

✓ *Балаһы 2019 йылдың 1 ғинуарына тиклем тыуған һәм программала ваҡытында ҡатнашҡан ғаиләләр генә ошондай ярҙамға дәғүә итә ала. Ата-әсәнең бала тыуғандан һуң ғариза биреү өсөн алты ай ваҡыты бар.*



ӘСӘЙ ЯҘМАЛАРЫ

# МАЛАЙҘАР ТУЛЫ ДОНЪЯМ - 3

## Бәхет өсөн күпме уйынсыҡ кәрәк?



**Ысынлап та, балаларға бәхет өсөн ниндәй уйынсыҡ кәрәк? "Лего!" - тип ҡысҡырасаҡ минең өлкәндәрем Бәхтейәр менән Баязит бер ауыҙҙан. Шунан уртансыһы: "Хот-вилс! Әсәй, хот-вилс!" - тип тыпырсынасаҡ. "Ааа!" - тип аш бүлмәһе яғына төртөп күрһәтәсәк Байназар. Йәнәһе, шунда индереп, берәй сәғәткә тынғылыҡ бирһәң, әсәй, булыр бәхет, миңә лә, һиңә лә...**

Ағастан юнып яһалған уйынсыҡтарҙы, йышылып бөткән һөйөктәрҙе уйнатҡан, йә туҙған кейеҙҙе төрөп, ҡурсаҡ иткән замандар күптән үткән инде. Бөгөн балаларҙы һөйөндөрәйем тиһәң, магазин кәштәһе тулы уйынсыҡ. Ҡайһылары менән нисек уйнарға икәнен үҙебеҙ ҙә аңламайбыҙ кеүек. Шулай ҙа, кәрәкме-кәрәкмәйме, уйынсыҡтарҙы һыпырып һатып алып торабыҙ. Һөҙөмтәлә, балалар бүлмәһе генә түгел, тотош өй уйынсыҡҡа тула, аяҡ аҫтында ята, ҡәҙере китә. Беҙҙең өйҙә лә ике йәшник һәм бер тоҡ уйынсыҡ йыйылып китә ине. Ул ваҡытта улыбыҙ икәү генә һәм улар балалар баҡсаһына йөрөмәгән ваҡыт ине. Билдәле, берәһенә уйынсыҡ алһаң, икенсеһенә лә шундайҙы уҡ алырға кәрәк. Ейәндәрен өләсәй-картатайҙары ла һөйөндөрөп тора. Малайҙар иртән тороу менән был байлыҡты түгеп ебәрәләр ҙә, көнө буйы уйынсыҡтар өҫтөнән атлап йөрөйһең. Машиналарҙың ниндәй генә төрҙәре юҡ, тракторҙың эттергеслеһе, көрәклеһе, арба тулы утынлыһы... Кис булһа, һин йый ҙа мин йый, тип бер-берсеһе менән эткеләштерткеләш башлана. Йәй еткәс, был "автопарк" тулыһынса ишек алдындағы ҡомлоҡҡа күсә лә, көҙ етеүгә, өстән бер өлөшө генә имен-һау өйгә килеп инә.

Ғаиләбеҙҙә тағы бер улыбыҙ тыуыуы беҙҙең күп кенә ҡараштарыбыҙҙы үҙгәртте. Шул иҫәптән, уйынсыҡтар турағында ла беҙ хәҙер икенсерәк уйлайбыҙ. Әйткәндәй, фекеребеҙ үҙгәреүгә өлкән улыбыҙ Бәхтейәрҙең беренсе класҡа барыуы ла йоғонто яһаны. Хәҙер беҙ заман мәғарифы менән танышбыҙ. Был көйәҙ системаның талаптары ныҡ юғары булып сыҡты. Малайҙар мәктәпкә төрлө яҡтан әҙер булһын өсөн хәҙер беҙ уйынсыҡтарҙың логиканы һәм ваҡ моторикаы үҫтереүсеһен һайлайбыҙ.

Шулай итеп, бөгөнгө тәжрибәмдән сығып, улдарыма иң ҡыҙыҡлы һәм иң кәрәкле уйынсыҡтарҙы барлап сығырға булдым. Беренселекте аш-һыу бүлмәһендәге төрлө һауыт-һаба алып тора. Алты айҙа үҙаллы тороп ултырыу менән өлкәнем төрлө һауыттарҙың ҡапҡастары менән оҙаҡ ваҡыт әүрәп ултыра башланы. Артабан ҡустылары ла был эстафетаны эләктереп алды. Байназар әле лә, ике йәше тулып килеүгә ҡарамаҫтан, минең кәстрүлдәремде, ярма һалынған контейнерҙарымды, банкаларҙы ҙур кинәнес менән асып-ябып уйната. Яңыраҡ спиннер тигән уйынсыҡ таралып китте. Бер нисәүһен юғалтҡандан һуң, улдарым ҡапҡастарҙың тотҡалы яғын иҙәнгә һалып әйләндерһән, бынамын тигән спиннер килеп сығыуын асыҡланы. Ҡарамаҡҡа бөтәһе лә ябай ғына кеүек, шулай ҙа бәләкәстәр өсөн фантазия, логика үҫтереүсе шәп бер уйын.

Минең исемлектә икенсе урынды китаптар алып тора. О, был "уйынсыҡ" ныҡ шәп! Һөйләшергә өйрәтә, хәрефтәр таныта, кисен әкиәт һөйләтә - ғәҙәттә, өлкәндәр шулай тип һанап китә. Малайҙарҙың фантазияһы иһә сикһеҙ. Китаптарҙан ныҡ шәп гараж килеп сыға, күпер төҙөргә мөмкин, асфальт түшәргә, трасса һалырға ярай, бейек тау эшләп, машиналарҙы трамплиндан ырғытып була, тағы... Ҡыҫҡаһы, мин, өлкән кеше, барыбер бөтәһен дә һанап сыға алмайым, ә балалар кинәнеп уйната.

Малай булғас, машинаһыҙ булмай инде, улар ҙа исемлектән төшөп ҡалмай. Әйткәндәй, малайҙарҙың машинаны боҙоп уйнауы бер ҙә генә лә ҡурҡыныс түгел. Буласаҡ ир кеше тәгәрмәс һүтә, береһенең кузовын һындырып сығарып, икенсеһенә пластилин менән йәбештерә белергә тейеш. Ҡимммәткә пультлы машина һатып алып биреүгеҙҙең икенсе көнөнә ул ватыҡ ята икән, көйәләнмәгеҙ. Улығыҙ үҙйөрөшлө машинаның двигателе нисә цилиндрлы икәнен мотлаҡ белергә тейеш.

Әгәр күҙ нурығыҙҙың берәй сәғәт шым ғына ултырып тороуын теләһәгеҙ, ҡулына лего тоттороғоҙ. Байназар имгәкләп йөрөй башлағас, өлкәндәрем түҙә ҡасып лего уйнай ине. Беренсенән, бәләкәсебеҙ ваҡ деталдәрҙе йотоп ҡуймаһын, тип ҡурҡабыҙ. Икенсенән, бәләкәс уларҙы кинәнеп иҙән ярығына төшөрөргә әүәҫләнеп алды. Хәҙер инде Байназар ҙа легоның ҡәҙерен белә, ағайҙары һауытты түгеп ебәреүгә, йүгереп килеп етә, берәй машина эшләгәндәрен сабыр ғына көтөп ултыра ла, тартып та ала. Ғөмүмән, лего ул тотош бер донъя! Бер үк деталдәрҙе төрлөсә ҡороп, машина, самолет, катер, трактор, танк эшләп була. Дуҫтарың менән алмашып була. Коллекция йыйып була. Миңә бер ҡасан да шкафта яңы килдәк артыҡ булмаған кеүек, малайҙарыма ла бер ҡасан да лего артыҡ булмай.

Лего уйнап, мөкиббән китеп яңы модель машина уйлап, бөкөрәйеп ултырыуҙар оҙаҡҡа һуҙылып китһә, улдарығыҙҙы велосипедҡа атландырып, тышҡа сығарып ебәрегеҙ. Саф һауа, физик әҙерлек - үҙегеҙ аңлап торағыҙ. Күләүектәр сәсрәтеп, ҡулды рулдән, аяҡтарҙы педалдән ысҡындырып, урамдан бер үтмәһәң, бала саҡ бала саҡ буламы инде ул!

Малайҙар үҫә төшкәс, минең һауыт-һабаларҙы атайҙарының инструменттары алыштыра башланы. Ысын шурупуверт менән ысын шөрөптө ысын таҡтаға бороп ҡуйыу ниндәй ҙур бәхет икәнен берәйегеҙ аңлай микән? Бәләкәстәрегеҙҙең ҡулынан атаһының ҙур сүкешен тартып алырға ла ашыҡмағыҙ. Сүкеш менән теүәл генә сөйгә туҡылдатыу - малайҙарҙың ҡанында. Ә беренсе һелтәүҙә үк шартлатып бармаҡҡа тондороу серен тик ҡатын-ҡыҙҙар ғына белә.

Ҡалала, йәки ҡала шарттарындағы ауылда йәшәүселәр өсөн өйҙә берәй йән эйәһе тотоу кәрәк. Балалар яратырға, йәлләргә, иркәләргә, хис-тойғоларын белдерергә өйрәнә. Заман балалары планшет һәм смартфон ғына төртөп ултырмаһын, бесәй балаһының да башынан һыйпаһын. Әйткәндәй, гаджеттарға килгәндә, мин оҙаҡ ҡына бирешергә, позицияларҙан сигенергә теләмәнем. Әммә ысынбарлыҡ еңде. Әгәр ҙә мин улдарыма өйҙә рөхсәт итмәйем икән, улар гаджеттар тыйылмаған икенсе бер ергә ылығасаҡ. Шулай булғас, минең контроль аҫтында янымда мультфильм ҡарауҙары отошлораҡ. Етмәһә, мәктәптәге күп кенә олимпиада, конкурстарҙың өлгөләре менән интернет аша танышырға була.

Исемлек төҙөгәндә кешелек ҡағыҙҙан да шәп уйынсыҡ уйлап тапмаған икән, тигән фекергә килдем әле. Балалары бәләкәй булған ғаиләнең өйөндә һәр ваҡыт ҡағыҙ булырға тейеш. Беренсенән, һеҙ уларҙы тиҙ генә үҙҙәренең бүлмәһенә һүрәт төшөрөргә оҙата алаһығыҙ. Был хәйләкәр алымға мине әхирәтем өйрәтте. Өйгә ҡунаҡ килһә, балалар ярһып, шашып китеүсән. Апайыңа машина төшөрөп күрһәт әле, йәки инәйеңә ниндәй һүрәтенә бүләк итерһең икән, тип әүрәтеү ҡай саҡ һөҙөмтәнән бирә. Икенсенән, һүрәт төшөрөүҙән тыш, ҡағыҙҙан төрлө оригами эшләп була. Бына быныһы инде иң шәп алым - оригамины бала үҙе генә эшләмәй, мотлаҡ өлкәндәрҙең ярҙамы кәрәк. Эштән арып ҡайтҡан һәм ҡайһы мөйөшкә боҫоп ял итергә белмәгән атайҙарын, улдарыңа кәмә эшләп өйрәт, тип ултыртып ҡуйһаң, өйҙә бер ярты сәғәткә тынлыҡ урынлаша. Ҡолаҡ та, баш та тауыштан тынып ҡала. Ғаилә башлығы ла, мәшәҡәттәрҙән арынып, улдары менән аралаша, ял итә.

**Шулай итеп, атайҙары менән бергә тырышып-тырмашып ҡар бөртөктәре ҡырҡҡан улдарыма ҡарап, исемлекте йомғаҡлайым һәм иң аҙаҡҡы пунктты теркәп ҡуям. Бәхет өсөн балаларға беҙ, атай һәм әсәй кәрәк!**

Гөлсимә ИШТАНОВА.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАЛАЛЫ ҒАИЛӘЛӘРГӘ...

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров беренсе бала өсөн түләүгә 523 миллион һум бүлеү тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы.** 2019 йылдың июненә тиклем документтарын тапшырған ғаиләләр бер тапҡыр бирелә торған матди ярҙам алыуға хоҡуҡлы. "Аҡса алыуға сират документтар тапшырылған датанан сығып күсә бара, - тип билдәләнеләр республика Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәтендә. - Документтар ҡабул итеү һәм таныҡлыҡтар биреү менән Торлаҡ программаларын тормошҡа ашырыу идаралығы шөғөлләнә". Бынан алда республикала тәүге балалары донъяға килгән ата-әсәгә 300 мең һум күләмендә социаль түләү тураһындағы указға ҡул ҡуйылғайны. Балаһы 2019 йылдың 1 ғинуарына тиклем тыуған һәм программала ваҡытында ҡатнашҡан ғаиләләр генә ошондай ярҙамға дәғүә итә ала. Ата-әсәнең бала тыуғандан һуң ғариза биреү өсөн алты ай ваҡыты бар. Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты әлеге мәлгә 2764 сертификат тапшырған. Программала 7300-ҙән ашыу йәш ғаилә ҡатнаша.

✓ **Башҡортостан Хөкүмәте субсидиялар һәм компенсациялар иҫәпләү өсөн нигеҙ булып торған торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәре хаҡының яңы стандарттарын раҫланы.** Льготалар менән файҙаланыусылар өсөн яңынан иҫәпләү апрелдә башҡарыла, бының өсөн бер ҡайҙа ла мөрәжәғәт итергә кәрәкмәй. Ишле һәм тулы булмаған ғаиләләр өсөн коммуналь хеҙмәттәргә сығымдарҙың максималь рөхсәт ителгән өлөшө килемдән 13 процент тәшкил итә (15 процент ине); 70 йәштән өлкән яңғыҙҙар өсөн - 16 процент (18 процент ине); яңғыҙ йәшәгән 60 йәштән өлкән ир-аттар һәм 55 йәше тулған ҡатын-ҡыҙҙар өсөн - 18 процент; граждандарҙың башҡа категориялары өсөн - 20 процент. "Мәсәлән, әгәр кешенең айлыҡ килеме (бөтә түләүҙәрҙе һәм пособиеларҙы иҫәпкә алып) - 20 мең һум, ә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өсөн түләү 4,1 мең һум (20 проценттан күберәк) тәшкил итә икән, ул субсидияға хоҡуҡлы. 20 мең һум килем алған, ләкин 2,7 мең квартплата түләгән күп балалы әсә йәки яңғыҙы ғына балалар тәрбиәләгән ҡатын да ошондай хоҡуҡҡа эйә", - тип белдерҙеләр Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығында.

✓ **Рәсәйҙә һыуыҡта балаларҙы йәмәғәт транспортынан төшөрөп ҡалдырыуҙы тыйған закон ҡабул итәләр.** Был башланғыс менән "Берҙәм Рәсәй" депутаттары сығыш яһаны. Транспорт министрлығы әҙерләгән закон проекты хөкүмәттә ҡарала. Һалҡын көндә 16 йәшкә тиклемге билетһыҙ балаларҙы транспорттан ҡыуып сығарырға ярамай. Бындай ҡағиҙә ун ике төбәктә эшләй. Улар - Санкт-Петербург, Новосибирск, Һамар, Калуга, Түбәнге Новгород, Һарытау, Волгоград, Төмән өлкәләре, Чечня, Тыва, Чукотка, Байкал арьяғы крайы. Башҡортостандан Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров хәбәр итеүенсә, төбәктә ошондай осраҡтарға юл ҡуймау өсөн ташыусылар менән һөйләшеүҙәр алып барыла. Мәғариф министрлығына, Юл хужалығы һәм транспорт буйынса дәүләт комитетына, район һәм ҡала хакимиәттәре башлыҡтарына рәсми хаттар ебәрелгән.

✓ *Иғтибар итһәк, балаларын тик әсәләре генә үҫтергән миҫалдар тәбиғәттә күп кенә лә баһа! Мәҫәлән, өй эттәре, бесәйҙәр, йылҡы малы, һыйыр малы, ваҡ мөгөҙлөләр барыһы ла тик әсә ҡарамағында ғына үҫә.*

ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ

**Был ваҡиғаға байтаҡ ваҡыт үтһә лә, тормош, булмыш тураһында уйланғанда йыш ҡына иҫкә төшә. Бер әсәй улының 25 йәшлек юбилейына ҡотлау папкаһы эшләтергә тип, ярҙам һорап килгәйне. "Бөтәһенә лә үҙе өлгәште. Мәктәпте "алтын миҙал"ға тамамланы. Үҙ көсө менән абруйлы уҡыу йортона инде һәм диплом алды. Туйына ла, машинаһына ла, фатирына ла үҙе аҡса эшләне. Быйыл атаһы менән икебеҙгә сит илдә ял итергә путевка бүләк итте... " - ошоларҙың бөтәһен дә ҡотлау һүҙҙәренә ҡушып яҙғыһы килә ине уның. Килештермәһәм дә, яҙҙым инде, сөнки "клиент һәр ваҡыт хаҡлы".**

# ЯҺАЛМАЛЫҠҠА ҠОРОЛҒАН ЯҘМЫШТАР

Күп тә үтмәй, был әсәйҙе урамда осраттым. Күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, хәсрәтле уйҙарына батып китеп бара ине ул. Күрмәмеш булып уҙып китергә уҡталғайным, үҙе туҡтатты. Ҡайһы ваҡыт серенде, проблемаларыңды яҡын кешеңә ҡарағанда сит кешегә һөйләһәң яҡшыраҡ бит, был ҡатын да зарын кемгә һөйләргә белмәй йөрөгән, күрәһең.

- Әҙерҙән-бәҙергә йәшәүҙән арыным, бәхетемде үҙем тапҡым килә, тип, йәш балаһы менән бына тигән ҡатынын ҡалдырып, бөтә донъяһын пыран-заран килтереп, улым ситкә сыҡты ла китте... - тине ул. - Әле бына үҙенән күпкә өлкән ҡатын менән йәшәүен шылтыратып әйтте. Үҫмер сағынан гел уның проблемаларын хәл итеп, атаһы ла, мин дә арыныҡ, ҡул ғына һелтәр инек, берҙән-бер балабыҙ. Наркотик менән дә шаярҙы, эсеү яғына ла әүәҫ булды...

Теге ваҡыт юбилей айҡанлы ҡотлау открыткаһына яҙған һүҙҙәр бары тик ҡунаҡтар, ресторанға килгән кешеләр, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар өсөн генә булғанын аңлағайным инде. Шуға ла был хаҡта артыҡ сурытып торманым. Шулай ҙа аҙ булһа ла тынысландырырға, йыуатырға теләп, бик тиҙҙән барыһы ла урынына ултырыр, тигән булдым.

- Ысынлап та яҡшы яҡҡа үҙгәрер тиһегеҙме? - тип күҙгә мөлдөрәп ҡараған әсәне шул тиклем йәлләнем.

Яңыраҡ тағы ла шундайыраҡ тойғо кисерҙем. Бер юбиляр тураһында гәзиткә материал эшләргә үтенделәр. Ғаиләһе, яҡындары түгел, ә эшләгән урынынан мөрәжәғәт иттеләр. Беҙ барғанда, күркәм юбилейын билдәләгән ағай ҡыҙмасараҡ ине. Баҫма битендә үҙе хаҡында мәҡәлә яҙыуҙан ҡырҡа баш тартты.

- Минең турала ла, ғаиләм хаҡында ла маҡтап яҙырлыҡ бер нәмә лә юҡ. Иҫән булһам, башҡа бер тыуған көнөмдө лә, юбилейымды ла билдәләмәйәсәкмен. Хәйер, бүтән бер кем дә үткәрәйек тип тә әйтмәҫ инде... - тине.

Килгәс, нисек тә һөйләшеп, материал алып ҡайтырға тип уйлайһың бит инде. Тегеләй ҙә, былай ҙа тормошо, эшләгән йылдары тураһында алдан әҙерләгән һорауҙарҙы бирәм. Юбилейын нисек билдәләүе хаҡында ҡыҙыҡһынам.

- Йыйылған ҡунаҡтарҙың барыһын да ҡыуып ҡайтарҙым, тиһәм, бик үк дөрөҫ булмаҫмы икән, - тип башланы ул һүҙен. - Беҙҙең ғаилә элек-электән ҡунаҡсыл булманы, үҙебеҙҙе лә бик саҡырып барманылар. Шуға ла дуҫтарҙы, хеҙмәттәштәрҙе, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙы бер юлы саҡырайыҡ тип, кафеға йыйҙыҡ. Ҡатыным менән икебеҙҙе, кәләш менән кейәү һымаҡ, өҫтәл башына ултыртып ҡуйҙылар. Бына бер заман мине ҙурлай башланылар. Кеше маҡтай, ә минең баш аҫҡа әйелгәндән-әйелә. Хеҙмәттәштәремдең ололауы, хөрмәтләүе менән килешәм, сөнки эшемә һәр ваҡыт намыҫлы ҡараным, ҡулымдан килгәнсә, бөтәһенә ярҙам иттем.

Ә бына ышаныслы ғаилә башлығы, һөйөклө ир тигәндәре шул тиклем яһалма булып яңғыраны. Ҡолаҡты ярып инде. Ҡотлаған, тост әйткән һәр кем шул бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатлай. Хәләленә яҡшы тормош иптәше булдың, тиҙәр, ә эргәлә ҡатын өҫтәл аҫтынан аяҡҡа тибеп ултыра, теләктәргә яуап итеп, рәхмәт әйтәйем тиһәм, ауыҙымды яба. Сәғәт-сәғәт ярым түҙҙем дә, алып барыусынан һүҙ һораным.

- Юҡ, ағай, һеҙгә һүҙ иң аҙаҡтан бирелә, - тип, уныһы һаман алдан әҙерләгән сценарийына йәбешә.

- Улайһа, мин ҡайтам, - тинем дә өҫтәл артынан тора башланым. - Минең юбилей айҡанлы йыйылғанбыҙ икән тиһәм, төптө икенсе кеше тураһында һүҙ бара ла баһа! Килеүегеҙгә ҙур рәхмәт, әммә табындың артабан былай дауам итеүен теләмәйем, сөнки бында яңғыраған һүҙҙәрҙең бөтәһе лә яһалма, алдаҡ икәнен бөтәгеҙ ҙә беләһегеҙ! - тинем.

Ярай әле, алып барыусы тәжрибәле булып сыҡты. Шунда уҡ уйынкөлкөгә әйләндерҙе һәм кисә артабан йыр-бейеү, күңел асыу юҫығында дауам итте...

Ағай тынып ҡалды. Өндәшмәй ултырыуҙан да ҡыйыны юҡ бит, "Тимәк, һеҙ насар ир булдығыҙмы?" тип һорарға батырсылыҡ иттем.

- Әрләшеп, һуғышып йәшәмәнек, иллә-мәгәр ҡатыным менән берберебеҙҙе яратманыҡ. Илле йылға яҡын яратмаған кешең менән йәшә әле... - тине. Ошо ваҡыт юбилярҙың тауышы ҡалтыранып сыҡты. Юҡ сыҡманы, тамағына төйөр булып тығылды.

Шул ваҡытта ағай миңә бик ҡыҙғаныс булып тойолдо. Әммә ул үҙен тиҙ ҡулға алды:

- Бүтәндәр насар уйлап ҡуймаһын, күрше-күлән нимә әйтер икән, тип йәшәргә түгел икән. Ҡатынымдың дәрәжәһе төшмәһен тип, йәшерәк саҡта ғүмер арбаһынан төшөп ҡалырға тәүәккәллек итмәнем... - тип һүҙен йомғаҡлауына ишараланы...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ

# ҠАРА ҠОРТ ҮРМӘКСЕҺЕ ХАҠЫНДА ФӘЛСӘФӘ

**Ир кешенең ай һайын өйөнә эш хаҡы алып ҡайтыуы, белеүебеҙсә, һәр ғаиләлә күңелле хәл. Өйҙә балаларын бағып ултырған ҡатын шунда уҡ ғаилә бюджетының күпме өлөшөн ҡайҙа тотонорға планлаштыра ла башлай. Аҙыҡ-түлек, балаларға кейем алыу, торлаҡ-коммуналь хеҙмәт өсөн түләү һымаҡ бихисап нәмәләр ҙә ирҙең аҙмы-күпме генә эш хаҡы алғанын көтөп тора бит. Хәҙерге дәүерҙә әллә ни артыҡ аҡса ла алып ҡайта алмай бәғзеләр, айырыуса яҡын-тирәлә эшләгәндәр. Күптәр "оҙон аҡса" эшләү маҡсаты менән ҡырға китергә мәжбүр...**

Бөгөнгө һүҙем эш хаҡының күплеге хаҡында ла түгел, ә ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәткә ҡағылышлы. Әлбиттә, өйгә килгән аҡса күләменең ир менән ҡатын араһында булған мөнәсәбәттәргә тәьҫире лә ҙур ғына. Шулай ҙа, ир кеше, әйтәйек, шайтан эсемлеге менән булышмай, буш ваҡытын өй хужалығында, баҡсала ул-был эш эшләүгә сарыф итә, балалар тәрбиәләүгә бүлә икән, уның аҡсаны әҙерәк алып ҡайтҡаны һиҙелһә лә, ғаилә эсендәге мөнәсәбәткә артыҡ зыяны теймәйәсәк. Шундай "ыҡсым" тормошҡа өйрәнеп, әллә ни "эре аҙым"дар яһарға тырышмай, үҙ-ара көңгөр-ҡаңғыр итеп йәшәгән ғаиләләр етерлек бит.

Ә бына йорт хужаһы бәғзе ваҡыт дуҫ-иштәре менән бер аҙ "төшөрөп" алырға яратыусан булғанда иһә (көн-төн эскәндәр хаҡында түгел һүҙем), йыш ҡына ғаилә ығы-зығыһы килеп сығыусан. Мәҫәлән, ғаиләһе өсөн күпмелер аҡса эшләп, ауылса әйткәндә, "кәҙимге" генә йәшәп ятҡан бер йәш танышымдың өйөнә унда-бында "ҡырын тейәп" ҡайтҡылағаны хаҡында ишеткеләйем. "Төшөрөп" ҡайтҡан саҡта ҡатыны уны өйгә индермәй, ишек төбөнән кире бороп сығарып ебәрә икән. Эсергә ятаҡан ир үҙ яҙаһын татый: төнәр өсөн туғандарына, дуҫтарына китергә мәжбүр. Ирҙең яҡындарының килен кешегә: "Нишләп ирең де бынау сатлама һыуыҡта урамға сығарып ебәрәһең?" - тип бурылдашыуы - тәбиғи, "ҡаты бәғерле" килендең ҡылығы менән ризалашҡылары килмәй. Әммә килен кеше үҙен ҡыйырһытыуға юл ҡуймаҫтайҙарҙан. Туғандар менән килен араһында, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, бик ҡыҙыу "фекер алышыу" башлана: "Балаларыңдың атаһы тышта туңып үлеп ятһа, ҡалайтырһың?" "Үлһә ни - ишшү ҙә яҡшыраҡ, хөкүмәт ун һигеҙ йәшенә тиклем һәр балаға фәләнсә күләмдә аҡса түләй ҙә баһа, бирешмәҫбеҙ..." Йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, килен кешенең бына шундай "тапҡыр" яуабын ишетеп, хайран ҡалаһың...

Ошо йәш килендең "...үлһә - ишшү ҙә яҡшыраҡ..." тигән һүҙҙәре, нишләптер, "ҡара ҡорт" тип аталған бер үрмәксене иҫкә төшөрә. Рәсәйҙең көньяҡ өлкәләрендә, Ҡаҙағстанда, Урта Азияла көн күргән был үрмәксене икенсе төрлө "черная вдова" тип тә йөрөтәләр. Был үрмәкселәрҙең тормошо ифрат та ғибрәтле: ата үрмәксене кәүҙәгә унан бер нисә мәртәбәгә ҙурыраҡ булған инәлеге тәүге "никах кисе" үтеү менән шунда уҡ тотоп ашай ҙа ҡуя икән. Меҫкен ата үрмәксе тик үҙенең "ирлек бурысы"н ғына атҡарып өлгөрөп ҡала... Ә инә бөжәк иһә үҙе ғүмере буйы "тол" булып йәшәй. Ҡара ҡорттарҙың ҡайһы бер төрҙәренең инәләре аталыҡты үлтермәй, әммә "никахтан" һуң ата үрмәксе барыбер мандый алмай. Үҙе бер ҡайҙа ла китмәй, шул уҡ ваҡытта бер нәмә лә ашамай (тик һыу ғына эсә), ау ҡыҙырып йөрөп, кибеп барып үлә икән. Һәр хәлдә, әлеге "вдова" үҙ репертуарында ҡала... Аллаһы Тәғәлә тап ана шулай итеп яралтҡан ошо мәхлүген. Иғтибар итһәк, балаларын тик әсәләре генә үҫтергән миҫалдар тәбиғәттә күп кенә лә баһа! Мәҫәлән, өй эттәре, бесәйҙәр, йылҡы малы, һыйыр малы, ваҡ мөгөҙлөләр барыһы ла тик әсә ҡарамағында ғына үҫә. Бал ҡорто ла бик үҙенсәлекле бөжәк: йәй буйы бал йыймай, тик ашап ҡына йөрөгән ата, йәғни әреғорттарҙы ҡышлауға умартаға индермәй ул...

Ә Раббыбыҙ беҙҙе, әҙәм балаларын, ишле итеп яратҡан. Әҙәм балалары ғаилә төҙөп, балаларын ана шул ғаилә эсендә үҫтерергә тейеш. Ҡайһы бер осраҡта ир менән ҡатындың айырылышыуы рөхсәт ителһә лә, Аллаһ алдында был яҡшы эшкә һаналмай. Шәриғәт һәр саҡ ғаилә именлеге яғында. Боронғо ата-бабаларыбыҙ ҙа ошо мәсьәләгә бик етди ҡараған, мөмкин тиклем ғаиләне һаҡларға тырышҡан. Хатта ир кеше йәшләй көйө вафат булып ҡала икән, уның ҡатынын ситкә типмәгәндәр - уға ҡустыһы, йә иһә ағаһы өйләнер булған. Боронғо халыҡ йырында ла шулай йырлана бит: "Ағай үлеп - еңгәй ҡалһа, ебәрмәнек яттарға". Ә хәҙер ни өсөн күп ҡатындар иренән айырылып, балаларын яңғыҙ тәрбиәләүҙе өҫтөнөрәк күрә һуң? Быңдай һорауға бер генә дөрөҫ яуап барҙыр: хәҙерге ҡатындар, күпселек, ҡайҙалыр эшләп, ғаиләһен аҫрап торорлоҡ аҡса таба. Бәғзеләре айырылған иренең алиментын алыуға ла өлгәшә. Ә айырылып киткән ир ҡабаттан ғаилә ҡора...

...Баяғы йәш ҡатындың хатта ҡара ҡортто хәтерләтерҙәй итеп "сәпәгән" яуабына шаңҡып йөрөйөм ошоғаса. Бер яҡтан уйлаһаң, тураһын һалдырырға ятаҡан был гүзәл затты ғәйепләп тә булмаған һымаҡ. Бәлки, йыш ҡына "тамаҡ сылатырға" ятаҡан ире уны ошондай хәлгә еткергәндер. Ә бит хөкүмәт, ысынлап та, аҫырауһыҙ ҡалған балаға ул балиғ булғансы пособие түләй... Был мәсьәләлә ир менән ҡатындың кемеһендер аныҡ ҡына итеп яҡлашыу еңелдән түгел, әммә фәҡәт атай һөйөүенән мәхрүм ҡалған балалар күҙлегенән сығып, айыҡ ҡына фекер йөрөтөргә кәрәклеге - асыҡ. Бала кеше атаһының һәм әсәһенең берҙәй һөйөүенә һәм иркәләүенә мохтаж! Шуның өсөн дә ҡатынын "ҡара ҡорт"тарса уйларға мәжбүр иткән, хәмер ятаҡан ир-егеттәрҙә ғәйеп күберәктер шулай ҙа, тип уйлайым. Ә икенсе яҡтан, бындай ирҙәрҙең төҙәлеп киткән һәм тура юлға баҫҡандары ла күп. Быны ла онотоу ярамай. Гүзәл заттарыбыҙҙың да бер аҙ ғына сабырлыҡ ҡылып, "әсе тел"де әллә ни иреккә ебәрмәй тороуы насар булмаҫ. Балалар хаҡы өсөн. Беҙ бит - әҙәм балалары, хайуандарҙан, бөжәктәрҙән айырылабыҙ. Аллаһы Тәғәлә беҙҙе "аҡыл" тип аталған гүзәл байлыҡ менән бүләкләгән һәм ана шуның өсөн Уның кешеләргә ҡуйған талабы ла юғары.

Йәшәү мәғәнәһе тик аҡсаның күплегендә генә тормай. Һәр кем ғаиләлә үҙ урынын белеп һәм иң беренсе нәүбәттә балаларын берҙәй ҡайғыртып йәшәгәндә генә уңышҡа өлгәшеү мөмкин. Ғаилә именлеге мәсьәләһен хәл иткәндә көслө затҡа һәм шул уҡ ваҡытта гүзәлдәребеҙгә лә берҙәй талап ҡуйыр инем. Ир кеше мөмкин тиклем эш хаҡын күберәк эшләргә тырышып, араҡы тигән нәмәне бөтөнләй ауыҙға алмаҫҡа тейеш. Был - иң беренсе мотлаҡ шарт. Хәмер эсеүҙең Аллаһы Тәғәлә тарафынан ҡәтғи тыйылыуы - барыбыҙ өсөн ҡанун! Шул уҡ ваҡытта ҡатын кеше ире менән булышыуҙы икенсе планғараҡ ҡуйып, балалар тәрбиәләүгә мөкиббән бирелергә бурыслы. "Атта ла, тәртәлә лә..." тигән боронғолар. Бер-берендә һәр саҡ тәнҡитләп йәшәү бер ваҡытта ла яҡшыға алып бармай. Һәр төрлө кире яҡтары менән бер рәттән, һәммә кешенең ыңғай сифаттарын да табырға була. Бер-берегеҙҙең тап ана шул яҡшы яҡтарын эҙләргә тырышып, күп кенә етешһеҙлектәргә артыҡ иғтибар итмәй йәшәгәндә генә ғаиләгеҙҙә һау мөхит һаҡланып ҡалыр һәм балаларығыҙ ҙа бәхетле булыр, иншаллаһ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...



# БАЛАЛАР ТУРАҺЫНДА ТҮГЕЛ,

## ә балалар өҫөн китаптар кәрәк

**Ошо араларҙа Халыҡ-ара балалар китабы, йүнһүрәттәр көндәре билдәләнде. Беҙ ҙә ул көндәрҙе билдәләнек билдәләүен, әммә иң төп һорауҙы яуапһыҙ ҡалдырҙыҡ: бөгөнгө башҡорт балалар әҙәбиәте һәм башҡорт йәнһүрәттәре балалар тәрбиәһендә ниндәй роль уйнай?**

Бик сетерлекле тема был. Сөнки башҡорт әҙәбиәтендә балалар өсөн яҙған шағирҙар ҙа, яҙыусылар ҙа бар һымаҡ. Магазиндарҙа китаптар ҙа юҡ түгел. Интернетты асып ҡараһаң, һәр балалар баҡсаһында бер шағирә йә әкиәтсе тәрбиәсе эшләй, уларҙың үҙнәшер китаптарының электрон варианты ла ҡуйылған. Был материалға тотонор алдынан шуларҙың күптәренә күҙ һалып та сыҡтым. Һәм быларға өҫтәп, балалары китап уҡыу менән мауыҡҡан, үҙҙәре балаларына әҙәбиәт һатып алған һәм ҡыҙыҡһындырған әсәйҙәр менән дә бәйләнешкә индем. Бына уларҙың фекерҙәре:

**Гөлназ Яҡупова:** Ҡыҙҙарыма 10 һәм 13 йәш. Китап уҡыйҙар. Тик, үкенескә ҡаршы, башҡорт балалар әҙәбиәте менән ҡыҙыҡһындыра алмайым, сөнки уларҙы арбай алырҙай китаптар юҡ иҫәбендә. М.Кәрим менән Н.Гәйетбаевтан башҡа яҙыусыларҙы "балалар яҙыусыһы" тип әйтә лә алмайым. Сәбәп нимәлә? Яҙыусыларҙың балалар психологияһын белмәүендә, өйрәнмәүендә. Әҫәрҙәрҙең күңелһеҙ, мажараһыҙ булыуында. Миҫал өсөн, кәштәлә билдәле шағирәнең томлығы тора, балалар әҙәбиәте бүлеге тарафынан мөхәррирләнгән, бер һүрәт тә юҡ, төҫһөҙ, шиғырҙары түбән интеллектлы аудиторияға яҙылған кеүек. Китап сығара белмәйҙәр беҙҙә балалар өсөн. Шулай уҡ тәржемәләр менән дә ҡәнәғәт түгелбеҙ. "Полианна"ның сериалларын уҡып-уҡып ҡараныҡ та, апайҙарҙың үтә лә бөҙрә һәм ҡатмарлы телен ҡабул итмәнек. Рус телендә бит китап улай аңлайышһыҙ түгел, ә башҡортсаһы башҡорт балаһының башын әйләндерә алырлыҡ.

**Гөлнара Мостафина:** 5 йәшлек ҡыҙыма әлеге ваҡытта "Пеппи - длинный чулок"ты уҡып йөрөйбөҙ. "Аҡбуҙат"ты уҡығанда ундағы яҙылғандарҙы бала теленә "әйләндерәм" һәм күп китаптарҙы ла шулай итәм. Башҡортса китаптарҙы балама ҡыҙыҡлыраҡ итеү өсөн мажараларҙы үҙем өҫтәп ебәрәм, ябайыраҡ һүҙҙәр ҡулланам. Өлкән ҡыҙыма заманында Фәүзиә Рәхимғолованы уҡый торғайным. Бөгөн магазиндарға инәм дә, урап сығам. Һатып алырға теләк уятыр китаптар юҡ. Улар менән ҡыҙымды арбай алмаҫымды беләм. Бында хатаны мин яҙыусыларыбыҙҙың балалар өсөн түгел, ә балалар тураһында яҙыуында тип уйлайым. Беҙҙә ололар балалар хаҡында артыҡ сөсөләнеп, сүсәлдәп яҙа ла, шуның менән кескәйҙәрҙе биҙҙереп тә ҡуя. Ә балалар өсөн әҙәбиәттә бит, киреһенсә, балалар үҙҙәрен шундай аңлы, белемле һәм күп белергә теләгән итеп һанай. Автор уларҙы үҙе менән тиңә-тиң итеп, хатта аҡыллыраҡ, күпте күрә, аңлай, тота белгәнерәк итеп күрһәтә. Был осраҡта уҡыусы бала тап үҙенә хас булған кисерештәрҙе, тойғоларҙы таба ала.

Башҡортса йәнһүрәттәрҙе телгә алып әйтә лә алмайым. Бармы ни улар? "Сәңгелдәк"те ҡарайбыҙ. Бына ул тапшырыу ысынлап балалар өсөн. "Тамыр"ға ҡуйып китһәм, ҡыҙым иплән кенә икенсе каналға күсереп ала, ҡарап йөрөйөм дә кире ҡуям, юҡ, барыбер "Даша и ее друзья", "Фиксики" тигән йәнһүрәттәрҙе эҙләп таба.

**Нәсимә Ғиззәтуллина:** 4 йәшлек балаға уҡырға башҡортса әҙәбиәт табып булмай! Русса аңламай әле, ә башҡортса әүрәтерлеге юҡ. Китаптар бар ул, тик уларҙы бала төшөнә алмай. Шундай ҡатмарлы тел! Беҙҙең башҡорт теле ни өсөн яҙма әҙәбиәттә улай аңлайышһыҙ булып китте ул? "Йәшәгән, ти, батырҙар"ҙағы әкиәттәрҙе уҡып ҡарайым, тыңламай китә лә бара. "Золушка"ны тотһам, йүгереп килеп етә. Рәсимә Ураҡсина, Зөһрә Фәйзуллинаның китаптарына ла бер аҙ тукталып ултырып алырға мөмкин. Тағы ла бер нәмә күҙгә салына, башҡорт китаптарында һәм кескәйҙәр өсөн сыҡҡан башҡорт журналдарында ла балаларҙы табаҡ битле, ҡыҫыҡ күҙле, ҙур башлы итеп һүрәтләй ҙә ҡуялар. Ҡыҙым шундай һүрәттәрҙән ҡурҡа, "былар ямаҡай, уҡымайыҡ уларҙы" тип ситкә этә. Был нимә ул, карикатурамы, әллә артыҡ "миллилекме"? Ана, япон йәнһүрәттәрендә балалар ҡурсаҡ кеүек, ҡарап туйғыһыҙ. Беҙҙә лә бит балалар матур, ни өсөн уларҙы йәмһеҙ иргәйел формаһына ултырталар? Ҡыҫҡаһы, күп китаптарҙың һүрәтләнеше оҡшап етмәй кескәйҙәргә.

**Зилә Ниғмәтуллина:** 6 йәшлек ир балаға "Башҡорт халыҡ әкиәттәре"н уҡыйым. Хан заманғы том бар, шуны ҡат-ҡат уҡыйбыҙ инде. Мәрйәм Бураҡаеваның "Донъя әҙәбиәте"н дә ҡыҙыҡ күрә. Унда әкиәттәр артыҡ бөҙрәләтелмәй, диалогтар аша еңел итеп бирелә. Китап нәшриәте сығарған 7-8 әкиәттәр китабын да алдыҡ, шулай уҡ оҡшаны. "Доктор Айболит", "Ҡаҙҙарҡҡоштар", "Ҡыҙыл кәләпүш"тәрҙе шул китаптарҙан белдек. Башҡа телгә алып әйтерлек китапты белмәйем.

Шиғырҙарға килгәндә, улар бик наҡыҫ. Мәҫәлән, баҡсала тәркемдә утыҙ башҡорт балаһы Яңы йыл, әсәләр көнө кеүек байрамдарҙа дүрт-биш матур шиғырҙы ҡабатлап-ҡабатлап ятлайҙар. Сөнки уларға шул шиғырҙар ғына оҡшай. Һөмһөҙ, ритмһыҙ, рифмаһыҙ шиғырҙы хатта бәләкәс бала ла ятларға теләмәй бит ул.

Г. Юнысованың "100 йыр"ын, М. Сәлимовтың "Ямғыр уйнарға саҡыра"-һын яратабыҙ. Тик улар бит инде ҡасанғы баҫмалар! Ә тәржемәләрҙе бөтөнләй ҡабул итә алмайбыҙ, бала ла, үҙем дә. Ундағы тел башҡорт теленән биҙҙереү өсөн генә уйлап сығарылған һымаҡ. Был шулай уҡ йәнһүрәттәр тәржемәһенә лә ҡағыла. "Фиксики"ның тәржемәһен ҡарап көлә генә, унан "Әсәй, нинә улай итеп һөйләшәләр улар? Нисек һөйләшәр ул? Башҡортсамы ни?" тип аптырай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына ошондай фекерҙәр ишетергә тура килде башҡорт балалар әҙәбиәтен күҙәтеп барыусы һәм уларҙы ҡулланыусыларҙан. Күребеҙсә, ҡыуанырлыҡ йәки маһайырлыҡ бер нәмә лә юҡ. Бары шул асыҡлана: беҙ үҙебеҙ ниндәй авторҙарҙы уҡып үҫкән булһаҡ, бөгөнгө балалар ҙа шуларҙы уҡ ярата икән. Мәҫәлән, Агния Бартоның шиғырҙарын үҙем дә, егермене үткән ҡыҙҙарым да яттан белә. Һәм бөгөн бәләкәстәрҙең кемеһенән һораһаң да беләләр. Йырлап, үҙенән-үҙе күңелгә һыланып тора бит улар. Ганс Кристан Андерсендың әкиәттәрен, башҡорт халыҡ әкиәттәрен инде нисәнсе быуын уҡып үҫәләр? Данлыҡлы "Гарри Поттер"ҙы ла бит Джоан Роулинг балаларын әүрәтеү өсөн һөйләнә торған мажара итеп яҙа башлай. Башта беренсе ҡыҙының, унан бер-бер артлы тыуған ике балаһының эргәһендә ултырып, уларҙың ҡыҙыҡһынып янған күҙҙәрен күреп, теге йәки был яңылыҡҡа реакцияларын тикшерә-тикшерә үрелдерә хәл-ваҡиғаларҙы. Һәм беренсе китабын да малайҙар донъяһы ҡабул итмәй ҡуйыр тип шөбһәләнеп, ирҙәр исеме менән сығара. Бына нисек яуаплы ҡарай, ҡарай ғына түгел, ә ошо китап донъяһы менән йәшәй автор. Һәм бөгөн был китаптарҙы ла, улар буйынса төшөрөлгән фильмдарҙы ла балалар ҙа, ололар ҙа ҡарай. Ундағы кескәй геройҙарҙың аңына, тапҡырлығына, ҡыйыулығына хайран ҡалырлыҡ. Ә мажараларҙың төрлөлөгөнә һәм мөғжизәлегенә һушың китер.**

**Сит әҙәбиәтте лә, сит авторҙарҙы ла әллә күпме маҡтарға була. Ә бит үҙебеҙҙекеләрҙе лә маҡтағы, күккә күтәрге килә. Ҡарап торһаң, интернетта ла "Шундай-шундай балалар китабы сыҡты", "Тәржемә ителде", "Балалар әҙәбиәте буйынса ҡулъяҙмалар тикшерелде" тигән яҙмалар, фотоһүрәттәр йылтылдап ҡына тора. Нимәләр яҙыла, нимәләр баҫыла, нимәләр тәржемә ителә һуң улай булғас? Был китаптар уҡыусыһын тапмай һәм бала күңелен арбай алмай икән, ни өсөн донъя күрә? Бөгөнгө башҡорт балалар әҙәбиәте йәш быуынды тәрбиәләүҙә бер ниндәй ҙә роль уйнамай, беҙ һаман да был өлкәләгә 5-6 автор елкәһендә хәрәкәт итәбеҙ икән, бында саң ҡағыр урын бар.**

Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.

ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ

Хәйҙәр ТАПАҠОВ

### Онотолмаҫлыҡ һый

Беҙҙең ауылдан ун биш саҡрым ситтә, Хәйбулла районына яҡын Ҡаҙырша ауылы бар. Ауыл Советы башҡарма комитеты рәйесе вазифаһында саҡта унда эш буйынса йыш йөрөй торғайным. Әҙәпле, тәрбиәле, иманлы, кеселекле халыҡ йәшәй Ҡаҙыршала. Барып төшөү менән әйттереүҙе лә көтөп тормай олоһо-кесеһе клуб хеҙмәтен үтәгән элекке мәсеткә йыйыла. Иман йортондағы әңгәмә лә һәр саҡ тыныс, эшлекле шарттарҙа үтә. Әңгәмәнән аҙаҡ берәйһе ашҡа алып ҡайта. Һуңынан ғына белдем, улар мине, түрәне ихтирам йөҙөнән сиратлап һыйлағандар, ҡәҙер-хөрмәт күрһәткәндәр икән. Ҡунаҡҡа саҡырған хужаның ашы бешкән, бар һыйы өҫтәлгә ҡуйылған була. Бер барғанымда йыйылыштан һуң мине һуғыш ветераны Әхмәтшакир ҡарт үҙенең өйөнә әйҙүкләне. Ул оло йәштә булғанға күрә күпләп мал тотмай ине: сәйлек һөт бирмәле туҡал һыйыры, йәнә ишек алдын йәмләгән ҡош-ҡорто ғына бар. Барып ингәндә, һый өҫтәлгә түгел, йөндән һуғылған балаҫ йәйелгән, уратып мендәрҙәр һалынған изәнгә әҙерләнгәйне. Уртала яңы ғына мейестән сыҡҡан, ҡабарып бешкән икмәк, ике урында ҙур ике йомарлам май, һәм ашаулыҡ ҡырлатып бер биҙрә самаһы бешкән йомортҡа сәселгән. Ҡаҙы, ял һөгондорғандарҙы, ҡоротлап һурпа эсергәндәрҙе онотоп бөттөм, әммә ошо аҫыл һый, ихлас, йомарт хужа онотолмаҫлыҡ булып хәтеремә уйылды.

### Һуғыш суҡмары

Училищела уҡығанда арабыҙҙа бер егет булды. Торғаны һуғыш суҡмары ине ул, бар белгәне һуғыш, ҡан ҡойош ойоштороу. Тәмләп, тасуирлап, ләззәтләнеп һөйләгәне лә гел талаш-тартыш хаҡында, мәрәкәләүе лә шуға тартым, шаяртам, тип эскә төртөп ебәреүе йә ултырышҡа менеп ҡуныуы ла бик ихтимал. Тәнен сәләмәтләндереү өсөн түгел, ҡаршыһындағын бер һуҡҡанда тәкмәстереү маҡсатында спортзалға йөрөнө, бокс секцияһында шөғөлләнде, көтмәгәндә сәкәләшә-нитә ҡалһам, тип гел генә еңел, ҡулайлы кейенде, кеҫәһендә инде - бысаҡ, йә ҡара ҡурғаштан ҡойолған һуғыш әйберә. Бер һүҙ менән әйткәндә, әле башланмаған, башланырға ла тормаған һуғышҡа яһанып, шуны көтөп, әҙерләнеп йәшәне. Тегене өнәп еткермәй инек, уның менән аралашмаҫҡа тырыштыҡ, унан ситләштек. Һуғыш суҡмарын кем генә яратһын да хөрмәт итһен!

Оҙаҡ йылдар күҙәтеү һөҙөмтәһендә шундай һығымтаға килдем, ер шарындағы дәүләттәр хас та кешеләргә оҡшаш икән ул, кемеһелер тыныс, һыйышып йәшәргә ынтыла, бәғзе берәүһе өҫтө-өҫтөнә ҡоралланып әле тоҡанмаған һуғышҡа әҙерләнеп, уны көҫәп көн итә...

### Мыжыу

Илаҡ булды ла һуң минең малай! Өс ай тулғансы, теңкәне генә ҡоротто. Төн етһә, ҡатын менән сиратлашып йөрөп сығабыҙ. Ҡулға ла ныҡ өйрәнеп алды: күтәреп йөрөткәндә ярыңға талпан һымаҡ һылашып шымтая ла, сәңгелдәгенә һалһаҡ, ҡабаттан ярһып тызылдарға тотона. Хет ҡолаҡтарыңды яҫтыҡ менән томала!

Бөгөн минең сират. Йоҡо эләккәндә тип, ҡатын рәхәтләнеп мышнай бирә. Мин, өҫтәл шәмен ҡабыҙып, күләгәләй улай-былай йөрөйөм. Йоҡламай ятҡандыр, күрше бүлмәнән әсәйем сыҡты.

- Килтер бәпесемде, әҙерәк үҙем алып ултырайым, һинә иртәгә эшкә, ял ит.

- Рәхмәт әсәй, - ҡулымдағын тоттора һалдым, аҡланғандай әйткән булдым. - Кемебеҙгә оҡшағандыр, бигерәк илаҡ, ҡасан тымырға самалайҙыр был малай?

Әсәйем салланған сәстәрен һыпырҙы:

- Бала тигәнең ғүмер буйы мыжый инде ул!..

✓ *Беҙ аҡса тип атап йөрөткән матди байлыҡтың эквиваленты мыҫҡалдың бер яғында, икенсе яғында - намыҫ. Әлегә аҡса эпидемияһы бөтөн Ер шарын баҫып алып бара.*



ИНТЕРНЕТТАН



# АУЫРЫУ КӨЛКӨ ҺӨЙМӘҪ

■ Сәләмәтлегеңде һаҡлайым тиһәң, күберәк көлөгөҙ, тип кәңәш итә табиптар. Көлкө иммунитетты күтәрә, ҡандағы шәкәр кимәлен түбәнәйтә икән. Баҡтиһәң, көлөүҙең организмға ыңғай йоғонтоһо күптән дәлилләнгән. Мәҫәлән, бер тикшеренеү ваҡытында берҙәй туҡланған диабет сирлеләрҙең комедия ҡараған төркөмөндә шунда уҡ үҙгәрештәр булған, уларҙың ҡанында шәкәр кимәле төшкән. Көлөү - ауырыуҙы ла баҫа. Әйткәндәй, һалҡын тейҙереп, ауырып ятыусыларға ла көлөп алыу файҙалы. Көлгән саҡта һулыш алыу оҙоная, ә тын сығарыу ҡыҫҡара, әммә йышая. Был үҙенә күрә тын алыу юлдарына гимнастика булып тора. Бынан тыш, көлөү йөрәк тибеше йышлығын ҡыҫҡарта, ҡан тамырҙарын киңәйтә, иммуноглобулин бүленеп сығыуын арттыра, былар барыһы ла иммунитетҡа яҡшы тәьҫир итә.

■ Бөгөн балалар араһында һимеҙлек йыш осрай. Ғалимдар бының сәбәптәрен эҙләй. Дьюка университеты белгестәре май ҡатламдарының артыуына йорттағы туҙан да тәьҫир итә ала, ти. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, баланың организмына уртаса 60-тан алып 100 миллиграммға тиклем туҙан эләгә. Туҙан һулыш алғанда инә, бала уны уйынсыҡтарын йәки башҡа предметтарҙы ялағанда ла эләктерә. Ғалимдар туҙандың 194 өлгөһөн йыйып, уларҙың 100-ҙән ашыуын тикшергән. Туҙан составында булған матдәләрҙең өстән ике өлөшө май күҙәнәктәре барлыҡҡа килеүҙе арттыра, ә яртыһынан күбеһе - ошо күҙәнәктәрҙең артыуына килтерә. Асыҡланыуынса, көнкүрештә ҡулланылған таҙартыусы саралар, буяуҙар, косметиканың зарарлы матдәләре туҙан менән бергә организмға эләгә.

■ Айова университеты ғилимдары билдәләүенсә, кеше 2 сәғәт төнгө йоҡоһон юғалта икән, ул асыулыға әйләнә. Йәғни, хәүефләнеү, күңелһеҙләнеү, үҙеңде бәхетһеҙ тойоу йоҡо туймау менән бәйле. Һынауҙарҙа ҡатнашыусы 42 кеше төркөмдәргә бүленгән. Тәүге төркөм өйрәнгән ғәҙәте буйынса йоҡлаған (яҡынса 7 сәғәт), икенсеһе ике көн дауамында төнгө йоҡоно 2-4 сәғәткә бүлгән. Улар сама менән 4,5 сәғәт йоҡлаған. Эксперименттың әүҙем фазаһынан һуң улар төрлө ризыҡтарҙы баһалаған, ошо уҡ мәлдә ҡолаҡҡа бик ятып бөтмәгән төрлө тауыштар тыңлағандар. Был тауыш уларҙы асыуландырырға тейеш булған. Икенсе төркөмдә кире тойғолар күберәк күҙәтелгән. Матур моңло йыр ҡуйғандан һуң да уларҙың асыуы үтмәгән. Йоҡо туймау бына ошондай эҙемтәләргә алып килеүе бар.

■ Көн һайын йәшел сәй эсеү һөйәктәрҙең тығыҙлығын нығыта. Әгәр ҙә кеше һуңғы 30 йыл эсендә йәшел сәй эсһә, уның һөйәктәре ысынлап та тығыҙ булып сыға. Быны уларҙың яуаптарына һәм медицина карталарына ҡарап билдәләйҙәр. Йәшел сәй эсмәүселәр менән сағыштырғанда, уларҙа һөйәк һыныу осраҡтары 12 процентҡа һирәгерәк осраған. Эксперимент барышында йәшел сәй эсеүселәрҙең ҡайһыларының 30 йыллыҡ тәжрибәһе булмай. Уларҙа бот һөйәге һыныу осраҡтары 30 процентҡа түбәнәйгән. Йәшел сәйҙең бындай ыңғай тәьҫиренең сәбәбен ғалимдар әлегә аңлата алмай.

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...



# БАЙҘАР, ЯРЛЫЛАР ҺӘМ ОЖМАХ,

## йәғни Матди һәм рухи байлыҡ тураһында

**Румда йәшәгән бер байҙың ҡыҙы ҡыуана-шатлана белмәгән. Тормош бит: бер көн был бай бар мөлкәтен юғалтҡан, ярлылар кимәленә төшкән. Ғаиләһен шундай хәлгә ҡалдырыуына әсенеп, бигерәк тә ҡыҙының киләсәге өсөн ҡайғырып, өй хужаһы әсе күҙ йәштәре менән илай башлаған. Шул мәл урамдан йылмайып-көлөп ҡыҙы ҡайтып ингән.**

- Ниңә илайһың, әллә берәй нәмә юғалттыңмы? - тип һораған ул атаһынан. Ҡыҙының шатланыуын күреп, иҫе киткән атай кеше күҙ йәштәренең сәбәбен аңлатып биргән һәм ҡыҙының ни өсөн ҡыуаныуын һораған.

- Беҙ бай саҡта мин Хоҙай яҙаһынан ҡурҡа инем, ә хәҙер ҡасан да булһа ожмахҡа эләгеүемә ышанысым арты, - тигән ҡыҙы.

Суфыйҙарҙың һәр кинәйәле хикәйәһе уйланырға мәжбүр итә. Бына әле лә уйҙар сылбыры үҙенән-үҙе тағатылып китте. Ғүмер буйы беҙ бәхет эҙләйбеҙ һәм нимә ул бәхет, тигән һорауға яуап эҙләйбеҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күптәр бәхет менән байлыҡ төшөнсәләрен синоним һымаҡ, йәғни бер мәғәнәле һүҙҙәр кеүек ҡабул итә. Әле һүҙем байлыҡ төшөнсәһен нисек аңлауым тураһында.

Байлыҡты беҙ матдиға һәм рухиға бүлеп өйрәнгәнбеҙ: матдиһын күреп, ишетеп, ҡулыбыҙға алып ҡыуанһаҡ, рухиһын йәнебеҙ, күңелебеҙ менән тойоп, кинәнес кисерәбеҙ. Ике байлыҡ та берҙәй кәрәк, икеһенә лә өмөт итәбеҙ, теләйбеҙ. Әммә әҙәм балаларын теләктәре араһындағы айырма тап ошо юл сатында ике яҡҡа алып китә: берәүҙәр матди, икенселәр рухи байлыҡҡа өҫтөнлөк бирә. Сөнки Ер тип аталған планетала өсөнсө юл юҡ: бер үк ваҡытта йөҙ процентҡа матди яҡтан да, рухи яҡтан бай булып булмай. Тоташ һауыттарҙағы кеүек, улар береһе икенсеһе иҫәбенә тулылана йәки кәмей. Мәҫәлән, матди менән рухи байлыҡтың ҡушылмаһын йөҙ процент итеп алһаҡ, илле процентҡа тиклем матди яҡтан байыған кеше, теләйме-юҡмы, рухи байлығының өлөшөнә инергә мәжбүр була. Йәки, киреһенсә, рухи яҡтан камиллашҡандар матди байлыҡты инҡар итеп кенә изгеләр сафын арттыра. Быға изге һаналған, рухи яҡтан камиллашыуҙа өлгө булып торғандар асыҡ миҫал.

Махатма Гандиҙы Бөйөк Британия короле үҙенә саҡырған. Бөйөк илдең бөйөк кешеһе, ҡабул итеү этикетын боҙоп, король янына ябай туҡыманан тегелгән бер ҡат кейемдә барған.

- Король нисек ҡабул итте, өҫтөгөҙҙәге кейемегеҙгә аптырамаһымы? - тип һорағандар унан.

- Миндә бер ҡат кейем булһа, уның ҡарауы, королдең өҫтөндә беҙҙең икебеҙгә етерлек кейем бар ине, - тип яуап биргән ул.

Ошо миҫал үҙе үк матди байлыҡ менән рухи байлыҡ араһындағы айырмаға ишара түгелме? Матди яҡтан байығандар, шул байлығының көсөнә таянып, яңы ҡағиҙәләр, закондар, яһалма битлектәр уйлап табырға ашыға. Беҙ аҡса тип атап йөрөткән матди байлыҡтың эквиваленты мыҫҡалдың бер яғында, икенсе яғында - намыҫ. Әлегә аҡса эпидемияһы бөтөн Ер шарын баҫып алып бара. Мул аҡсалылар, хатта ки, кешелек әхлағын да үҙгәртеүгә баҙнат итә. Ә әхлаҡ, хаҡлыҡ тигән төшөнсәләр Хаҡ Тәғәлә тарафынан кешеләр матди яҡтан тигеҙ булған саҡта төшөрөлгән - шуны онотмайыҡ. Ана бит, ярты донъяны яулаған Искәндәр ҙә, үҙе үлгәс, ҡулдарын кешеләргә күрһәтергә ҡушҡан. "Фани донъяға буш ҡул менән килдем, теге донъяға ла буш ҡул менән китәм", тигәнгә ишара яһаған ул.

Динде, көнсығыш фәлсәфәһен, теософияны, эзотерик тәғлимәттәрҙе иҫәпкә алмайынса ғына, мәктәптә тарих дәрестәрендә өйрәнгәндәргә, йәғни тәүтормош кешеләре араһында матди яҡтан кемдәр байыған, тигән бер ҡатлы һорауға яуап биреп ҡарайыҡ. Әлбиттә, көслөләр, хәйләкәрҙәр һәм, һис шикһеҙ, күңелендә изгелек сатҡыһы булмағандар, башҡаның өлөшөнә ингәндәр, тигеҙлекте инҡар иткәндәр матди яҡтан байыған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, донъя артыҡ үҙгәрмәгән: балалар баҡсаһындағы матур уйынсыҡтарға талашыуҙы үҫкәс тә ташлай алмайбыҙ - тиҙ генә тарта һалып алып, ауыҙға тығырға ашығабыҙ. Сөнки һәр кеше матди яҡтан бай булырға теләй, хатта көһәй: миллиардер миллионерҙың елкәһендә ултыра, миллионер, үҙ нәүбәтендә, бәләкәйерәктәр менән идара итә - тигеҙһеҙлек баҫҡысы өҫтән-аҫҡа шулай дауам итә һәм... байҙар ҙа илай, ярлылар ҙа илай.

Теләк - ул тоҙло һыу кеүек. Теләгенә хужа булмағандар уны әсе булһа ла эсә. Ә тоҙло һыу оторо һыуһата... Пирамида башында бөгөн, ана шуның кеүек, кеҫәһе долларҙар менән тулған әфәнде ултыра һәм үҙен был донъяның аллаһы кеүек күрә, сөнки баҙар иҡтисады хөкөм һөргән осорҙа матди байлыҡ беренсе урынға ҡуйыла. Был хәүефле түгел. Ярай, кешеләрҙең берәүҙәре икенселәренең ярлылаңыуы иҫәбенә байыһын да ти, ләкин бит ошо матди байлыҡты булдырыу бөтөн кешелек заты өсөн дөйөм булған Ер-Әсәбеҙ өлөшөнә инеүҙән ғибәрәт. Кешелек "бөтәһе лә кеше өсөн" тигән лозунгты байраҡ урынына күтәреп, үҙе ултырған ботаҡты менәр йылдар буйына үҙ ҡулы менән үҙе саба - бер көн ул ботаҡ (урынһыҙыраҡ сағыштырыуым өсөн ғәфү үтенәм) Йыһан киңлегенә осор тип уйлап та бирмәйбеҙ.

Бөгөнгө көн талабына хас булмаған уйҙарҙы ситкә ҡуйып, донъяуи хәлебеҙҙе барлайыҡ. Күптән түгел бер танышым: "Етәһе байлыҡ тупланым, ҡыҙымдың киләсәге етеш буласаҡ: уҡырға инергә лә, кейәүгә сыҡһа, йәшәренә лә етәсәк", - тине, ғорурлыҡ менән. Ә уның ҡыҙын яҡшы беләм: һәләтле, тырыш бала, уҡырға инергә атаһының аҡсаһы кәрәк тә булмаҫ, бәлки. Бәлки, тием, сөнки атаһының һүҙенә төшһә, тәбиғәт биргән һәләтен юғалтып, аҡсаға ышанып, уҡыуының сифаты түбән төшөүе бар. Ул һәләтле ҡыҙҙың башында: "Бөгөн бөтөн нәмәне, хатта белемде ( дипломды ) лә һатып алып була", - тигән фекер нығынып ҡуймаһа ярар ине тип ҡурҡам. Мәҡәлә башындағы кинәйәле хикәйә тағы ла иҫкә төшә: танышым ҡыҙын бәхетле итәм тиеп, киреһен эшләп ҡуймаһа ярар ине.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Был турала мин йога буйынса лекцияла Уҡытыусынан ишеттем. Һиндостанда ҡырағай маймылдарҙы тотоу өсөн бик ҡыҙыҡлы ысул уйлап тапҡандар. Кокос сәтләүегенең эсен таҙартып, маймылдар ашарға яраҡлы берәй аҙыҡ һалалар ҙа, сәтләүекте кире көпләйҙәр. Шунан сәтләүектә маймылдың ҡулы һыйғандай ғына тишек уялар ҙа, уны ағасҡа ҡуша бәйләйҙәр. Аусы табышын ситтән күҙәтеп тора. Уны-быны уйламаған (гөмүмән, улар уйлаймы икән?) маймыл тәмле ризыҡты алыу өсөн ҡулын тишеккә тыға һәм ризыҡты усына йома. Шул мәлдә көтөп торған һунарсы йәнлекте эләктерә һала. "Ә маймыл ниңә ҡасып китмәй һуң?" тип һорарһығыҙ.**

**Ул бит тишеккә усын яҙып тыҡҡайны, ә хәҙер ризыҡ йомолған йоҙроҡто тишектән кире тартып ала алмай. Ризыҡты ташлар ине лә - ашау теләге көслө.**

**Беҙ, кешеләр ҙә, үҙебеҙҙең төрлө теләктәребеҙҙең ҡоло түгелме? Усты яҙһаҡ, нәфсе тигән сәтләүектән ҡулды тартып алыр инек бит, ә, йәмәғәт?**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

БАҠСА

# ТУЙЫНДЫРА ЛА, ҠЫУАНДЫРА ЛА

**Көндәр йылына. Ауыл халҡы, ҡалаларҙағы баҡсасылар өсөн дә ҡыҙыу мәл башлана. Әлегә түтәл яһарға, орлоҡ сәсергә иртәрәк булһа ла, апрель айының үҙ мәшәҡәттәре етерлек. Шуларҙың ҡайһы берҙәре тураһында Федоровка районы Батыр ауылында йәшәүсе баҡсасы Миҙхәт Багаев менән һөйләштек.**

➔ **Баҡса эштәрен ҡасан башлайһығыҙ?**

- Баҡсасы эше март айында уҡ башлана - ул ағастарҙы ашлау мәле. Ҡороған урынын киҫеп ташлап, аҫтына кәрәкле сортлы үҫентенең ботағын ялғайбыҙ. Быны ағасҡа һут килгәнсе эшләргә кәрәк, тимәк, март аҙағына тиклем, ҡар иреп бөтмәҫ борон була инде. Ҡырағай алмағасҡа сортлы алмағас ботағын ялғаһаң, ул икенсе йылына емеш бирә. Ялғаған ботаҡтың ерегеп китә алыу-алмауы баҡсасының тәжрибәһенән тора. Алмағас бөтә баҡсаларҙа ла үҫкән емеш, апрелдә уның олонон ағартырға онотмағыҙ. Сөнки ҡояш ҡыҙыуында олон ярылыусан була. Шулай уҡ апрелдә ҡоротҡостарҙан һаҡлау өсөн алмағастың олонон уратып һарыҡ тиреһе бәйләп ҡуйырға була. Һарыҡ тиреһен таҫма итеп ҡырҡып алабыҙ ҙа, йөнлө яғын тышҡа ҡаратып, ағас төбөнәрәк бәйләйбеҙ. Бөжәк шул йөндән үтеп менә алмай. Ағас япраҡ ярғас, уны алып ташларға кәрәк була. Беҙҙең яҡта алмағастың иртә сәскә атыуы кәрәкмәй, сөнки ҡырауҙар күп төшә. Әбына ағас төбөнә ҡар өйөп ҡуйһаң, ер оҙаҡ йылына һәм ҡар һыуы ла файҙалы була. Был көндәрҙә ағастарҙағы ҡороған ботаҡтарҙы ҡырҡып ташлап, урынын балауыҙ, махсус "Садовый вар" һөртөп эшкәртәбеҙ, йә булмаһа ҡыҙыл балсыҡты иҙеп һыларға мөмкин.

➔ **Йәшелсә баҡсаһын нисек тәрбиәләйһегеҙ?**

- Ер ҡарҙан асылыу менән баҡсаны сүп-сарҙан таҙартабыҙ. Мин йәшелсә баҡсаһын көҙҙән һөрөп ҡуям, шулай иткәндә ер ҡар һыуын яҡшы һеңдерә. Әлеге мәлдә ерҙе ҡаҙып, тупраҡты тиреҫ менән бутап сығам, тиреҫте ағас төптәренә лә һалам. Шулай ҙа тиреҫ менән йыл һайын ашларға ярамай, ҡый үләндәре күбәйеп, ҡорттар үрсеп китеүе бар. Минераль ашлама ҡулланған юҡ, үҙебеҙ сәсеп үҫтергән йәшелсә-емеш экологик яҡтан таҙа булһын тип тырышабыҙ. Ҡоротҡостарҙан халыҡ ысулдары - һабын, ағас көлө, һуған ҡабығы, тәмәке япрағы файҙаланабыҙ. Апрель аҙағынан май уртаһына тиклем картуф сәсеү эштәре башлана, был эште йыл нисек килеүгә ҡарап ойоштораbыҙ. Картуф орлоғон сәсеүгә тиклем бер ай тирәһе алдан баҙҙан сығарып, аласыҡ иҙәненә йәйеп ҡуйып, шыттыра торабыҙ. Орлоҡ йылының күҙәнәкләнһә, картуф тиҙ шыта, әммә оҙон итеп һабаҡландырып шыттырмаҫҡа кәрәк. Шулай уҡ картуф баҡсаһы көҙҙән һөрөп ҡуйыла, мин уны ике өлөшкә бүлеп сәсәм. Яртыһына картуф, яртыһына күп йыллыҡ үлән, ҡуҙаҡлылар культураһы ултыртам. Арпа, бойҙай, һоло сәсеү тупраҡты азотҡа байыта, күп йыллыҡ үләндәрҙән люцерна, ат борсағы (эспарцет) ла сәсәм. Беренсе йылда арпа ғына сыға, икенсе йылға үләне лә үҫә, малға бесән дә була, тупраҡ та ял итә. Был сәсеү әйләнеше тип атала. 4-5 йыл һайын картуф менән үләндәр урынын алыштырып торам, ерҙе һөргәс, үлән кире сыҡмай. Әйткәндәй, баҡсаны ҡый үләне баҫып китмәһен өсөн картуф ултыртҡандың өсөнсө көнөнә ерҙе тырматып сығам. Аҙаҡ бер аҙнанан тағы тырматам, өс тапҡыр шулай эшләһәң, аҙаҡ утап сығыу эше еңеләйә. Картуф эргәһенә мал һәм шәкәр сөгөлдәрө сәсәм, 2-3 йылға бер тапҡыр тиреҫ менән ашлайым. Картуф уңдырышлы булһын өсөн 2-3 йылға бер сортын алыштырып торорға кәрәк. Әйткәндәй, картуфтың колорадо ҡуңыҙы яратмаған сорттары була. Атамаларын тура килтереп кенә әйтә алмам, әммә колорадо ҡуңыҙы нескә һәм нәҙек япраҡлы картуфты ярата, сөнки бындай сорт тиҙ өлгөрә. Ә бына һабағы ҡаты, япрағы ҡалын сорттарҙы ашап бармай. Ҡоротҡостарҙан тулыһынса ҡотолоп булмаһа ла, көҙҙән гәрсис сәсеп ҡуйыу файҙалы, ул йәйгеһен бал ҡорттарына һеркә лә бирә.

➔ **Сит илдәрҙә үҫә торған емеш-еләк, йәшелсә, ағастар үҫтерәһегеҙме?**

- Йәй эҫе килгәндә ҡарбуз, ҡауын сәсәбеҙ. Йөҙөмдөң "Изабелла" тигән ҡырағай сортын үҫтерә инек, хәҙер шәкәрле сортына күстек. Шулай ҙа сит ил емеш-еләктәрен, ағастарын әллә ней үҫтереп бармайбыҙ, үҙебеҙҙә үҫкәндәргә етмәй барыбер. Помидор, кәбеҫтә, борос үрсетмәһен март айында уҡ сәстек, парникка 25 градус йылы торғанда күсереп ултыртабыҙ. Әле иртәрәк, ҡояш ныҡ йылытҡаны юҡ. Фаразлауым буйынса, быйыл тупраҡ дымды күп алды, ҡар һыуы яйлап иреп, ергә яҡшы һеңде, шуға уңыш та мул ғына булыр. Йәй ҙә эҫе килмәҫ, ямғырлы булыр һымаҡ. Күңел һалып, көс түгеп ҡараған баҡсабыҙ мул уңыш биреп, хеҙмәтебеҙҙең һөҙөмтәһенә ҡыуанырға яҙһын.

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Шуға күрә иртәгеҙҙе еңгәй көйләнеш биргән ҡыҫҡа күнекмәнән башлағыҙ. Уянғандан алып өйҙән сығып киткәнгә тиклем күп нәмәгә өлгөрөргә кәрәк кеүек тойолһа ла, күҙҙәрегеҙҙе күнектереү өсөн ни бары 10 минут етә. Әшул ваҡытта сәләмәтлегегеҙгә ниндәй ҙур өлөш индерәһегеҙ. Был күнегеүҙәр комплексын ғүмерегеҙ дауамында иң мөһим эш итеп алырға тәҡдим итәм.

## "Йәйғор" күнегеүе

Яңы ғына уяндығыҙ. Күҙҙәрегеҙҙе асмайынса ғына йәйғорҙо күҙаллағыҙ. Был һеҙҙең уянғандан һуң иң беренсе уйығыҙ, йәйғор төҫтәрендә балҡып, мейегеҙҙе хәйерле иртәгә һәм яҡшы күреү теләгенә тоҡандыра. Күнекмә 1-3 секундты ала.

## "Ҡәнәғәт бесәй балаһы" күнегеүе

Күҙҙәрегеҙҙе йомған килеш арҡағыҙға ятығыҙ һәм аяҡ бармаҡтарын һуҙып, башығыҙҙы артҡа ташлап, һуҙылығыҙ. Муйынығыҙҙы мөмкин тиклем һуҙығыҙ. Умыртҡа һөйәген мөмкин тиклем һуҙырға тырышығыҙ. Быһың өсөн бесәйҙәрҙең нисек һуҙылғанын ҡарағыҙ. Күнекмә 3-4 секунд дауам итә.

## Иртәнге көйләнеш

Һуңынан 5 секундҡа көсөргәнештән арынығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм үҙ аллы: "Хәйерле иртә! Һаумы минең яңы көнөм! Күҙҙәрем асыҡ күрә. Күҙҙәрем яңы тормош көсө менән тула", - тигеҙ.

Күнекмәне яҡшы кәйеф менән 3 тапҡыр ҡабатлағыҙ.

## "Әлифба" күнегеүе

Арҡағыҙҙа ятҡан килеш, күҙегеҙҙе асығыҙ һәм, уларҙы хәрәкәтләндереп, алфавитты беренсе хәрефтән һуңғыһына тиклем күҙҙәрегеҙ менән яҙып сығығыҙ. Шунан һуң торорға ла була.

## Лимфа тамырҙарын таҙартыу

Урын-ерегеҙҙе йыйған, йыуынған арала ауыҙ уртын таҙартырға кәрәк. Муйын, йөҙ һәм йотҡолоҡтоң лимфа төйөндәре күҙҙең лимфа тамырҙары менән бәйле. Инфекция, экологик ағыуҙар, метаболизм продукттары лимфа тамырҙарында тотҡарлана. Уларҙағы токсиндарҙы таҙартыу өсөн, ауыҙға бер ҡалаҡ үҫемлек майы ҡабырға һәм уны 3-5 минут тоторға кәрәк. Ошо ваҡыт эсендә май "бысрана" һәм консистенцияһын үҙгәртә. Һуңынан уны төкөрөргә, тамаҡты хәмер менән сайҡарға һәм тештәрҙе таҙартырға кәрәк. Тел аҫтындағы һәм танау-аңҡауҙағы лимфа юлдары күҙҙәрҙең лимфа системаһы анастомозалары менән бәйле, шуға күрә уларҙың таҙалығы күҙҙәрҙең лимфа юлдарын таҙартыуҙы тәьмин итә. Әгәр бындай таҙартыу эшләмәгәндә, токсик лимфа танау-аңҡау өлкәһенән күҙҙең лимфа системаһына әләгеп, шунда ултырырға мөмкин.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# СӘСЕҮ ӘЙЛӘНЕШЕН...

**Сәсеү әйләнеше - йыл һайын төрлө культураларҙың урындарын алмаштырып сәсеү. Быңың өсөн баҡса майҙанын ҙурлығына ҡарап 4-10 өлөшкә бүләһең дә төрлө йәшелсә-емеште билдәле бер тәртип буйынса сәсәһең. Сәсеү әйләнеше ғилми нигеҙләнгән алым һәм агрономдарға ғына түгел, һәр баҡсасыға тупраҡтың уңдырышлылығын күтәреүе һәм яңыртыуы менән файҙалы. Сәсеү әйләнешен ҡулланған баҡсасы бәләкәй генә ер участкаһында ла йыл һайын мул уңыш ала.**

Йәшелсәләрҙең тамыры төрлө матдәләр бүлеп сығара, хатта киләһе йыл шул уҡ урынға сәскән осраҡта үҙенә зыян килтереүе бар. Мәҫәлән, ҡайһы бер үҫемлектәр "колины" тигән ағыулы матдә бүлеп сығара һәм ул оҡшаш төр үҫемлектәрҙең үҫешенә ҡамасаулай. Тамыры бүлеп сығарған матдә сөгөлдөр һәм шпинатҡа бигерәк насар тәьҫир итә. Ҡабаҡлылар ғаиләһенә ҡарағандарға һәм кәбеҫтә, редис, петрушка, борсаҡ, кишергә бер үк урынға түтәл эшләү артыҡ зыянлы түгел. Кукуруз, ҡуҙаҡлылар, ялпаҡ һуған бер урында ултырһа ла яҡшы уңыш бирә. Бик күп емеш ағастары үҙен ағыулай, шуға ҡарт ағас эргәһенә яңы үҫентеһен ултыртмаҫҡа кәрәк. Ағыулы матдәләр бүлеп сығарыу бер сәбәп булһа, икенсе мөһим сәбәп - бер ғаиләгә ҡараған йәшелсәләрҙең ҡоротҡостары, ауырыуҙары ла оҡшаш була. Кәбеҫтә, кишер, һуған себендәре йәшелсәләрҙең урынын алмаштырып сәсмәгән ерҙә нык үрсей. Шуға былтыр кәбеҫтә ултырған ергә торма (редька) һәм шалҡан сәселмәй, кәбеҫтәнең "кила" тип аталған бәшмәк ауырыуы булғанда ете йыл шул урынға кәбеҫтә ултыртмайҙар.

Бер ғаиләгә ҡараған йәшелсәләр оҡшаш файҙалы матдәләр менән туҡлана. Ниндәй туҡлыҡлы матдә талап ителеүенә ҡарап, йәшелсәләрҙе өс төркөмгә бүлеп ҡарарға була: "емеш" төркөмөнә - фосфор кәрәк, "япраҡ" төркөмөнә - азот, "тамыр" төркөмөнә - калий. Ноҡот борсағы (фасоль), борсаҡ, соя, ҡуҙаҡлылар, туҡранбаш (клевер), люцерна, ат борсағы (эспарцет) тупраҡты азот менән байыта. Күп йыллыҡ ҡуҙаҡлы үләндәрҙең тамыры тәрәнгә китеп үҫеп, калий, фосфор, кальций матдәләрен өҫкә сығара.

Сәсеү әйләнешен практикала нисек ҡулланырға һуң? Тәүҙә баҡса майҙанын теүәл дүрт өлөшкә бүлергә. Шуның бер өлөшөнә серетмә йә тиреҫ һибеп (бер сутыйға 25-30 кг), азот талап ителгән "япраҡ" төркөмөнә ҡараған йәшелсәләрҙе сәсергә. Уларға кәбеҫтә һәм салат үләненең бөтә төрҙәре, япраҡлы сөгөлдөр (мангольд), япраҡлы сельдерей, ялпаҡ һуған, шпинат ҡарай. Был йәшелсәләрҙән һуң тупраҡта азот әҙерәк ҡала, әммә фосфор һәм калий етерлек була. Шуға киләһе йылына унда фосфор талап иткән "емеш" төркөмөнә ҡараған томат, борос, баклажан, ҡыяр, ташҡабаҡ, ҡабаҡ, бөртөклөләр сәселә. Уларға серетмә һәм тиреҫе ике тапҡыр аҙ һалырға. Өсөнсө йылына шул урынға калий талап ителгән тамырҙыҡтарҙы ултыртырға кәрәк: картуф, башлы һуған, һарымһаҡ, кишер, сельдерей һәм петрушканың тамырлы төрө, редис, торма, шәкәрле торма (дайкон), сөгөлдөр. Дүртенсе йылына был ер участкаһына ҡуҙаҡлылар сәселә, улар тупраҡты азотҡа байыта. Шулай итеп, барлыҡ үҫемлектәргә лә файҙалы дүрт йыллыҡ цикл барлыҡҡа килә.

Баҡсала тағы бер урында 3-4 йыл ултырған еләк тә булһа, сәсеү әйләнеше биш участкалы үҙ эсенә ала. Еләкте тамыраҙыҡтар үҫкән ергә күсереп ултыртыу яҡшы, еләктән һуң "япраҡ" төркөмөнә ингән йәшелсә сәселә. Сәсеү әйләнеше буйынса эшләйем тиһәң, төрлө ҡыйынлыҡтарҙан ҡурҡмаҫҡа кәрәк. Мәҫәлән, "емеш" төркөмөнә ҡараған томаттан һуң тамыраҙыҡ сәсергә кәрәк булһа ла, картуф ултыртырға ярамай. Сөнки томат һәм картуф икеһе лә эт ҡарағаты һымаҡтар ғаиләһенә ҡарай. Картуфты ҡыяр, ҡабаҡ ултырған урынға сәсеү отошло. Картуфты икенсе урынға ултыртырға мөмкинлек булмаған хәлдә, ҡаҙып алғас та баҫыуға сидераттар сәсергә кәрәк. Бына шулай, теләгәндә, бәләкәй генә баҡса участкаһында ла сәсеү әйләнеше буйынса эшләп була.

✓ *Әгәр ҙә Хоҙай менән һин һөйләшәһең икән - был доға ҡылыу; әгәр ҙә Хоҙай һинең менән һөйләшә икән - был шизофрения.*

*(Томас Сас).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТ БЕЙЕҮСЕЛӘРЕ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**14-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тәнәфес. Ҡаф. Һарытау. Әсмә. Ләйсән. Азимут. Ишәк. Ҡан. Аманат. Урама. Карап. Брахма. Ғәбитова. Акростих. Тула. Рима. Етди. Ниәт. Лиза. Быу.

**Вертикаль буйынса:** Абдуллин. Әмирханова. Айғыр. Һәптән. Отелло. Куб. Нәҙерғолова. Ирина. Талаҡ. Хи. Сафиуллина. Балҡантау. Азамат. Сәкән. Набат. Алма.

ХОККЕЙ

**Континенталь хоккей лигаһының 2018-2019 йылғы уйын миҙгеле "Салауат Юлаев" хоккей командаһы өсөн тамам. Финалға сығыу өсөн уҙған уйындар үҙенең үтә лә көсөргәнешле, ҡыҙыу, ҡайһы саҡта аяуһыҙ булыуы, хоккейсыларҙың оҫта уйыны менән Рәсәй хоккей тарихында ҡаласағына шик юҡ. "Авангард" менән юлаевсылар 6 уйын уҙғарҙы. Ҡыҙғаныска күрә, һуңғы алышта Омск командаһы 0:1 иҫәбе менән еңеү яуланы.**

# МИҘГЕЛ ӨСӨН РӘХМӘТ!

Ләкин әлеге еңеү уларға еңел бирелмәне. "Салауат Юлаев" уйынсыларының уйыны юғары кимәлдә булды. Ә ҡапҡасы Юхи Метсола иһә был уйындың төп геройына әйләнде. Уның үҙ ҡапҡаһын шул тиклем дә оҫта һаҡлауы хатта көрәштәш команда көйәрмәндәрен дә һоҡландырҙы. "Авангард"тың көйәрмәне Олег Якубов: "Юхиның уйнағанын ҡарауы үҙе бер кинәнес булды. Был егет ысын булмышы менән хоккей өсөн яратылған. Өфө командаһы ошондай ҡапҡасыһы булыуы менән бәхетле", тип билдәрҙе. Метсолдың ҡапҡаһына, миҙгел барышында, 17 матчта бөтәһе 684 һөжүм яһалған һәм ул шуларҙың 654-ен кире ҡаҡҡан. Процент дәүмәлендә был күрһәткес 95,6-ға тиң. Был юғары оҫталыҡ билдәһе, тип белдерә бер тауыштан хоккей белгестәре. Шулай уҡ әлеге уйында Йоонас Кемппайнендың звеноһын билдәләп үтмәү мөмкин түгел. Команданың тәүге звеноһы матчтың яртыһын тиерлек үҙ елкәһендә "күтәрҙе".

Уйын, ысын мәғәнәһендә, үтә лә көсөргәнешле булды. Командаларҙың төп 3 осорҙан һуң тағы ла 3 өҫтәлмә осорҙа уйнағанын ҡарап ҡына ултырып хатта көйәрмәндәрҙең хәле бөтөп китте. Ә хоккейсылар тураһында әйтеп тә тораһы юҡ. Был матчта еңеп, уйынды Омскиға күсереү өсөн улар барыһын да эшләне. Шуға күрә әлеге матч һәм, ғөмүмән, бөтә миҙгел өсөн "Салауат Юлаев" хоккей командаһына рәхмәт әйтәбеҙ. Киләһе миҙгелдә иһә Гагарин Кубогы Өфөгә әйләнеп ҡайтыр тип ышанабыҙ, сөнки "Беҙ яҡшыраҡ булдырабыҙ"!

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.**



СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13 апрель "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+

**14 апрель "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

**16 апрель "Сыңғыҙхандың аҡ болото"** (С. Айытматов) 12+

**17 апрель "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйә 12+

**18 апрель "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+

**19 апрель"Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**18-19 апрель "Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов), романтик драма 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**13 апрель "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 12.00, 14.00 0+

**14 апрель "Сказка синего моря"** (Б. Ходырев). 12.00, 14.00 0+

**13-14 апрель "Почему весна красна?"** (В. Щербакова). 16.00 0+

**18 апрель "Лиса-сирота"** (О. Штырляева). 16.00 0+

**19 апрель "Индийская легенда"** (Н. Гусева, С. Потабенко). 19.00 12+

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Март һәм апрель айҙарында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Өфө ҡалаһынан** Рина Мөслимова, Таңһылыу Хәсәнова, Лилиә Нафиҡова, Фуат Ҡолдәүләтов, Гөлдәр Әхмәтғәлиева, Гөлгөнә Рыҫҡолова, **Стәрлебаш районы** Табылды ауылынан Салауат Вәхитов, **Белорет районы** Сермән ауылынан Солтан Сиражетдинов, **Әбйәлил районы** Ҡужан ауылынан Ғәйфулла Хәйруллин, Байым ауылынан Йомабикә Яҡупова, **Шишмә районы** Түбәнге Хәжәт ауылынан Ләйсән Төхфәтуллина, **Баймаҡ районы** Таулыҡай ауылынан Зәһира Оморҙаҡова, **Баймаҡ ҡалаһынан** Зифа Рәхимова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ!

Яҙ нуры, яҙ йылыһы күңелдәрегеҙҙә тағы ла елкетеп ебәрһен, сәләмәтлектә, именлектә, күңел көрлөгөндә, муллыҡта, байлыҡта йәшәгеҙ! Йылдар дауамында нығынған дуҫлығыбыҙға тоғро булыуығыҙҙы юғары баһалайбыҙ һәм рәхмәтлебеҙ һеҙгә!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

ХӘТЕРКИТАП

# ҺӘЙКӘЛДӘРГӘ ЛАЙЫҠ ШӘХЕС

**Башҡорт әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы, республикала беренселәрҙән булып матбуғат эшмәкәрлеген ойоштороусы был шәхес милли мәҙәниәттә лә тәрән эҙ ҡалдыра. Уның яҙыусылыҡ һәм шағирлыҡ һәләте иһә бөйөк бишйыллыҡтар төҙөлөшө барған мәлдә асыла һәм нығына. Күрәшкә һәм хеҙмәткә дәрләндергән поэмалары ошо ваҡытта яҙыла. Ҡыҫҡаһы, ул ил яҙмышында әүҙем ҡатнаша, битарафлыҡ уның өсөн ят сифат була. "Ҡабаттан йәнләнгән фотоһүрәттәр" проектында шәхестәрҙең тарих архивтарынан, фәнни хеҙмәттәрҙән, музейҙарҙан тупланған фотолары һәм костюмдар буйынса рәссам Әлиә Байрамғолованың кинорежиссер Булат Йосоповтың "Беренсе Республика" тип аталған тулы метрлы тарихи нәфис фильмын төшөрөү майҙансығынан һаҡлаған фотолары тәҡдим ителә.**



Яҙыусы Дауыт Юлтый менән актер Рәмзил Сәлмәнов.

**Дауыт Исхаҡ улы ЮЛТЫЕВ** (актер Рәмзил Сәлмәнов уйнай) - 1893 йылдың 18 апрелендә Ырымбур губернаһының Юлтый ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килгән. Уҡыу өсөн аҡса табыу маҡсатынан төрлө эшкә ялланып эшләй. Һуңғараҡ үҙ ауылында балалар уҡыта. Беренсе Донъя һәм Граждандар һуғышы яландарында ҡорал менән дә, һүҙ менән дә, ҡаурый менән дә һуғыша. Был йылдарҙа ул "Ҡыҙыл йондоҙ" гәзите мөхәррире, Туксоран кантонында партия секретары вазифаларын башҡара. Мәскәүҙә ҡыҙыл профессура институтында уҡый, "Октябрь" журналын, "Әҙәби удар" гәзитен мөхәррирләй, милли мәҙәниәт ғилми-тикшеренеү институтында эшләй, Башҡортостан Яҙыусылар союзын булдырыуҙа ҡатнаша. Яҙыусы һәм йәш Башҡорт республикаһының йәмәғәт эшмәкәре 1921 йылда "Башҡортостан" гәзитенең мөхәррире булып эш башлай. Ошо уҡ йылдың аҙағында В. Ленин менән осраша. Ленин йәмәғәт тормошоноң ҡатмарлы яҡтарын баҫма матбуғатта яҡтыртыу үҙенсәлектәре буйынса кәңәштәр бирә, "Башҡортостан" гәзитенә ҡағыҙ менән ярҙам итә. Уның биографияһы биттәрен һанап сыҡҡандан ғына ла беҙҙең алдыбыҙға дарманы ташып торған һәләтле һәм үҙ эшенә мөкиббән киткән шәхес баҫа. 1938 йылдың 10 июлендә, хөкөм ҡарары тормошҡа ашырылған ваҡытта, Дауыт Юлтыйға 45 йәш кенә була.

Прозаик булараҡ, "Ҡан" автобиографик романы, "Бәләкәй Ҡотош", "Камилә" һәм башҡа хикәйәләре аша асыла. Ул бик шәп драматург та була. 1920 йылда яҙылған "Ҡарағол" пьесаһынан башлап, башҡа әҫәрҙәре лә театрҙар сәхнәһендә ҡуйыла. Башҡорт әҙәбиәте һәм халыҡ ижады тарихы, теорияһы мәсьәләләре буйынса күп кенә фәнни мәҡәләләр баҫтыра.

Юлтыевтар ғаиләһенең тормошонда иң сағыу ҙа, иң аяныслы ла ваҡиғалар тап Өфөлә була. Шуға ла баш ҡалабыҙҙа Дауыт Исхаҡ улы хөрмәтенә обелиск йәки һәйкәл ҡуйыу күптән хәл ителә торған мәсьәлә. Әлегә Ленин урамындағы 2-се йортҡа ҡуйылған мемориаль таҡта ғына беҙгә ошо шәхесебеҙ тураһында һөйләй. Тап ошо йорттоң 7-се фатирында ҡасандыр бәхетле ғаилә йәшәй һәм бер төндә тап ошонан тәүҙә һөйөклө ир һәм атай, һуңғараҡ ике бәләкәй бала әсәһе лә ҡулға алына.

**Гөлнара ЯРУЛЛИНА,**
**тарих фәндәре кандидаты,**
**проект авторы.**

АФАРИН!

# БИРЕШМӘҪКӘ САҠЫРАЛАР

**"Бирешмә!" беренсе балалар премияһының тәүге еңеүселәре үҙҙәренең лайыҡлы наградаларын алды. Республиканың төрлө төбәктәренән - Ишембай, Учалы, Йылайыр, Архангел, Бөрйән районларынан һәм Өфөнән ете үсмер иң яҡшыһы тип танылды.**



"Бирешмә!" беренсе балалар премияһының төп маҡсаты - ҡыйыулыҡ һәм әүҙем граждандыҡ позицияһын күрһәткән, тормошта ауыр хәлдәрҙе еңеп сыҡҡан һәм һайлаған юлында ҙур уңыштарға өлгәшкән балаларҙы һәм үсмерҙәрҙе хөрмәтләү, рәхмәт белдереү. Конкурсҡа 137 бала ҡатнашты. Башҡорт йәштәре араһында абруй ҡаҙанған шәхестәрҙән һәм "Бирешмә!" төркөмөнән торған жюри ете номинацияла еңеүселәрҙе билдәләне. Йәш булыуҙарына ҡарамаҫтан, һәр еңеүсенең хеҙмәте тос; уларға еңел булмаған тормош һынауҙарын үтергә тура килгән. Быны уларҙың исемдәре: Ләйсән Золотарева, Илнур Ғарипов, Ирек Үмәрбаев, Сафия Хазиморатова, Гүзәл Шәрәфетдинова, Эвелина Вәхитова, Зилиә Буранбаева.

Башҡортостан" дәүләт концерт залына йыйылған тамашасылар беренсе лауреаттарҙың еңеү шатлығын бүлеште. Башҡортостан Башлығының Ижтимағи-сәйәси үҫеш идаралығы етәксеһе Урал Килсенбаев "Бирешмә!" премияһының әһәмиәте ҙур булыуын билдәләне, сөнки ул үсмерҙәрҙе изге эштәргә дәртләндереүгә йүнәлтелгән. Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров ата-әсәләрҙе балалар менән "Тамыр" телеканалы тапшырыуҙарын ҡарарға саҡырҙы. 36 тапҡыр донъя чемпионы Вил Ғабдуллин һәм йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Руслан Хәбибов спортсы Илнур Ғариповка премия тапшырғанда һуҡыр йөҙөүсенең рух көсөнә һәм оптимист булыуына һоҡланыуын йәшермәне.

- Минең өсөн "Бирешмә!" премияһының төп ҡиммәте - балаларҙың уңыштарҙы танырға һәм тиҫтерҙәре өсөн ҡыуаныврға, үҙҙәренең ҡылығын, ҡаҙаныштарын анализларға һәм баһа бирергә өйрәнеүендә, - ти "Тамыр" телеканалы директоры Гөлназ Ҡолһарина. - Беренсе премияны тапшырыуҙы ҙур изгелек байрамына әүерелдерергә ярҙам иткәндәрҙең барыһына: "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының һоҡланғыс коллективына, бағыусыларға һәм партнерҙарға рәхмәтлемен! Оҫталыҡ һәм һиҙгерлек өсөн "Тамыр" телеканалы коллективына айырым рәхмәт!

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҺАҠЛАРҒА КӘРӘК БУЛҒАС...

## бәхет түгел инде ул

Бар эттәр ҙә - эт балалары.

**(Уильям Филдс).**

Үбешеүҙе ҡатын-ҡыҙ бер генә минутҡа булһа ла һөйләнмәй торһон өсөн ир-егеттәр уйлап тапҡан.

**(Жюльен де Фалкенаре).**

Балаларынан үҙен хөрмәт итеүҙе талап иткән ата-әсә был хөрмәткә лайыҡлымы икән?

**(Петер Тилле).**

Дошмандарыңды һайлауҙан туҡтап, ҡул аҫтыңдағылар менән ҡәнәғәтләнә башлағанда йәшлек тә бөтә.

**(Эмиль Сьоран).**

Беренсе рәттә ултырғандар йыш ҡына суфлерҙар әйтеп торғанға ғына күнегеп китә.

**(Влодзимеж Счисловский).**

Демократия - ул тауыш биреү түгел, ә тауыштарҙы һанау.

**(Том Стоппард).**

Түләй алыу һәләтлеген килем түгел, ә темперамент билдәләй.

**(Логан Смит).**

Бәхетеңде һаҡла, тиҙәр. "Һаҡларға" кәрәк булған бәхет бәхет түгел инде ул.

**(Жилбьер Сесброн).**

Уйлылар бар, уйһыҙҙар бар. Ә иң ҡурҡынысы - берәүҙәрҙең башҡалар өсөн уйлауы.

**(Хораций Сафрин).**

Әгәр ҙә Хоҙай менән һин һөйләшәһең икән - был доға ҡылыу; әгәр ҙә Хоҙай һинең менән һөйләшә икән - был шизофрения.

**(Томас Сас).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кешенең ҡатынын һағыҙаҡ тешләй. Был ҡатын бар көсөнә ҡысҡырып, ихатала йүгереп йөрөй башлай. Уларҙың йорто эргәһенән бер ир үтеп бара. Ихата эсендә ҡысҡырып йүгергеләп йөрөгән ҡатынды аҡылдан шашҡан тип уйлап, уның иренең эшләгән урынына йүгерә. "Эй, дуҫ кеше, - ти ул, - ҡатының аҡылынан яҙған, ахры, бар, ҡайта һал". Ир кеше был хәбәргә әллә ни әһәмиәт бирмәй һәм былай ти: "Ул минең ҡатыным түгелдер, һин яңылышаһыңдыр, булмаған нәмәнән яҙып була тиме ни?"**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 12 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 296